✓*Күп һанлы ахмаҡтар араһында аҙ һанлы яҡшыларға ҡаршы көрәшкәнгә ҡарағанда, аҙ ғына һанлы яҡшы кешеләр араһында күп һанлы ахмаҡтарға ҡаршы көрәшеү һәйбәтерәк.*

*(Антисфен).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27 НОЯБРЬ - 3 ДЕКАБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ - АҠЪЮЛАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №48 (414)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Халыҡ кәсептәре лә…**

тәрбиәләй баланы



4

**Йәш уҡытыусыны…**

боҙло һыуға ташлауҙан файҙа булырмы?



5

**Башҡорт шәйехе Зәйнулла Рәсүлев "эше",**

йәғни Батша хөкүмәте һәм суфыйсылыҡ



7

**Егерме йылдан һуң…**

"Ташлама утты, Прометей!" тағы сәхнәлә



16

14 **ТВ-программа**


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Власҡа яңы етәксе килгән икән, тимәк, кемдәрҙер эштән китәсәк, яңылар киләсәк - йолаһы шундай. Ә шулай ҙа яңы етәксе уға тиклем эшләгәндәрҙе лә "үҙ арбаһына ултыртып", үҙенсә эшләргә өйрәтһә, яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән?*

***Румил АҘНАБАЕВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары:*** Яңы етәксенең элекке етәксенең ҡулы аҫтында булған бөтә кешеләрҙе лә алмаштырыуы мотлаҡ түгел, тип һанайым. Коллективта электән эшләгәндәр араһында тәжрибәле, яуаплы, үҙ эшен белгән белгестәр ҙә байтаҡ була бит. Ундай белгестәрҙе, минең кешеләр түгел, тип кенә бөтөнләй тәжрибәһеҙҙәр менән алмаштырыу дөйөм эштең алға китешенә лә аяҡ саласаҡ. Үҙ эшен яратҡан, үҙ эшен яҡшы белгән белгескә етәксеһе алмашыныу бер нисек тә тәьҫир итмәүе лә мөмкин. Эш өсөн эшләгән бындай белгестәрҙе баһалай, эшләтә белергә кәрәк. Икенсенән, республиканың юғары власть органдарында үҙ эшен ныҡлы белгән, яуаплы, тәжрибәле белгестәр тулып та ятмай әле ул. Хатта уларҙы алмаштырырға мөмкинлек тә юҡ, ә инде алмаштырабыҙ, тиһәк, белгестәрҙе ситтән алырға тура киләсәк. Белгестәрҙе йыш алмаштырыу башҡа етәкселәргә лә кире йоғонто яһаясаҡ, улар ҙа үҙ эшен башҡармай, "сумаҙан кәйефе" менән йәшәйәсәк. Иң ҡурҡынысы: күпләп белгестәрҙе алмаштырыу сәйәси репрессияға килтерергә тейеш түгел.

***Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН, философия фәндәре докторы, БР Фәндәр академияһы академигы:*** Власҡа яңы етәкселәр килгән ваҡытта кадрҙар сәйәсәте һәр ваҡытта ла бик сетерекле йүнәлеш ала. Был яңылыҡ коллективтарҙа ниндәйҙер борсолоу тыуҙыра, хеҙмәт тотороҡлоғона аяҡ сала. Шуға күрә, минеңсә, кадрҙар менән эш иткәндә һәр ваҡыт бик уйлап эшләргә кәрәк. Был - бер. Икенсенән, белгестәрҙе алыштырған ваҡытта ниндәйҙер яҡынлыҡ, туған-тумасалыҡ, танышлыҡ принцибы түгел, ә тәү сиратта уларҙың профессиональ мөмкинлектәре, кимәле иҫәпкә алынырға тейеш. Белгестең профессиональ кимәле бик юғары булһа, етәксе уның йәшенә лә ҡарап торорға тейеш түгелдер. Әгәр етәксе оло йәштә булһа, ул үҙенә алмаш ҡарай башларға, эште ышаныслы рәүештә ҡалдырып китерлек яңы кадрҙар әҙерләргә, йәғни үҙенең мәктәбен булдырырға тейеш. Әгәр ошолар булмаһа, беҙ үҙебеҙҙең традицион йолаларыбыҙҙы, бер быуын менән икенсе быуын алмашыныу принциптарын юғалтабыҙ. Кадрҙарҙы алыштырған осраҡта һаҡлыҡ менән эш итергә, эштән китеүсе белгескә яңы эш урыны тәкдим итергә кәрәк. Шул ваҡытта ул яңы етәксегә ҡаршы йөрөмәйәсәк, оппозицияға бирелмәйәсәк. Әгәр коллективтағы хеҙмәткәрҙәр, мине алыштырырҙар инде, тип ҡурҡып ултырһа, был да көрсөккә алып киләсәк. Ниндәйҙер эш урынында үҙ функцияларын үтәгән кешенең беҙҙең күҙ алдында ҙур мәктәпте үтеүе билдәле. Әгәр ҙә беҙ ошондай мәктәпте үткән кешеләрҙе пыран-заран таратып бөтһәк, бер нисә йылға үҙебеҙҙең ниндәйҙер мөмкинлектәребеҙҙе туҡтатып ҡуясаҡбыҙ бит. Шуға күрә, кадрҙар мәсьәләһендә яңы етәкселәргә ашыҡмай эш итеүҙәрен теләр инем. Юғиһә, тарихтан күренеүенсә, власть алмашыуҙар осоронда беҙ бик талантлы кешеләрҙе юғалттыҡ, ә был инде күп кенә мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә тотҡарлыҡтар тыуҙырҙы. Беҙ үҙебеҙҙең кадрҙарҙы юғалтмаҫҡа, ә һаҡларға тейешбеҙ. **Унан һуң, милли республикаларҙа етәксе урындарға рухлы кешеләрҙе ҡуйырға кәрәк. Әгәр кеше үҙ республикаһын ярата, уның патриоты икән, уны етәксе итеп әҙерләү ауыр түгел. Республикала тыуып үҫмәгән, ситтән килгәндәр патриот була алмай, улар етәксе урындарға трамплин өсөн генә килә икәнен дә онотмайыҡ.**


**(Дауамы 2-се биттә).**


## УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ГӘЗИТЕБЕҘҘЕ ТАРАТЫУҘА ЯРҘАМ ИТӘЙЕК

**"Киске Өфө" гәзите минең ҡулыма осраҡлы ғына килеп эләкте. Шунан һуң мин унан айырылғаным юҡ. Гәзитте өс йыл ғына алдырһам да, уның биттәрендә уҡығандарым ун йылға етерлек.**



Башҡортостандың, халҡыбыҙҙың, телебеҙҙең, шәхестәребеҙҙең үткәндәрен хәҙергеһенә сағыштырып, киләсәген күҙаллап, ҡайғыртып сығарылған һәр һанын, һәр битен ентекләп уҡып сығам, уҡығанды һеңдереп, анализлап, уйланғансы, бер аҙна үтеп китә һәм гәзиттең артабанғы һаны килә. Бына шулай фекер фекергә ялғана. Аҙна буйы, йыл буйы "Киске Өфө"лә яҙылған фекерҙәр, аҡыл, ваҡиғалар солғанышында йәшәйһең...

"Киске Өфө"нө алдырып уҡыусыларҙы мин баҫманың ижадташ дуҫтары, тип һанайым. Шулай ҙа беҙ ысын дуҫтар булып иҫәпләнер инек, әгәр ҙә үҙебеҙ генә уҡып ҡалмай, гәзиттең тиражын арттырыуҙа, йөкмәткеһен төрләләндереүҙә ярҙам итә алһаҡ. Мин үҙем такси хеҙмәтендә эшләйем. "Киске Өфө" гел эргәмдә. Минең пассажирҙарым тәғәйен ергә барып еткәнсе, гәзитте ҡарап, ҡайһы бер мәҡәләләрен уҡып өлгөрә, ҡыҙыҡһына, һорап алып та ҡалалар. Башҡа гәзит уҡыусыларға ла, яратҡан баҫмабыҙҙы таратыуҙа үҙ өлөшөбөҙҙө индерәйек, тип өндәшер инем.

**Фәүис ИСЛАМҒОЛОВ.**
**Баймаҡ районы,**
**Аҡморон ауылы.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# БЫЙЫЛ ҠЫШ ӘЛЛӘ БУЛА, әллә булмаймы?

**...йылдан-йыл һыу ҡытлығын нығыраҡ тоя барабыҙ. Яндарында оло диңгеҙ, океан булғандарға рәхәт, улар һыуға ҡытлыҡ кисермәй, дымға лысма мулығып йәшәй, тиер инек, уларҙы һыу баҫа, шторм-цунамиҙар ҡайыҙлай. Диңгеҙ, океан ярҙарын төйәк итеүселәр йәшәгән ерҙәрен ташлап, эскә, ҡоро ерҙең үҙәгенәрәк сигенә бара. Улар сигенә, әммә Ер шары икһеҙ-сикһеҙ түгел, түп-түңәрәк, сигенеүҙең дә сиге була. Бер саҡ һыу үҙәккә килеп етһә, нишләрбеҙ? Яйлап-яйлап ерҙе ялмай барған диңгеҙ һыуы сөсө һыуҙар менән ҡатышып, уларҙы эскеһеҙ итә килә. Ер шарында йылдан-йыл сөсө эсәр һыу катастрофик рәүештә кәмей бара.**

Йылайыр районының Ҡәҙерша ауылы аҡһаҡалы, мәсетенең имам-хатибы, милләтебеҙҙең арҙаҡлы ир уҙаманы, ил ағаһы Нуретдин олатай Игебаев ("Туфан яйлап ҡалҡа, унан дингә ҡайтып ҡына ҡотола алырбыҙ..." 2008 йыл, 36-сы һан) был йәһәттән үҙ фекерен белдереп: "Туфан һыуы яйлап ҡалҡа, Ахырызаман ҡайһы ерҙәргә хәҙер үк килә. Әгәр ҙә беҙ көналдан Хоҙайға ялбарып, зар ҡылмаһаҡ, шундай уҡ афәттәр беҙҙе лә көтә. Хоҙай беҙҙе ике тапҡыр иҫкәртте бит инде...", - тигәйне. Беҙ барыбыҙ ҙа ахырызаман етеүен нисектер һыуҙың ҡапыл, бер мәлдә күтәрелеп килеп баҫыуы, кешелекте һәм барса тереклекте юҡ итеүе тип аңлап өйрәнгәнгә күрәлер ҙә, ғәмәлдә был хәлдәрҙең әле үк барғанын аңлап еткермәйбеҙме икән? Был һорауға аныҡ ҡына яуап биреүе лә ҡыйын. Шул уҡ ваҡытта йылдан-йыл тәбиғәттә киҫкенләшә барған үҙгәрештәр беҙҙе һиҫкәнергә лә мәжбүр итә. Әле бына элек беҙҙә ҡыш ныҡлап хужа булған ноябрь аҙағында ҡайһы бер ағастар бөрөһөнә тулышып, ни япраҡ ярырға, ни туңып ҡатырға белмәйенсә, ултыра. Белгестәр хатта ҡайһы бер ҡоштарҙың быйыл йылы яҡҡа һаман да китергә йыйынмауы хаҡында хәбәр итә. Кем-кем, ҡоштар белмәйенсә тороп ҡалмайҙыр инде беҙҙең яҡта. Ҡоштар яңылышмай. Алданмай ҙа. Шулай ҙа икеләнеү тойғоһо бар тереклектең, шул иҫәптән кешеләрҙең дә күңелен биләй. Һәр кем бөгөн шулай уйлайҙыр: быйыл ҡыш әллә була, әллә булмаймы?

Был күренештәр, әлбиттә, тәбиғәттәге киҫкен үҙгәрештәргә: яҙҙарын-йәйҙәрен -ямғырҙар, көҙҙәрен-ҡыштарын ҡарҙар яумауға бәйле. Тәбиғәттәге бындай үҙгәрештәрҙе шулай уҡ Ер шарының ғәләмдәге торошона, хәрәкәт итеүенә, ғәләм-ара мөнәсәбәткә, йыһан характерына ла бәйләп аңлатып булалыр.

ӘММӘ...

**Ҡыштар көҙҙәргә, яҙҙар йәйҙәргә оҡшай башлаған, миҙгелдәр, төшөнсәләр, мәғәнәләр буталған бер мәлдә кешеләрҙең төркөмдәргә бүленә барыуы һағайта барыбер. Кешеләр үҙҙәренең тәбиғи бүленешен онотоп, байҙарға һәм ярлыларға, олигархтарға һәм хәйерселәргә, "яңыларға" һәм "ҡәҙимгеләргә", диндәге төрлө секталарға бүленә. Кем белә, бәлки, ошондай бүленештәр булмаһын өсөн дә Хаҡ Тәғәләбеҙ беҙҙе төрлө ҡәүемдәргә, милләттәргә бүлгәндер. Кем белә, бәлки, тәбиғәттә барған катаклизмдар кешелекте был йәһәттән иҫкәртергә итеүҙәндер, бының менән Хоҙай кешелекте хаҡ юлдан тайпылмаҫҡа өндәйҙер. Шағир Рафаэль Сафин әйтмешләй: "Буталды был донъя, буталды, кешеләр ҙә бөттө буталып..."**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Власҡа яңы етәксе килгән икән, тимәк, кемдәрҙер эштән китәсәк, яңылар киләсәк - йолаһы шундай. Ә шулай ҙа яңы етәксе уға тиклем эшләгәндәрҙе лә "үҙ арбаһына ултыртып", үҙенсә эшләргә өйрәтһә, яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән?***

**(Башы 1-се биттә).**

***Вил КӘРИМОВ, пенсионер:*** Яңы етәксе үҙенә тиклем эшләгән кешеләргә реаль ҡарарға тейеш. Үҙенә йөкмәтелгән бурысты ул кемдәр менән, кемдәр ярҙамында атҡарып сыға ала - иң тәүге уй шул булырға тейеш. Был осраҡта, коллективындағы белгестәрҙең һиңә мөнәсәбәте, яҡынлығы йә алыҫлығы - икенсе планда, ә беренсе планда - ул белгестәрҙең профессионаллеге, эш һөҙөмтәләре булыуы шарт.

Бөгөнгө көндә, ысынлап та, әлеге ҡуйылған һорау бик актуаль булып тора. Һуңғы йылдарҙа етәксе булып үрләтелгәс тә эргә-тирәһенә үҙенең яҡындарын, дуҫ-иштәрен йыйыусы етәкселәр һаны артып киткәйне. Таныш-тоноштарын йыйыу етәксе өсөн, бәлки, уңайлылыр ҙа. Был уларға, һин - миңә, мин - һиңә, тип, бер-береһенә арҡа терәп йәшәргә, оҙаҡ эшләргә мөмкинлек бирә. Ләкин дөйөм эштең һөҙөмтәһе нисек буласаҡ бит? Элек бындай хәлдәр артыҡ күҙәтелмәй торғайны, был кире күренеш һуңғы йылдарҙа илебеҙҙе айырыуса баҫып алды.

***Әмир ТАЛИПОВ, уҡытыусы:*** Юғары власҡа килгән кеше үҙенән түбәнерәк ултырған етәкселәрҙе алыштыра, ул тағы үҙенән түбәнерәк торғандарына алмаш эҙләй. Етәксе менән бергә коллективтарҙа эшләп ултырған хеҙмәткәрҙәр ҙә эштән ебәреүҙәрен көтөп ултыра. Бына әле ошондай хәл күҙәтелә республикала һәм гәзиттең был һорауҙы күтәреп сығыуы юҡҡа түгел. Кешенең күп йыллығы хеҙмәтен бер юлы һыҙып ҡына ташлап булмай бит. Элекке кадрҙар артабан да быға тиклемге темп менән ныҡлы эшләһен өсөн яңы етәксенең уларға ҡарата ышанысы, ярҙамы ғына түгел, улар менән уртаҡ тел таба белеүе лә мөһим.

**Гөлнәзирә ЗӘЙНУЛЛИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Ғафури районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу барыуы тураһында тағы ла бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

➔ Әлбиттә, гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Уларға **микротулҡынлы мейес, кеҫә телефоны, сепаратор, электр сәйнүге, үтек** һәм башҡа төрлө матур бүләктәр отторасаҡбыҙ. Квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 300 кеше "Дини календарь" алып ҡыуанасаҡ.

➔ Әйткәндәй, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

➔ **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**50665** индекслы **"Киске Өфө"** алты айға **330 һум 24 тин, 50673** индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - **360 һум 24 тин** тора.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанда Федераль власть органдары коллегияһы ойошторола. Уға һаулыҡ һаҡлау, күҙәтеү, контроль һәм башҡа федераль власть органдарының республика территорияһында эшләгән подразделениелары етәкселәре инә. Яңы кәңәшләшеү органы менән Башҡортостан президенты Рөстәм Хәмитов етәкселек итәсәк. Коллегия ултырыштарында Башҡортостандың социаль-иҡтисади һәм стратегик үҫешенә туранан-тура ҡағылышлы булған федераль ведомстволар компетенцияһындағы киҫкен мәсьәләләр ҡараласаҡ.

✓ Башҡортостан президенты Рөстәм Хәмитов "ЮТэйр" авиакомпанияһы генераль директоры Андрей Мартиросов менән осрашты. Осрашыу барышында Башҡортостан Республикаһының "ЮТэйр" авиакомпанияһы менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрен үҫтереү мәсьәләләре, киләһе биш йылға ике яҡлы хеҙмәттәшлек программаһы ҡаралды. Бөгөнгө көндә был компания ярҙамында "Өфө" халыҡ-ара аэропорты" асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә 700-ҙән ашыу эш урыны булдырылған, республиканың осош-техник составы тотороҡло эш менән тәьмин ителгән.

✓ Башҡортостанда ведомство-ара электрон документтар әйләнеше системаһы индерелә. 18 ноябрҙә Башҡортостан президенты Рөстәм Хәмитов ошо хаҡтағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Республика Хөкүмәтенә 25 декабргә тиклем системаны тест режимында сафҡа индереүҙе ойоштороу хаҡында бойороҡ бирелде. Дәүләт власть органдары был системаға әкренләп ҡушыласаҡ. Мәғлүмәттәр менән эске алмашыныу архитектураһы башҡарма власть органдарын, федераль ведомстволарҙың территориаль бүлексәләрен һәм урындағы үҙидара органдарын үҙ эсенә ала.

✓ БР Финанс министрлығы коллегияһында республикала 2012 йылға тиклем бюджет сығымдарының һөҙөмтәлелеген күтәреү программаһы проекты ҡаралды. Финанс ресурстарының сикләнгән булыуы шарттарында бюджет саралары менән идара итеүгә етди ҡараш, сығымдарҙың һөҙөмтәлелеген күтәреү бурысы беренсе планға сыға. БР Финанс министрлығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, былтыр республика тупланма бюджетының һөҙөмтәһеҙ сығымдары өлөшө 5 процент самаһы тәшкил иткән.

✔ *Йәмәғәт, ә һеҙ беләһегеҙме, йыл һайын донъяла нисә тел юҡҡа сыға? Ә нисә милләт? Бына юлбарыҫтарҙың һанын беҙ яҡшы беләбеҙ, ә халыҡтар һәм милләттәр һанын беләбеҙме?*



АҘНА ШАҢДАУЫ

# ЮЛБАРЫҪТЫ ҺАҠЛАЙБЫҘ,

## ә әҙ һанлы халыҡтарҙы кем яҡлар?

**Йәмәғәт, ишеттегеҙме икән бер хәбәрҙе, юҡ микән? Йәнәһе, Санкт-Петербургта юлбарыҫтарҙы ҡотҡарыу буйынса халыҡ-ара форум булып үткән икән. Ишеттегеҙме? Хаҡмы был хәбәр? Ә! Тимәк, ысынлап та булған икән был йыйын. Ишеттем дә ышанманым. Дөрөҫөрәге, хәбәргә ышандым. Үҙемә ышанманым. Яңылыш ишетәмдер, тип уйланым. Тимәк, үткән аҙнала Питерҙа (беҙҙең етәкселегебеҙҙең тыуған ҡалаһына, йәғни) Юлбарыҫ мәсьәләләре буйынса халыҡ- ара форум булып үткән инде. 13 илдең етәкселеге, башлыса премьер-министрҙар йыйылған икән. Уның һөҙөмтәләре буйынса юлбарыҫтарҙы ҡотҡарыу буйынса глобаль стратегия ҡабул ителде, тип хәбәр итә беҙгә ваҡытлы матбуғат саралары. Йәмәғәт, бында эш документтар менән генә сикләнмәйәсәк.**

Юлбарыҫтарҙы ҡағыҙ киҫәгә ҡотҡара алмай бит инде. Унда аҡса кәрәк. Аҡса буласаҡ. Әҙ ҙә түгел, күп тә түгел. 45 миллион доллар. Быныһы - Рәсәй өлөшө генә. Йәғни, һәр бер юлбарыҫ өсөн - 100 мең доллар. Беҙҙең Алыҫ Көнсығышта ни бары 450 юлбарыҫ тороп ҡалған да баһа. Йәмәғәт, һеҙҙең кеҫәгеҙҙә йөҙ мең доллар бармы? Йәки, банкылағы иҫәбегеҙҙә? Йөҙ мең доллар һумдарҙа күпме була тип иҫәпләй башланығыҙмы? Утыҙға ҡабатлағыҙ. Бер доллар яҡынса утыҙ һум ул. Йә? Нисә мең килеп сыҡты? Өс миллион һуммы? Бармы бындай сумма? Йә, һеҙҙең уртаса эш хаҡы күпме? Ун мең, тиһегеҙме? Доллармы? Ә-ә-ә, һуммы ни! Өс миллион һумды нисә йылда аласаҡһығыҙ инде? Һананығыҙмы? Мин арифметикала бик көслө түгел.

Был әле юлбарыҫтарҙы ҡотҡарыу өсөн бүленгән аҡсаның бөтәһе лә түгел. Германия, мәҫәлән, Бикин йылғаһы бассейнындағы урмандарҙы һаҡлап алып ҡалыуға тәүҙә 2,5, шунан 4 миллион евро бүлгән.

Беҙҙең Премьер-министр, ғөмүмән, хайуандарҙы ярата ул. Өйөндә ике эте лә бар. Тәүҙә берәү генә - Кони атамалы лабрадор ине. Ә Болгарияға барып газ торбаһын Европаға һуҙыу тураһында килешеп ҡайтҡайны, был илдең премьеры Владимир Владимировичҡа тағы ла бер көсөк бүләк итте. Ҡараҡасан овчарҡаһы. Уның ҡушаматы Йорго булғайны, әллә Владимир Владимировичҡа оҡшаманы, әллә Кониға, ни булһа ла Интернет аша бар халыҡ менән бергәләп ул эткә ҡушамат эҙләргә булып киттеләр. Бына бит ул ҡайҙа үҫешкән демократия! Һәр бер мәсьәләне хәл итер өсөн халыҡ фекерен белешеп, тыңлап ҡына торалар. Кеше ни, тырышты инде. Беҙҙең халыҡтың фантазияһы бай бит. Бына ҡайһы бер тәҡдимдәр - Йорк (Америкаға сәләм!), Йог (Һиндостанға), Йемен (гәрәптәр ҡыуанһын), Йена (Япония үпкәләмәһен!). Урыҫ халыҡ ҡушаматтары ла ситтә ҡалырға тейеш түгел - Шарик, Тузик, Бобик, Пират, Моська, Белка, Стрелка, Каштанка. Ана бит күпме атама!

Хәйер, ситкәрәк киттем, буғай, һүҙ юлбарыҫтар хаҡында ине бит. Юҡ, тәүҙә Владимир Владимировичтың хайуандарға булған һөйөүе тураһында тағы ла бер нисә кәлимә. Аҡ айыу һәм ҡар барыҫы, леопард һәм Алыҫ Көнсығыш киты - Премьер-министр иғтибарына эләккән ҡырағай йәнлектәрҙең тулы булмаған исемлеге был. Ғөмүмән, ҡырағай тәбиғәтте яҡлау кәрәк һәм күп кенә бөтә донъяға билдәле шәхестәр быны менән даими рәүештә шөғөлләнә. Мәҫәлән, Филипп, Эдинбург герцогы, Великобританияның батшабикәһе Елизавета II-нең хәләл ефете. Швецияла һәм Испанияла ла был эш батша ғәиләһе йәнәптәре ҡулында. Йәмәғәт, аңланым, ул илдәрҙә батшаларҙың ҡырағай тәбиғәтте һаҡлауҙан һәм яҡлауҙан башҡа эше юҡ. Әллә тим, беҙҙеке лә шул уҡ хәлдә микән?

Юлбарыҫтарҙың хәле ысынлап та мөшкөл. Үтә мөшкөл. Егерменсе быуат башында донъяла уларҙың һаны 100 мең самаһы булған. Әле 3 мең 200 генә ҡалған. Көн һайын Ер шарында бер юлбарыҫ юҡҡа сыға икән. Тимәк, 450 көндән Рәсәйҙә бер генә лә юлбарыҫ ҡалмаясаҡ. Ваҡытында яҡламаһаҡ.

Йәмәғәт, ә һеҙ беләһегеҙме, йыл һайын донъяла нисә тел юҡҡа сыға? Ә нисә милләт? Бына юлбарыҫтарҙың һанын беҙ яҡшы беләбеҙ, ә халыҡтар һәм милләттәр һанын беләбеҙме? Әйтәйек, водь тиген халыҡ хаҡында ишеткәнегеҙ бармы? Ә уларҙың һаны Рәсәйҙәге юлбарыҫтарға ҡарағанда ике тапҡырға әҙерәк бит - ни бары 200 кеше генә. Ә, һеҙ беләһегеҙме, йыл һайын Ер шарында бер тел юҡҡа сыҡҡанын? Йәғни, ҡасандыр ул телдә һөйләшкән кешеләрҙең балалары, ейәнейәнсәрҙәре, вариҫтары ерҙә йәшәй. Ә тел юҡҡа сыға. Был һеҙҙе борсомаймы?

Шул уҡ Уссури тайғаһында, Амур йылғаһы бассейнында юлбарыҫтар ғына түгел, кешеләр ҙә йәшәй бит. Улар - удэге - һунар һәм балыҡсылыҡ менән ғүмер итә. Һаны ни бары бер мең тирәһе. Әлбиттә, юлбарыҫтарҙан күберәк. Әммә күпкә түгел. Ә бит удэгенан тыш был ерҙәрҙә нанайҙар, ульче, негидалдар, нивхтар, эвендар һәм эвенктар, орочи тормош көтөргә тырыша. Һеҙ был халыҡтар хаҡында ишеткәнегеҙ бармы? Юлбарыҫтарҙы һаҡлап алып ҡалыуға аҡса түккән оло түрәләр был милләттәр хаҡында беләме икән? Амур буйында йәшәгән халыҡтарҙың ерендә алтын табылған. Таныш хәл, эйе бит? Был ҡиммәтле металды йыуғандан һуң тәбиғәт менән нимә була, беләһегеҙме? Белмәһәгеҙ, Баймаҡ районының Һәмән һәм Түбә ҡасабаларына ғына барып ҡарағыҙ.

Амур буйында алтын йыуыу башланғас, эвендарҙың көтөүлектәре һәм һунар иткән урындары юҡҡа сыға, балыҡ тотҡан йылғалар бысрана, һайыға һәм һаҫый. Урындағы халыҡ ахыр сиккә етеп ҡоралға тотоноргә мәжбүр. Был хаҡта һеҙ, йәмәғәт, хәбәрҙәрме? Юҡмы ни? Ә юлбарыҫтарҙы яҡлау тураһында бар донъяға хәбәр тараталар. Ә бәлки, Президент һәм Премьер-министр был хаҡта белмәйҙер, тимәксегеҙме? Аркадий Охлопков, Амур өлкәһенең "Абориген" хәрәкәтенең етәксеһе, хаттар яҙып Мәскәүгә, Кремлгә барған. Президентҡа инә алмаған.

Йәмәғәт, Аллаға шөкөр, илебеҙ ҙур, халыҡтар күп, ана Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙан һуң Башҡортостанда сарматтар ҙа табылған, имеш. Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттарының береһе был хәлдә хуплап сығыш яһаған, йәнәһе. Булһа, булғандыр. Татарҙар араһында, мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа милләттең бер өлөшө "булғар" тип яҙылғайны. Татарҙар нык борсолдо. Шулай булмай ни - был бит "бүлгелә һәм хаким ит" тигән принциптың бер сағылышы ғына. Күп һанлы милләтте шулайтып тарҡатырға, әҙәйтергә, һәм ахыры сиктә юҡҡа сығарырға - был сәйәсәт бер бөгөн түгел бит инде. Аҙ һанлы халыҡтарҙың вәкилдәрен берәү ҙә тыңламай, уларҙың фекеренә берәү ҙә иғтибар итмәй. Ана Алыҫ Көнсығышта һәм Себерҙә әллә күпме милләт вәкиле йәшәй. Ер аҫтынан нефть һурғанда, газ сығарғанда, алтынкөмөш йыуғанда уларҙың мәнфәғәттәрен кем булаһа ла ҡайғыртамы? Юҡ.

Эйе, йәмәғәт, рәсми кимәлдә аҙ һанлы халыҡтар дәүләт ҡарамағында. Уларҙы яҡлауға йүнәлтелгән махсус программалар, законлар, указдар күпләп ҡабул ителгән. Әммә уларҙың береһе лә йүнләп эшләмәй. Эш нимәлә һуң, тиһегеҙме? Башҡа батшалар үҙ халыҡтарын ҡайғыртмай ҙа баһа. Улар ҡырағай хайуандарҙы яҡлай. Ә нишләп беҙҙекеләр башҡаса ҡыланырға тейеш әле һуң?

Юҡҡа сығыу алдында торған ҡайһы бер Рәсәй халыҡтарының исемлеген килтермәксемен: шор, селькуп, тофалар, ненец, ханты, манси, алеут, орок, энец, ительмен, удэге, эскимос, юкагир, алютор, нивх... Был исемлекте кем дауам итер?



**Таһир ИШКИНИН.**

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

## СИЛӘГЕНӘ КҮРӘ....

### ҡапҡасы

**Һорау: "Ни өсөн бөгөнгө көндә боронғо башҡорт халыҡ йырҙары кимәлендәге йырҙар тыумай?"**

**AE-LINA, йәш башҡарыусы:** Тамашасы ниндәй музыкаға өҫтөнлөк бирә - башҡарыусы шундай йыр йырлайҙыр, минеңсә. Бөгөнгө көндә тәҡдим итеүсе роленда күберәк тамашасы сығыш яһай. Сөнки киң информация технологияларында хит-парад ише һайлап алыу конкурстары музыкаль каналдарҙың тамашасы менән аралашыу сараһына әйләнде. Шуға күрә лә, был проекттарҙы әүҙем күҙәтеп, уларҙа әүҙем ҡатнашҡан музыканттар, билдәле, тамашасы хөкөмөнә улар ҡабул итә алмаҫлыҡ әйберҙәр бирә алмай. Тамашасының күпселеге ниндәй йырҙарға өҫтөнлөк бирә - тап шундайыраҡ йырҙар яҙыла. Минеңсә, йәш композиторҙар тамашасы һайлаған мода артынан эйәргәнсе, тамашасыны эйәртерлек, модаға әйләнерлек йырҙар ижад итергә тейеш. Әлбиттә, быны өсөн халыҡ йырҙарын белеү генә етмәй, уларҙы яратырға ла кәрәк. Шул ваҡытта ғына музыка сәнғәте халыҡ йырҙарына яҡынайыр.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанда һунарсылыҡ биләмәләрендә 750 ҡабан аулауға өҫтәмә лимит бүленгән. Республика президенты ҡарарына ярашлы, быйылғы көҙгө-ҡышҡы һунар миҙгелендә ҡабан аулау 2250 баштан артмаҫҡа тейеш. Һунар итеүгә рөхсәт алыу өсөн йәрәбә 2 декабрҙә үтәсәк. Әле Башҡортостанда 10 мең ҡабан иҫәпләнә. Был - илдәге иң юғары күрһәткестәрҙең береһе. Былтыр ҡабан аулауға 1500 рөхсәт бирелгән, улар буйынса һунарсылар 800-ҙән ашыу ҡабан алған.

✔Рәсәй Юристар ассоциацияһының Башҡортостан бүлексәһендә Йәш юристар ассоциацияһы булдырылды. Уның рәйесе итеп Башҡорт дәүләт университеты ҡарамағындағы Хоҡуҡ институты студенты Дим Булатов, аппарат етәксеһе итеп ошо уҡ уҡыу йорто студенты Ринат Сафин һайланды. Йәштәр ойошмаһы киң эшмәкәрлек йәйелдермәксе. Мәҫәлән, 2011 йылдың ғинуарынан граждандарға бушлай юридик консультация биреүсе күсмә үҙәк эшләй башлаясаҡ, йәмәғәт юридик ҡабул итеү бүлмәләре асыласаҡ.

✔Башҡортостандың ҡайһы бер муниципаль берәмектәрендә сарматтар йәшәй - 2010 йылда Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында иҫәп алыусылар ошондай мәғлүмәткә юлыға. Уларҙың аныҡ иҫәбе, башҡа халыҡ вәкилдәре кеүек үк, халыҡ иҫәбен алыуға рәсми йомғаҡ яһап баҫтырып сығарғандан һуң ғына билдәле буласаҡ.

✔Һуңғы аҙнала республикала ОРВИ менән сирләүселәр һаны 12 мең 300-гә еткән, был үткән аҙна менән сағыштырғанда 12,6 процентҡа артыҡраҡ. Сирләләр араһында балалар күберәк, әле Башҡортостанда яҡынса 8600 бала ауырый. Өфөлә бындай сирлеләр һаны 3 700-гә еткән. Баш ҡала 866 мең 300 кешегә кизеүҙән прививка яһалған, был республика халҡының 21,4 процентын тәшкил итә. Роспотребнадзорҙан хәбәр итеүҙәренсә, әлегә кизеү менән сирләүселәр юҡ, ғөмүмән, быйыл республикала кизеү эпидемияһы көтөлмәй.

✔1-6 декабрҙә Стәрлетамаҡ ҡалаһында республика театрҙарының фестивале була. Сара Республика йылына арнала. Уның төп маҡсаты - милли театр сәнғәтен үҫтереү, заман башҡорт драматургтарын ижад итеүгә дәртләндереү һәм Башҡортостандың драматургия мираҫын пропагандалау, тамашасыларҙы театрҙарға йәлеп итеү.

✓ Өсөнсө осорҙа Петр Счастливый 4-се тапҡыр майҙан хужалары ҡапҡаһы алдында ҡыҙыл ут тоҡандырҙы. Реванш, йәғни үс алыу уйыны бына шулай ҡунаҡтар файҙаһына 4:1 иҫәбенә тамамланды.



ӘЙТӘГҮР!

# ҺЫРА ЭСЕҮ ...
## эскелеккә тәүге аҙым!

**Һыра - алкоголле эсемлекме, әллә юҡмы? Мәғәнәһеҙ һорау, әлбиттә. Әммә һыраның яңыраҡ ҡына спиртлы эсемлектәр рәтенә индерелеүенә ҡарағанда, һорау урынлы яңғырай. Ысынлап та, күптән түгел РФ Дәүләт Думаһы депутаттары, алкоголь продукцияһы әйләнешенә дәүләт көйләүе тураһындағы законға үҙгәрештәр индереп, һыраны спиртлы эсемлектәр менән тиңләне. Һыра алкоголгә ылығыуҙың төп сәбәбе икәнлеген иҫәпкә алһаң, был күптән кәрәк. Бөгөн төп ҡулланыусылар рәтен үҫмерҙәр һәм йәштәр тәшкил итә. Хатта илебеҙҙә 11,5 мең бала һыраны үҙ итһә, үҫмерҙәрҙең 82 проценты ошо ғәҙәткә дусар булған. Был үҙгәрештәр үҙ көсөнә инеү менән спирты 5% - тан кәм булмаған һыраны халыҡ күп булған урындарҙа, киосктарҙа һатыу, телевидение аша рекламалау тыйыласаҡ. Шулай уҡ һыра етештереү һәм һатыу өсөн дә лицензия алыу ауыр буласаҡ. Халыҡтың ҡарашын белергә теләп, бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек:**

**Әлмира Мырҙабулатова, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:** Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәмғиәтебеҙҙе эскелек йолоп алып барған заманда йәшәйбеҙ. Бигерәк тә йәш быуын алкоголь ҡолона әүерелә. Күптәр һыраны спиртлы эсемлек булараҡ "һанға" һуғып етмәүе арҡаһында упҡынға тәгәрәгәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Рекламалау ҙа көслө бит. Телевидение ла был йәһәттән ҙур роль уйнай. Алкоголгә тотонған үҫмерҙәр һәм йәштәр, мин ни өсөн эсәм, тип уйламай, ә маҡтайҙар бит, шуға эсәм, тигән уйҙы әйтә. Мәктәп уҡыусылары араһында милицияла иҫәптә тороусыларҙың күплегенә ошо һыра ғәйепле. Был үҙгәрештәрҙе бик хуплайым. Әгәр ҙә хаҡы ныҡ тешләшә икән, был мәктәп уҡыусылары, үҫмерҙәр араһында һыра менән мауығыуҙы кәметәсәк. Урамда шешә тотоп һыра эсеп йөрөүҙәрен бик нык өнәп етмәйем. Ошо беҙ иғтибар итмәгән бәләкәй генә күренеш тә кеше аңына йоғонто яһай. Киләсәктә был күренеш бөтөнләй юҡҡа сығыр, тигән өмөттәмен.

**Нәзиф Арыҫланов, студент:** Һыраны нисек итеп спиртлы эсемлектәргә индермәҫкә мөмкин? Кеше араҡы эсһә лә,һыра эсһә лә, ҡолағансы эсә. Һыраның кешегә тәьҫире башҡа алкоголь эсемлемлектәргә ҡарағанда ла көслө. Халҡыбыҙҙың эскелеккә биреләүенә тәү сиратта һыра сәбәпсе. Мәктәп йәшендә үк балаларыбыҙ, бигерәк тә сәскә кеүек ҡыҙҙарыбыҙҙың яман ғәҙәткә биреләүе ҡыҙғаныс. Киосктарҙың тик һыра шешәләре менән биҙәлеүе, көн әйләнәһенә һатылыуы, зәңгәр экрандарҙан һыраны маҡтауҙары ошо хәлгә килтерҙе лә инде. Ниһайәт, тип әйтәйек, юғарыла ултырғандар быға иғтибар итте. Әгәр ҙә ҡаты саралар күрелмәһә, закондар үтәлеше тикшереп торолмаһа, файҙаһы булмаясаҡ.

**Әлфиә Ахмаева, киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре:** Был үҙгәрештәр менән тулыһынса килешәм. Һыра - шулай уҡ алкоголле эсемлек. Быға тиклем уны бары тик һут йәки кеүәҫ һымаҡ ҡына ҡулланһалар, хәҙер уҡыусылар аныҡ аңлар - һыра шул уҡ алкоголь! Хаҡтар артыр тип вәғәҙә ителә, ләкин шик тыуа. Уйлап ҡараһаң, аҡ баштарға күпме генә хаҡ күтәрмәһендәр, хәмергә биреләүселәр әле булһа ла һуңғы аҡсаларына тиклем уны алмаштыра. Шулай булғас, хаҡ артыуҙан фәтүә булырмы? Эсеү теләге булғандар ҡайҙан булһа ла аҡса таба. Таяҡтың да ике осо була тигәндәй, әгәр спиртлы эсемлектәргә хаҡ күтәрелде икән, башҡа аҙыҡ - түлеккә кеҫә таҡырайыуына шаһит булырбыҙмы? Беҙ үҙебеҙҙе мосолман тип иҫәпләйбеҙ. Әгәр асылы менән шулай икән, был осраҡта беҙ араҡынан ғына түгел, ә составында аҙ ғына күләмдә спирт булған эсемлектәрҙән дә шунда уҡ баш тартырға тейешбеҙ. "Күп кимәлдә тыйылған нәмә аҙ кимәлдә лә харам!" тип өйрәтә бәйғәмбәребеҙ. Шулай булғас, был ҡабул ителгән ҡарарҙан ыңғай һөҙөмтәләр генә көтөргә ҡала. Юғиһә һыраны һутҡа тиңләп, был яҡты донъянан үҙебеҙҙең әҙебеҙҙе юғалтыуыбыҙ бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Боҙ ҡуҙғалды, тибеҙ. Был мәсьәлә күптән хәл итеүҙе көтә ине. Илебеҙҙә эскелек ҡоторғанда, уны ваҡытында йүгәнләү мотлаҡ. Был үҙгәрештәр хәлде тамырынан үҙгәртә алырмы, ваҡыт күрһәтер.**

**Данил РӘШИТОВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ХАЛЫҠ КӘСЕПТӘРЕ ЛӘ...
## тәрбиәләй баланы



**Был аҙнала баш ҡалабыҙҙа Республика балалар (үҫмерҙәр) техник ижады үҙәгендә "Башҡортостан халыҡтарының йолалары һәм һөнәрҙәре: үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге" художестволы һәм биҙәүғәмәли ижад күргәҙмәфестиваленең финалы үтте.**

Үҙәк директоры урынбаҫары Виктор Тимофеев әйтеүенсә, бындай күргәҙмә-фестиваль ике йылға бер тапҡыр үтеп тора. Фестиваль сиктәрендә шулай уҡ делегациялар презентацияһы, биҙәү-ғәмәли ижад өлкәһендә оҫталыҡ дәрестәре, һөнәри, биҙәү сәнғәте һәм ғәмәли сәнғәт профилле йүнәлештәре буйынса теоретик конкурстар ойошторола. Тап ошо күргәҙмә сиктәрендә республика уҡыусылары башҡа талантлы тиҫтерҙәренең ижад емештәре менән таныша, тәжрибә уртаҡлаша, өлгө ала. Иң мөһиме, олатай-өләсәйҙәрҙең шөғөлдәрен, кәсептәрен яңыртыу менән булышҡан балалар подъездарҙа, урамдарҙа ваҡытын бушҡа уҙғарып, һыра эсеп йөрөмәй, улар тәрбиәле, тәүфиҡлы, бер-береһенә иғтибарлы булыуы менән башҡаларҙан айырылып тора.

Фестивалдә республиканың район һәм ҡала этабында урын алыусы башланғыс һөнәри һәм балаларға өҫтәмә белем биреү учреждениелары уҡыусылары ҡатнашты. Уҡыусыларҙың иғтибарын республика халыҡтарының мәҙәни мираҫын һаҡлауға йүнәлтеү, талантлы йәштәрҙең ижади әүҙемлеген үҫтереү маҡсатында уҙғарылған күргәҙмәлә ҡул эштәренең ниндәй генә төрө юҡ ине. Ағастан, металдан, тиренән, балсыҡтан, ҡайын туҙынан, һаламдан һәм талдан үреп эшләнгән әйберҙәр, милли уйынсыҡтар был сараға килгән һәр кемдә һоҡланыу уятмай ҡалмағандыр. Шулай уҡ уҡыусылар жюри иғтибарына милли торлаҡтарҙың, йорттарҙың, ихаталарҙың, көнкүреш әйберҙәренең интерьерҙары макеттарын да тәҡдим итте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, ҡуйылған эштәрҙең йөкмәткеһе уҙғарылған күргәҙмәнең республика балаларында патриотик рух, әхлаҡи тәрбиә һәм, әлбиттә, халыҡ һөнәрҙәрен һәм йолаларын өйрәнеү ярҙамында донъяға, кешеләргә, хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләгәнлеген иҫбатлай. Төрлө номинациялар буйынса урындар бирелеп, еңеүселәр билдәләнһә лә, һәр эш юғары баһаға лайыҡ ине.**

**Нәзирә АЙЫТОВА.**

ХОККЕЙ

# ЮЛАЕВСЫЛАР ҠЫУАНДЫРҘЫ

**"Салауат Юлаев" командаһы Новокузнецк ҡалаһына, урындағы "Металлург" хоккейсылары менән уйнарға бары тик еңеү маҡсаты менән генә барҙы. Шулай булмай һуң, юлаевсылар беренсе осрашыуҙа "Металлург" командаһынан буллит һуғыуҙа ғына 2:3 иҫәбенә еңелде бит. Бик үкенесле отолоу!**

Юлаевсылар уйынды ғәйрәтләнеп дәррәү генә башланы, майҙан хужаларының ҡапҡаһы яғына көслө тулҡын булып ябырылды. Уйын башланыуға биш минут та үтмәне, ҡунаҡтарҙың беренсе звеноһы ҡапҡа эргәһендә көслө ялҡын ҡабыҙҙы. Звеноның ғына түгел, бәлки, бөтә команданың арыу-талыуҙы белмәҫ һөжүмсеһе Александр Радулов тәүге шайбаны Вадим Тарасов ҡапҡаһына сәпәп тә өлгөрҙө. Әммә көслө һөжүм кәмемәне, элекке әүҙемлек менән дауам итте. Ҡунаҡ Якуб Клепиш шайбаны майҙан уртаһынан тиерлек ҡаршы яҡ ҡапҡаға ҙур мәргәнлек менән елгәрҙе. Һөҙөмтәлә иҫәп икегә етте. Беренсе осор бөтөр алдынан Петр Счастливый һуҡҡан шайба майҙан хужалары ҡапҡаһында ояланы. Осорҙоң һуңғы минуттарында ғына майҙан хужалары яуап шайбаһы индерә алды.

"Металлург" командаһының тренерҙар штаты ҡапҡасыны алмаштырырға мәжбүр булды. Вадим Тарасов урынына Александр Вьюхин сыҡты.

Өсөнсө осорҙа Петр Счастливый 4-се тапҡыр майҙан хужалары ҡапҡаһы алдында ҡыҙыл ут тоҡандырҙы.

Реванш, йәғни үс алыу уйыны бына шулай ҡунаҡтар файҙаһына 4:1 иҫәбенә тамамланды. Көйәрмәндәр ҙә быға ифрат шатланды.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"РБК" журналы йәшәү өсөн иң уңайлы булған ҡалалар исемлеген төҙөнө. Иҡтисадсылар иҫәпләп сығарыуынса, иң ҡиммәтле ҡалалар исемлегендә Өфө 47-се урында тора. "Рәсәйҙә ҡайҙа йәшәүе яҡшыраҡ" рейтингында Өфө 5-се урында, асыҡланыуынса, өфөләләр Ырымбур, Иркутск, Һарытау йәки Новосибирск ҡалалары халҡына ҡарағанда яҡшыраҡ йәшәй. Бизнес-рейтинг буйынса Башҡортостандың баш ҡалаһы дүртенсе урында.

✓Метеорологтар фаразлауынса, ял көндәре республикала көндәр йылы торасаҡ, ә ҡышҡы һыуыҡтар декабрҙең башында ғына башланасаҡ. 2 декабрҙән һауа температураһы 15-16 градусҡа тиклем түбәнәсәйәк, тик 7 декабрҙә тағы көндәр йылыныуы көтөлә. 15 декабрҙән 20 градуслыҡ һыуыҡтар башланып, 22 декабргә һауа температураһы - 22 градусҡа етеүе ихтимал. Ай аҙағында көндәр тағы йылынып, 30-31 декабрҙә һауа температураһының минус 5-8 градусҡа күтәрелеүе көтөлә.

✓Баш ҡаланың ҡала советы алдындағы майҙанда 31 метр бейеклегендәге шыршы барлыҡҡа килде. Өфөгә был урман матурҡайы Нуриман районынан килтерелгән. Баш ҡалала быйыл тәүге шыршы Орджоникидзе мәҙәниәт һарайы алдында ҡуйылғайны. Шыршыларҙы Яңы йыл шәмдәре һәм уйынсыҡтары менән декабрҙә генә биҙәй башлаясаҡтар.

✓Өфөлә "Баш ҡала йыл уҡытыусыһы - 2010" ҡала конкурсы старт алды. Конкурста эш стажы 5 йылдан кәм булмаған бөтә предмет уҡытыусылары ла ҡатнаша ала. Һөнәри ярыштың мәктәп һәм район этабы декабрь башында тамамланасаҡ. Ҡала этабы 2011 йылдың ғинуарында башлана.

✓Өфө ҡалаһының генераль планына ярашлы, ҡала округы хакимиәте транспорт селтәре үҫеше программаһын төҙөнө. Белгестәр 2020 йылға 1000 кешегә 300 автомобиль тура киләсәк тип фаразлаһа ла, бөгөн был күрһәткес 340-ҡа еткән, шуға ла ҡаланың географик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып төҙөлгән планға ярайһы уҡ үҙгәрештәр индерергә тура килгән. Программа сиктәрендә төҙөләсәк транспорт магистралдәре транзит автотранспорт хәрәкәтен булдырырға, ҡаланың экологик торошон яҡшыртырға мөмкинлек бирәсәк.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Булған бит заманалар... Ата-әсәйҙәр заманын әйтәм. Бигүк борон да түгел, 25-40 йылдар элек кенә булған ваҡиғаларҙы күҙҙә тотам. Башҡорт балаһы үҙ илендә үҙ телен өйрәнеүҙән мәхрүм булып, тотош быуындар милләтенән ваз кисеп йәшәп, маңҡортҡа әйләнеп бөтә яҙған мәлдә генә... 80-се йылдар аҙағында, 90-сы йылдар башында аңыбыҙ асылып, рухыбыҙ уянып китеп, телебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә яңырыу һулышы өрҙөк.**

# ЙӘШ УҠЫТЫУСЫНЫ...

## боҙло һыуға ташлауҙан файҙа булырмы?

Бынан 11 йыл элек "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закон ҡабул ителеп, уны ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү буйынса ҡайһы бер эштәр эшләнде. Һуңғы йылдарҙа бына башҡорт теле республиканың бөтөн мәктәптәрендә дәүләт теле булараҡ та өйрәнелә. Ошо көндәрҙә Өфөнөң 42-се мәктәбендә булғанда башҡорт теле уҡытыуҙың торошо менән ҡыҙыҡһындыҡ.

Әле был мәктәптә 1179 уҡыусы уҡый, шуларҙың 170-е башҡорт милләтенән. Мәктәптә 1999-2000 уҡыу йылында уҡ башҡорт теле уҡытыуҙы индергәндәр. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: бында һуңғы ике йылда башҡорт балаларының һаны 44 уҡыусыға артҡан. Уҡыу йортондағы уҡытыу сифаты, рух тәрбиәһе йәйеп итеп килтергән уларҙы бында. Башҡортостан мәҙәниәте, башҡорт теле дәрестәрен 7 уҡытыусы атҡара, шуларҙың өсәүһе юғары категориялы мәғариф хеҙмәткәрҙәре. Йәш уҡытыусылар улар өлгөһөнә, улар тәжрибәһенә таянып эш башлаған.

- Коллективыбыҙ көслө генә, быны беҙ уҡыусыларыбыҙҙың төрлө ярыштарҙа яуланған уңыштары аша расҙай алабыҙ, - ти башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса директор урынбаҫары Әлмира Мырҙабулатова. - Уҡытыу сифаты һәр ваҡыт тәүге планда. Ғөмүмән, мәктәбебеҙҙә башҡорт теле дәрестәренең уңышлы уҡытылыуында директорыбыҙ Рауил Кәримовтың роле ҙур. Милли телдәр уҡытыуҙа уның ярҙамын, хуплауын тойоп эшләйбеҙ. Мәсәлән, башҡа мәктәптәрҙә милли телдәр өсөн бүленгән сәғәттәрҙе математика, физика, химия кеүек фәндәргә биреп бөткәндәр, тип ишетәбеҙ, ә беҙҙә сәғәттәр һаны ҡыҫҡарманы. Ата-әсәләр менән дә уртаҡ тел тапҡанбыҙ, башҡорт телен уҡытыу кәрәкмәй, тип әйтеп йөрөүселәрҙе күргәнебеҙ ҙә юҡ. Бәлки, улар ҡайһылыр мәктәптә барҙыр. Ә беҙ ундай ризаһыҙлыҡ булмаһын өсөн заманса технологиялар, төрлө ҡулланмалар, саралар аша башҡорт теле дәрестәренә ҡыҙыҡһыныу уятырға тырышабыҙ. Милли рух тәрбиәләгән, милләтебеҙҙең үткәнен, бөгөнгөһөн һөйләгән сараларҙы даими уҙғарабыҙ. Башҡорт телендәге шиғырҙар бәйгеһе традицияға әйләнде. Яңыраҡ ҡына Баҡалы районында үткән "Минең шәжәрәм" республика бәйгеһендә ҡатнашып, Регина Тойғонова исемле уҡыусыбыҙ мәктәп уҡыусылары араһында 1-се урын яуланы. Уның шәжәрәһе башҡаларҙан бик үҙенсәлекле эшләнеүе менән айырылып торҙо. Ағас рәүешендә ҙур итеп эшләнгән шәжәрәгә ҡушымта итеп архив материалдары, боронғо фотоһүрәттәр, хаттар һалынғайны. Эштең электрон варианты булыуы ла бик отошло булды.

Өс "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте" кабинеты бар мәктәптә. Стеналарҙа башҡорт халыҡ шағирҙарының, яҙыусыларының портреттары, кәштәләрҙә башҡорт китаптарының урын алыуы рухи мөхит тыуҙыра. Электрон методик ҡулланмалар, аудио, видео материалдар ҙа күҙ алдында. "Кабинетты йыһазландырыу бер ҡасан да туҡтап ҡалғаны юҡ, уны яңыртып, тулыландырып торабыҙ", - ти уҡытыусылар. Быйылғы уҡыу йылында тағы бер кабинет бирелгәс, биҙәү-йыһазландырыуҙы мәктәп етәкселеге яңы ғына институт тамамлап уҡытырға килгән Әлиә Яҡуповаға йөкмәткән. Әйткәндәй, уның уңғанлығы, телем тип янып йөрөүе йәш белгестәргә өлгө булырлыҡ.

Ҡыҙыҡһынып, бер нисә башҡорт теле дәресенә инеп ултырҙым. Уҡытыусының дәрестә заманса технологиялар, мультимедиа ҡулланып, темаға бәйләп интерактив уйын рәүешендә үткәреүе оҡшаны. Был сит милләт балаларына башҡорт теле өйрәтеүҙең бик яҡшы өлгөһө. Телде өйрәнеү ауыр булыуға ҡарамаҫтан, уҡытыусының ошондай алымдар менән эш итеүе барыбер ҙа эште еңеләйтә. Тимәк, башҡорт булмаған балаларҙы был фәнгә ылыҡтырыу уҡытыусының уҡытыу һәм ойоштороу һәләтенә бәйләнгән.

**Тик шуныһы: әле генә уҡыу йортон тамамлап, башҡорт телен уҡытырға килгән йәш уҡытыусыларҙа бындай һәләтлек бармы? Тап улар арҡаһында килеп тыумаймы сит милләт балаларының һәм уларҙың ата-әсәләренең ризаһыҙлығы? Әлбиттә, йәҙә белмәгәнде йылға уртаһына ташлаһаң, үҙе йөҙөп сығырға өйрәнә, тибеҙ. Әммә был осраҡта барыбер ҙә йәш уҡытыусыларҙы башта милли мәктәптәрҙә сирканыс алдырырға, шунан ғына башҡа милләт балаларын уҡытырға ебәрергә кәрәктер ул. Ошо хаҡта башҡалар ни уйлай икән?**

**Данил ӘБДЕЛҒАЗИН.**



ҺОРАУ-ЯУАП

### ҮҘ БЕЛДЕГЕ МЕНӘН

**Яңғыҙ әсәмен. Ике бәләкәй балам бар. Бер кем дә теркәлмәгән бер фатирға үҙ белдегем менән килеп урынлаштым. Мине бынан сығара алалармы? Ниндәй статья буйынса? Был фатирҙа йәшәргә хоҡуғымды нисек законлаштыра алам?**

- Эйе, һеҙҙе сығарыуҙары ихтимал. Был торлаҡ, моғайын да, муниципалитет йәки ведомство ҡарамағындалыр. Тимәк, торлаҡ эйәһе уны үҙ файҙаланыуына ҡайтарыу һәм бинаны биләргә хоҡуғы булмаған башҡа кешеләрҙе унан сығарыу өсөн РФ Торлаҡ кодексының 30-сы статьяһы нигеҙендә судҡа мөрәжәғәт итеүе ихтимал, ләкин һеҙҙе фәҡәт суд ҡарары буйынса ғына сығара алалар. Үҙ сиратығыҙҙа һеҙ үҙегеҙҙең теркәлгән урынығыҙ буйынса район хакимиәтенә социаль яллау килешеүе буйынса торлаҡ менән тәьмин итеүҙәрен һорап мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. РФ Торлаҡ кодексының 14-се статьяһына ярашлы, урындағы үҙидара органдары муниципаль торлаҡ фонды иҫәбенән социаль яллау килешеүе буйынса аҙ тәьмин ителгән граждандарҙы билдәләнгән тәртиптә торлаҡ менән тәьмин итергә бурыслы.

### ҠАТЫН ПАСПОРТТЫ ЙЫРТТЫ...

**Ҡатыным менән әрләшеп киттек тә, ҡыҙыулыҡтан ул минең паспортты йыртты. Хәҙер миңә ни эшләргә?**

- Граждандың шәхесен таныҡлаусы документты (паспорт) аңлы рәүештә боҙоу йә юҡ итеү, документты һаҡлауға етди ҡарамау арҡаһында уны юғалтыу факты буйынса иҫкәртеү йә булмаһа 100 һумдан 300 һумға тиклем административ штраф ҡаралған.

### БЕР ҮК КӨСКӘ ЭЙӘ

**Ирем менән айырылышабыҙ. Ошоға тиклем балаңың атаһы суд ҡарары һәм әсәнең ғаризаһы буйынса алимент түләй ине. Әле яңыраҡ ниндәйҙер килешеү тураһында ишеттем, шул турала аңлатып яҙығыҙ әле?**

- Алимент түләү тураһында килешеү (алимент түләү тәртибе, шарттары һәм күләме) алимент түләргә тейешле кеше һәм уны алыусы араһында төҙөлә. РФ Ғаилә кодексының 100-сө статьяһына ярашлы, алимент түләү тураһында килешеү яҙма рәүештә төҙөлә һәм нотариуста раҫланырға тейеш. Алимент түләү тураһында закон тарафынан билдәләнгән ошо форманы башҡарыуҙан баш тартыу РФ Граждандар кодексының 165-се статьяһы 1 пунктында ҡаралған эҙемтәләргә килтереүе бар. Алимент түләү тураһындағы нотариустан раҫлатылған килешеү башҡарыу ҡағыҙы (исполнительный лист) көсөнә эйә.

### БАҠСАҢА ХУЖА БУЛ

**90-сы йылдарҙа завод миңә Булгаковонан баҡса участкаһы бүлеп бирҙе. 2006 йылдан алып унда бара алғаным юҡ, бурысым күбәйҙе, ләкин берәү ҙә түләү талап итеп миңә хәбәр ебәрмәне. Участканы минән тартып алдылар һәм хосусилаштырҙылар, ә уның бөтә документтары, шул иҫәптән түләү тураһында квитанциялар минең ҡулда. Баҡсамды ҡайтара аламмы?**

Хосусилаштырыу килешеүен юҡҡа сығарыуҙы таныу тураһында юллап, судҡа мөрәжәғәт итегеҙ, ғаризағыҙҙа ерҙең хужаһы һеҙ икәнлекте күрһәтеп, баҡса участкаһына документтарығыҙҙы ла туплап бирегеҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Ҡышҡы оҙон төндәрҙә

Әле оҙон төндәр башланды. Был осорҙа айырыуса ололар йоҡлай алмай интегә.

❖ Шуға күрә йоҡларға ятыр алдынан 1 сәғәт алда 1 стакан ҡайнар һөт йәки бер стакан ҡайнаған һыуға бал болғап эсергә кәрәк. Бал оло кеше тәнендә кәмегән микроэлементтарҙы тейешле кимәлдә тоторға ярҙам итә.

❖ Йоҡо бүлмәһенең бер мөйөшөнә валериан үләненең һабаҡтарын элеп ҡуйыу ҙа нәтижәле.

❖ Аптека ромашкаһынан, гөлйемештең таж япраҡтарынан яһалған мендәрҙә файҙаланырға була.

❖ Хуш еҫле тәмәке сәскәһе еҫе лә йоҡоһоҙлоҡтан ҡотҡара.

### Топинамбур - шифалы үҫемлек

❖ Ҡан баҫымы юғары булғанда уның йәш япраҡтарынан салат яһап ашау файҙалы. Япраҡтарҙы һәйбәтләп йыуырға, ваҡ итеп турарға, үҫемлек майына ҡушып болғатырға. Был салатты даими ҡулланыу ҡан баҫымын нормала тота.

❖ Ҡан баҫымын төшөрөү өсөн һәм ҡандағы шәкәрҙе кәметеү маҡсатында уның ер аҫты "картуф"ынан шәкәр ҡушмайынса ғына компот яһап эсергә. 1-2 литр һыуға 5-7 картуфты һалаһың да, 10-15 минут самаһы ҡайнатаһың. Эселәй ҙә, һыуытып та эсергә була. Ул гемоглобинды ла күтәрә, ашҡаҙан аҫты биҙенең эшен яҡшырта.

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә, баш ауыртһа, йыуылған ике топинамбур картуфының һутын һығып алырға, 1-2 ҡалаҡ шишмә һыуы (булмаһа, өйҙәге һыуҙы) ҡушып, көн һайын иртәнсәк эсергә кәрәк. Һутты һыуыҡта һаҡларға.

### Йоҡоһоҙлоҡтан яфаланғанда

Кагор йәки портвейнға (0,5) 50 грамм укроп орлоғон һалып, һүрән утта ҡайнатып алаһың (2-3 минут). Йоҡо алдынан 50-60 мл эсәһең.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**




# ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Етенсе өгөт

Кешеләрҙең ғәйептәрен эҙләп йөрөмәгеҙ, бер-берегеҙҙән көнләшмәгеҙ, үс тотмағыҙ, бер туған кеүек дуҫ булығыҙ. Мөмкин булһа, кешенән нәмә һорамағыҙ (теләнселәмәгеҙ). Дин тураһында бәхәсләшмәгеҙ. Зинһар, юҡ-бар нәмәләр өсөн бер-берегеҙҙе һүкмәгеҙ. Ни ҡәҙәр гонаһлы булһа ла, мосолманды кафыр тип әйтеү Йәнәб-и Аллаһ Рәсүлуллаһ салаллаһу ғәләйһиссәләм тарафынан тыйылғандыр. Зарурат булмаһа, һул ҡулығыҙ менән ашамағыҙ. Һорап йөрөүселәрҙе мәхрүм итмәй, аҙ булһа ла биреп ебәрегеҙ. Күршеләрегеҙҙең хөрмәтен һаҡлағыҙ. Ишеткән белем һәм яҡшы һүҙҙәрҙе дәфтәрегеҙгә яҙырға ғәҙәтләнегеҙ. Кәрәк булмаған нәмәләрҙе һөйләүҙән телегеҙҙе тыйығыҙ. Ҡунаҡтарығыҙҙы хәлегеҙ еткәнсе хөрмәт итегеҙ. Тағун һәм ваба ауырыуҙары булған ерҙәргә бармағыҙ, булған ерҙәрҙән ҡасып сыҡмағыҙ. Ғәйбәт һөйләмәгеҙ. Яла яҡмағыҙ. Иҫерткес эсмәгеҙ. Алла һаҡлаһын, зина ҡылмағыҙ. Йоҡлаған ваҡытта ишек һәм тәҙрәләрегеҙҙе бикләгеҙ, һауыт-һабаларҙың өҫтөн ябығыҙ, шәмдәрҙе һүндерегеҙ. Мосолман ҡарындаштарығыҙ ауырһа, сәләм бирегеҙ. Саҡырһалар, барығыҙ. Ауырыһалар, хәлдәрен һорағыҙ. Вафат итһәләр, йыназаларында ҡатнашығыҙ. Изгелеге йыраҡ һәм уҫаллығы яҡын йөрөүсе кешеләрҙән һаҡланығыҙ. Бер ҡалыптың хөрмәтләһе килһә, хөрмәт итегеҙ. Бөгөнгө ғәмәлде иртәгә ҡалдырмағыҙ.

## Һигеҙенсе өгөт

Әҙәм балаһына Йәнәб-и Аллаһ хәҙрәтенән бөйөк бүләк һәм башҡа хайуандарҙан айырыусы сифат булған "аҡылды" олуғ ниғмәт тип белегеҙ. Уны саф һәм камил итеп аҫрарға тырышығыҙ. Был бөйөк ниғмәтте Аллаһы Тәғәләнең шәрәфле бүләген һаҡлап тотоу әҙәм балаһының иң беренсе бурысы икәнен белегеҙ. Әгәр аҡыл баҙарҙа алтын бәрәбәренә һатылһа ине, әҙәм балалары һуңғы нәмәләрен биреп булһа ла аҡыл алыу өсөн йүгерерҙәр ине. Хәлбүки, донъяла бәғзе кешеләр ошо ғәзиз ниғмәттең ҡәҙерен белмәй, аҡсалары менән диуаналыҡ һатып алалар. Иҫерткес эсеү шәриғәт алдында харам, әхирәттә уның бәрәбәренә яза бирелә, донъя мәсхәрәлегенә һәм донъя ауырыуына төшөүгә сәбәп була, уның яман эш икәнен иҫбат итеү өсөн аҡыл нурын һүндереүе генә лә ҙур дәлилдер. Хәлбүки, иҫерткес эсеү шәриғәтебеҙгә харам була, әхирәттә буласаҡ язалары ла тәҡәт килтерәсәк дәрәжәлә түгелдер. Ислам алдында иҫерткес "бысраҡлыҡтың башылыр", "Үммүл - хәбә иҫ", йәғни һәр яуызлыҡ һәм уҫаллыҡтың анаһы тип атала. Шуның өсөн иҫерткес эсеүселәр һәр төрлө боҙоҡлоҡтарҙы эшләүҙән тартынмай. Иҫерткес эсеү сәбәпле әҙәм балаһы ғорурлыҡ һәм сабырлыҡ, паклыҡ һәм тоғролоҡ, намыҫ һәм сер һаҡлау, алдан күреү һәм ғаилә тәрбиәләү кеүек күркәм холоҡтарҙан тулыһынса мәхрүм ҡала. Байлыҡ һәм ваҡыт кеүек ҡиммәтле хазиналарҙы ла юғалта. Боҙоҡ холҡон үҙенең мәгсүм вә гонаһһыҙ сабый балаларына мираҫ итеп ҡалдыра. Табиптар әйтеүенсә, чахотка, баш, йөрәк һәм башҡа ауырыуҙар күп ваҡытта иҫерткес эсеү арҡаһында пәйҙә була. Бала һәм нәҫелдәргә шомло яҙкәр булып ҡала. Һис матур тәрбиә бирмәгән хәлдә мәгсүм балаларына чахотка йәки башҡа бер ауырыу йәки иҫерткес эсеү кеүек боҙоҡ ғәҙәтте мираҫ итеп ҡалдырыуы ни ҡәҙәр ҡыҙғаныс һәм күңелдәргә йәрәхәт бирәсәк хәлдер. Ошоноң өсөн бил ағыуҙан иң тәүҙә үҙегеҙҙе һәм һуңынан ғаиләгеҙҙе, хатта бөтөн ҡарындаш, ҡәбилә, дуҫ-иштәрегеҙҙе һаҡлау өсөн бөтә тырышлыҡтарығыҙҙы сарыф итегеҙ. Был иһә иң кәрәкле һәм иң файҙалы көрәш булыр. Был көрәштә еңеп сығыусы мәңгелеккә матур исем ҡаҙаныр. Иң яҡын бер дуҫығыҙ ҡаза менән һыуға батып үлгәнен ишетһәгеҙ, ҡайғырығыҙ, ләкин: "Аллаға шөкөр, иҫерткес эсмәне, тик һыуға батып үлде. Әгәр эскелеккә дусар булһа, сара таба алмаҫ ине", - тип Йәнәб-и Аллаһҡа шөкөр итегеҙ.

(Дауамы бар).

*ТУҒАНЫМ...*

# ЕТЕ ЯТТАР...

## ят бауыр ул

**Тарихыбыҙға күҙ һалһаҡ, һәр осорҙа, һәр быуын алдына ниндәйҙер ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыу бурысы ҡуйылған. Атай-олатайҙарыбыҙ йөҙәр йыллап ер, ил өсөн көрәшһә, бөгөнгө быуынға эскелеккә, динһеҙлеккә, алама ғәҙәттәргә, шулай уҡ булмышыбыҙҙы юҡҡа сығарып, телде, мәҙәниәтте, йәшәйеште бер иш итергә ынтылған, бөтә халыҡты тиңләү маҡсатына йүнәлтелгән көстәргә ҡаршы торорға кәрәк. Ә ҡаршы тороу беҙ берҙәм булғанда, туғанлыҡты өҫкә күтәргәндә генә мөмкин икәнен яҡшы беләбеҙ.**

Асылыбыҙ нигеҙен тәшкил иткән илһөйәрлек, кешелеклелек сифаттарын иҫкә төшөрөү мөһим. Һуңғыһы иң тәүҙә туғанлыҡ мөнәсәбәтендә асыҡ сағыла. Киң күңеллелек, яҡын кешеңдең кисерештәрен үҙеңдеке кеүек ҡабул итә белеү, ауыр хәлдә ҡалған туғаныңа ярҙам ҡулы һуҙыу халҡыбыҙҙа элек-электән изге бурыстарҙан һаналған. Юҡҡамы ни быуаттар буйы йыйылған халыҡ аҡылын туплаған ауыҙ-тел ижадында "Туғаныңдан бизмә - нәҫелең ҡорор", "Ике туған талашыр, атҡа менһә - ярашыр", "Ике бармаҡ араһына ит үрмәй, туған туғанһыҙ көн күрмәй", "Туғандарҙың татыулығы байлыҡтан артыҡ" кеүек мәҡәлдәр киң таралған. Улар ғәйәт ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡала мөхитендә бөгөн фекерҙәр йыш яңғырамай, ауылдарҙа ла һәр һүҙен мәҡәл менән йөпләп ҡуйыусы оло быуын кешеләренең сафы һирәгәйә. Ә бит туғанлыҡ хисе нигеҙе, башҡа бик күркәм сифаттар менән бер рәттән, ғаиләлә һалынырға тейеш. Әлбиттә, һүҙ менән генә түгел, ә эш, йәшәү рәүеше менән. Ошо урында үҙ нәҫелемдәге мөнәсәбәттәргә туҡталып үтәйем. Ауырғазы районы Моразым ауылында тыуып үҫкән мең ырыуы ҡыҙымын мин.

80 йәшен теүәлләгән, бөгөн дә ергә ныҡ баҫып йөрөгән атайымдың бер туған ағаһы бабайым Мозайыр Вәлитов һөйләүенсә, элек туған-тыумасабыҙ граждандар һуғышына китеп юғалған ағай-энеләре балаларын, һәр ғаиләгә таратып, үҙҙәре үҫтергән. Олатайым менән өләсәйем Ғирфан исемле малайҙы ҡарауға алған, аслытуҡлы йәшәгән саҡтарында "үҙемдеке, бауыр ҡиҫәгем" тип шул баланы үҙенекеләрҙән айырмай тәрбиәләгән. Заманының башҡа ир-егеттәре кеүек, Ғирфан да үҫеп еткәс, Бөйөк Ватан һуғышына алына һәм иле өсөн ғүмерен бирә.

Беҙ үҫкәндә ике ғаилә бер ихата эсендә урынлашҡан ике йортта йәшәнек, ҡапҡабыҙ берәү ине. Ағалы-ҡустылы бер туғандар йәнәш йорт һалып, бер-береһенә терәк булырға теләгәндән шулай хәл ителгәндер. Оло ағайҙа - һигеҙ бала, кесеһендә - етәү, йорттар ҙа хәҙерге кеүек иркен түгел. Ҡайны өйҙә тәмле ризыҡ бешерһәләр, беҙ, бала-саға, эркелешеп, шунда йүгерә инек. Балалар үҙ-ара низер бүлешкәндә, ризаһыҙлыҡ белдергәнде хәтерләмәйем, күрәһең, өләсәйҙәр тәрбиәһе көслө булғандыр. Өләсәйем, уның ҡарт әсәһе ҡарт өләсәйебеҙ ҙә алмашлап ике арала йәшәне (олатай Сталинград янында барған бәрелештә һәләк булған).

Уртаҡ ишек алдында буй еткергән балалар бөгөн төрлө тарафта көн итәбеҙ, туғанлыҡты бөтәһенән өҫтөн күреп, шатлыҡ-ҡайғыларҙы бүлешеп ғүмер кисереүебеҙ менән атай-әсәйҙәргә бурыслы булыуыбыҙҙы яҡшы аңлайбыҙ.

Туғандар берҙәм, үҙ-ара ярҙамлашып йәшәгән аймаҡтарҙа башҡаларға үрнәк булырҙай лайыҡлы йәшәүселәр күберәк, киреһенсә, тарҡаулыҡ, күрә алмаусылыҡ хөкөм һөргән ерҙә бөлгөнлөк, унышһыҙлыҡ йыш осрай.

Ауыл кешеһе бер-береһенең тын алышын һиҙеп йәшәй. Беҙгә урам аша бер ағай менән апай биш балаһы менән ғүмер итте. Иң оло улдары әсәһен дә, туғандарын да ҡыйырһытты. Уның менән бер йортта йәшәй алмағас, кесе ҡустыһы ҡайҙалыр ситкә сығып китте. Әсәләре гүр эйәһе булды. Ҡыҙҙары кейәүгә китеп, аталы-уллы ғына ҡалғас та был ғаиләлә тыныслыҡ һиҙелмәне, "төшөрөп" алып, үҙ-ара ыҙғыштылар. Шулай бер көндө өйҙәре янып юҡҡа сыҡты, күп тә үтмәй, улы ла донъя ҡуйҙы. Колхоз биргән тимер вагонда үҙе генә көн иткән ағайыбыҙ үткән ғүмерен барлағанда был бәхетһеҙлектәрҙең башы ҡайҙан килеүен, моғайын, төшөнәләр. Күрше-күлән араһынан оло йәштәгеләре "ул үҙ әсәһен ҡәҙерләмәне" тигән һүҙҙәр ишеттерҙе. Ни сәсһәң, шуны урырһың, тиҙәр бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттарының халҡыбыҙға мөрәжәғәтендә "Беҙ - туғанлыҡ тойғоһо көслө милләт... Билдәле тәбиғәт ҡанунын иҫеңдә тот: туғанын ҡәҙерләмәгән үҙе лә ҡәҙерһеҙ булыр", - тигән юлдар һеҙгә таныштыр. Ҡан-ҡәрҙәштәргә йылы мөнәсәбәт кенә аҙ. Милләтебеҙҙең һәр вәкиленә туған итеп ҡарауҙы бурыс итеп ҡуйҙы оло йыйын. Әлбиттә, бындай сифат беҙгә электән дә ят түгел ине, әммә бөгөн ул айырыуса кәрәк. Был ҡараш дәрәжәле, вазифа биләгән милләттәштәребеҙҙең күңел түренән дә урын алһын ине.**

Айһылыу МОРАҘЫМОВА.

*ҒӘЖӘЙЕПХАНА*

# ГӨЛДӘРЕ ШИНДЕ...

**Мин Балалар ижады йортонда эшләгәндә "Керамика" түңәрәген дә етәкләнем. "Балалар, бер ҡурҡыныс һөйләйемме?" тип һораһам: "Һөйләгеҙ, һөйләгеҙ!" - тип балаларҙың күҙҙәре йылтырап китә. Береһе лә: "Һөйләмәгеҙ, мин ҡурҡам", - тимәй. Әлбиттә, мин ваҡиғаларҙың ныҡ ҡурҡыныстарын түгел, фәһемлеләрен генә һөйләйем. Бына әле лә "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға: "Бер ҡурҡыныс һөйләйемме?" тип һорау бирәм. Ҡурҡмағандар уҡыр.**

Бер саҡ күршемдә йәшәүсе Валя ханым: "Мин ярты йылға Ялтаға туғаныма китәм. Гөлдәремде һиндә ҡалдырайым әле",- тип мөрәжәғәт итте. Риза булдым. Гөлдәрҙе бик тә яратам мин. Уның гөлдәре бик күп, 12 көршәк ине. Валя ханым уларҙы үҙе индерер, тәҙрә төптәренә урынлаштырып ҡуйғас, ҡасан, күпме һыу ҡойорға икәнен дә һөйләп, хушлаштыҡ. Кис һайын йоҡлар алдынан сәскәләргә һыу һибә-һибә арып бөтәм. Етмәһә, үҙемдең дә 9 көршәк гөлдәрем дә бар. Был эштең ауыр икәне башыма ла инеп сыҡмаған, тип уфтанып та алам. Тора-бара күнегеп киттем. Кеше һиңә үҙенең яратып үҫтергән гөлдәрен ышанып ҡалдырған икән, түҙәһең.

Валяның китеүенә бына инде ике ай булды тигәндә, уның герань гөләнән (беҙ уны бесәй гөлө тип тә атайбыҙ) япраҡтары һарғайып, ҡойола башламаһынмы! Ҙур ҡыуаҡ һымаҡ гөл көн һайын күҙгә күренеп шиңә. Уға әйәргәндәй, үрмә гөлдәре лә япраҡтарын ҡоя башланы. Уларға эйәреп, лилиә гөләнең япраҡтарына һары төштө. Һәйбәт күршем Галинаға йүгерҙем: "Үҙемдең гөлдәрем гөрләп сәскә атып ултыра, ә Валя ханымдың гөлдәре һулый. Ҡайтып инһә, нисек аҡланырмын инде?" - тим илай яҙып. Ә Галина: "Аҡланып яфаланмаҫһың. Валя ҡапыл донъя ҡуйған. Ялтанан һеңлеһе шылтыратып хәбәр итте. Валя ханым минең фатиремда ҙур булмаған сумаҙанын ҡалдырып торғайны, апаһы Лида килеп алыр, тине..."

Ялтала донъя ҡуйған хужаһының һәләкәтен гөл ҡалһында ҡалған гөлдәр нисек тойҙо икән? Шиңгәндәре Валя ханымдың иң яратҡан гөлдәре булдымы икән? Сөнки иң көйһеҙ холоҡло фиалкалар бирешмәне бит. Уларҙы мин барыбер өйөмдә тоторға батырсылыҡ итә алманым, яҡындағы балалар баҡсаһына алып барып тапшырҙым.

Күптән булғайны был хәл. Был хәлгә һаман яуап таба алмайым. Бәлки, берәйһе аңлата алыр был күренеште?..

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Көҙҙәр етһә, ағас япраҡтары һарғайып ҡойола. Был күренештең сәбәбен беләбеҙ. Ағастарҙың тамырҙары тупраҡтан һут алыуҙы туҡтата. Олондары буйлап, ботаҡтарына һуттар күтәрелмәй. Былар бөтәһе лә һалҡын ҡышҡа, ҡалын ҡарҙарға әҙерләнеү. Ҡыҫҡаһы, тәбиғәттең үҙе генә белгән мөғжизәһе. Ә ундай мөғжизәләр бихисап. Мәҫәлән, ҡоштарҙың йылы яҡтарға осоп китеп, яҙын тыуған илгә юлды нисек табыуын да аңлап бөтөрә алмайбыҙ беҙ. Тәбиғәткә арналған бер тапшырыуҙа күрһәткәйнеләр: йылы яҡтарға осоп барыусы ҡоштар төркөмөн ғалимдар бер ҡошҡа тағылған датчик ярҙамында күҙәтә. Алдан осоусы төркөм башлығы алыҫтан килеүсе ҡаты буранды тойоп, ҡоштар төркөмөн ҙур тау ышығына һыйындырып, буран тынғас, юлдарын артабан дауам итә. Эйе, баяғы гөлдәр ҙә, үҫемлектәр ҙә, ҡоштар ҙа Хоҙай яралтҡан ысынбарлығынан тайпылмай, үҙлегендә йәшәй. Беҙ, кешеләр генә, тәбиғәттән килгән күп аҡылды, һәләтлектәребеҙҙе, нескә һиҙгерлекте юғалтҡанбыҙ. Йәл.**

Айгөл АХУНОВА.

*ТАРИХ ҺАБАҠТАРЫ*

**Тарихты фиҙаҡәр шәхестәр тыуҙыра. Тап улар, үҙ заманының һынылышлы мәлендә үҙ халҡының алдына сығып, уға дөрөҫ юл күрһәтеп, азатлыҡ өсөн көрәш юлына әйҙәй, һәләкәттәрҙән ҡурсалай һәм киләсәккә алып сыға. Улар ышығында башҡа халыҡтар ҙа, замандың ел-дауылдарына, һәләкәттәренә эләкмәй, быуаттар аша атлай. Шундай шәхестәребеҙҙең береһе - башҡорт халҡының рухи юлбашсыһы, донъяның атаҡлы ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Вәлиди үҙ ғүмерендә шундайын юғарылыҡтарға өлгәшә алыуында икенсе бер шәхестең - атаҡлы ишан Зәйнулла ишандың йоғонтоһо хаҡында үҙенең киң билдәле "Хәтирәләр"китабында түбәндәгеләрҙе яҙып ҡалдыра: "Әгәр ҙә шәйехтең дәртләндереүе булмаһа, мин, ихтимал, күптәр кеүек, ун биш йәшемдән сауҙа эшендә приказчик булып китер инем". Әгәр ҙә бар донъя йөмәгәтселеге тарафынан "Рәсәй федерализмы атаһы" тип танылған Әхмәтзәки Вәлиди үҙе Зәйнулла ишан Рәсүлевҡа шундайын баһа биргән икән, XX быуат башында ике ҡитғала көн күреүсе халыҡтарҙың азатлыҡ өсөн көрәш башында барыһынан элек Зәйнулла Рәсүлевты күрәбеҙ. Ишаныбыҙ, тәриҡәт юлында Аллаһы Тәғәлә хозурына тәүәккәллек вә фиҙаҡәрлек ҡылып, Рәсәй мәмләкәтендәге һәм ике ҡитғалағы бик күп халыҡтарҙы һәләкәттән ҡурсып, Рәсәй составында үҙаллылыҡ яулау маҡсатына ирештергән һәм уларға яңыса шарттарҙа дөрөҫ юл күрһәтеүсе шәйех булған. Шуға күрә беҙ уны хаҡлы рәүештә "Рәсәй федерализмы ҡартатаһы" тип атаһаҡ, һис тә яңылышмабыҙ, тием. Зәйнулла ишан Рәсүлев эшмәкәрлеге бөгөн дә актуаль. Сөнки һеҙгә тәҡдим ителәсәк материалда беҙ XX һәм XXI быуат баштары уртаҡлыҡтарын бик яҡшы күрәбеҙ.**




# БАШҠОРТ ШӘЙЕХЕ ЗӘЙНУЛЛА РӘСҮЛЕВ "ЭШЕ",

## йәғни Батша хөкүмәте һәм суфыйсылыҡ

### Инеш һүҙ

**Күп төрлө конфессиялы Рәсәй империяһы өсөн дәүләт-ислам мөнәсәбәттәренең ҡулайлы моделен эшләү мөһим әһәмиәткә эйә була. XVIII быуат аҙаҡтарында императрица Екатерина II илдә дин тотоу ирекле-ген иғлан итеп, мосолман халҡына бер ни тиклем дини үҙаллылыҡ мөмкинлектәре бирә. 1789 йылда Өфө ҡалаһында ислам эштәре буйынса юғары дәүләт учреждениеһы булараҡ Ырымбур дини йыйылышы-мөфтиәт ойошторолоуы яңы дини йүнәлештең бер көүҙәләнеше була. Шуның менән көнсығыш Рәсәйҙә "указлы" муллалар тип йөрөтөлә башлаған үҙенсәлекле Рәсәй дәүләт институттарына нигеҙ һалына ла инде. Был йәһәттән толерантлыҡ күрһәтеүсе империя сәйәсәте, шулай итеп, башҡорттарҙы, татарҙарҙы, ҡаҙаҡтарҙы һәм мосолман дине тотоусы башҡа евразия далалары халыҡтарын дәүләт тормошона йәлеп итеүгә юл аса.**

Был осорҙа батша властары урындағы мосолмандарҙың рухи тормошон тулыһынса контролдә тоторға ынтыла; Ырымбур мөфтиәте һәм "указлы" муллалар йөҙөндәге "рәсми" исламды һәр йәһәттән хупларға, ә инде башҡорт, татар һәм башҡа мосолман зыялыларының дини-мәҙәни яңырыуға тырышлыҡтарын кире ҡағырға әҙер тора. Был иһә әкренләп кенә этноконфессиональ нигеҙҙә көсәргәнешлек тыуҙырыуға булышлыҡ итә.

Уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән был документтар йыйынтығы 1870 йылдарҙа урындағы мосолмандарҙың дини ғәмәленә бер кемгә бер ниндәй зыяны булмаған, ләкин урындағы һәм баш ҡала чиновниктары тарафынан "Хөкүмәт сәйәсәтенә йөҙ тотмаған ялған тәғлимәт" тип ҡабул ителгән ҡайһы бер яңылыҡтар индергән башҡорттоң билдәле дин эшмәкәре, шәйех йәки ишан - Нәҡшбәндиә-Халидиә суфыйсылыҡ ордены етәксеһе Зәйнулла Рәсүлев (рәсми документтарҙа ул - Хәбибуллин, тулы исеме Зәйнулла ибн Хәбибулла әл-Шәрифи әл Троицки әл Нәҡшбәнди әл Муджаджиди әл Хәлиди, 1833-1917) менән батша властары араһындағы ҡаршылыҡтарҙы яҡтыртыу маҡсатын алға һөрә.

Был йыйынтыҡтың документаль нигеҙенә Башҡортостан Республикаһының үҙәк тарих архивы, Ырымбур өлкәһе дәүләт архивы һәм Рәсәй дәүләт тарих архивы материалдары тупланған. Был яңы тәү сығанаҡтар рәсми булмаған "халыҡ" исламиәте көүҙәләнеше иҫәпләнгән суфыйсылыҡҡа ҡаршы репрессив ғәмәлдәрҙең асылын сағылдыра. Шуның менән бергә был документтар Көньяҡ Уралда һис берҙәм булмаған суфыйсылыҡ практикаһын һәм уның үҫешен, суфыйсылыҡтың төрлө йүнәлештәре араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе, новатор шәйехтәр менән традицион ишан һәм "указлы" муллалар араһында барған дәғүәләшеүҙәрҙе күҙалларға, аңларға ярҙам итә.

Башҡорт шәйехе Зәйнулла Рәсүлевтың "эше" 1872 йылдың апрель аҙаҡтарында башлана. Ошо осорҙа күҙәтеп, хәбәр еткереп тороусы ҡайһы бер муллалар аша властарға Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Учалы улысы Аҡкүжа ауылы имам-хатибы һәм мәҙәрисе күп кешенән "секта" ойоштороп, үҙен "өсөнсө Мөхәммәт" тип таныта, тиғәнерәк мәғлүмәттәр килә башлай. Унда был "ялған уҡытыусының" Константинополдән килтерелгән ун-ун ике "ботлоҡ" "төрөк нәшерлегендәге баҫма әҙәбиәт"ен файҙаланып, "яңы тәғлимәт" таратыуы, "төрөк солтанына табыныуы" һәм "урыҫтарға ҡаршы һуғыш хаҡында күрәҙәлек итеүе" хаҡында хәбәр ителә.

Ошондай хәбәрҙәр менән бәйле 1872 йылдың 8 июнендә Ырымбур генерал-губернаторы Н. А. Крыжановский, З. Рәсүлев хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе юғары органдарға ваҡытында еткермәгәне өсөн шелтәләп, Ырымбур мөфтөйөнә был хаҡта ни уйлауын белдерергә бойора. Крайҙа башланған бындай "фетнә" хаҡында кисекмәҫтән Петербургҡа хәбәр ителә.

З. Рәсүлев һәм уның ғәмәлдәре хаҡында мөфтиәткә асылда Ырымбур генерал-губернаторының күрһәтмәһенән алда уҡ билдәле була. 1872 йылдың 20 мартында уҡ әле Ырымбур губернаһы Троицк өйәҙе Мулдаҡай ауылы имамы Әфтәх Исхаҡовҡа Рәсүлев "сектаһы" хаҡында ентекле мәғлүмәттәр тупларға ҡушылған була. Бының өсөн ул хатта тирә-яҡ ауылдар муллаларынан торған ышаныслылары менән йәшертен генә Аҡкүжа мәсетенә намаҙ мәлендә лә килеп китә. Һөҙөмтәлә урындағы шәйехтең "дини тәғлимәте"н сағылдырған ҡайһы бер нәмәләр асыҡлана. Рәсүлев уны крайҙа Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең Хәлидиә армытына эйәреүсе Стамбул шәйехе Әхмәд Зыяитдин Гөмөшхәнәүи (1813-1893) менән бергә (1868-1870-се йылдарҙа) хажға барған сағында танышып ҡайтҡандан һуң тарата башлай.

Ә. Исхаҡов мулланың 1872 йылдың 9 апрелендә мөфтөй исеменә яҙған хәбәренән һәм башҡа документтарҙан күренеүенсә, З. Рәсүлев тарафынан дини, шул иҫәптән урындағы мосолмандарҙың суфыйсылыҡ практикаһына индерелгән яңылыҡтар түбәндәгеләрҙән ғибәрәт була:

**1)** күмәк кешеләрҙең бергә ҡысҡырып зекер әйтеүе (үҙенсәлекле рәүештә һәм билдәле бер тән хәрәкәттәре менән оҙатылыусы, йөкмәткеһендә Алла исеме булған ғәрәпсә хәрәфәти формулаларҙы ҡат-ҡат ҡабатлап үтәлеүсе ҡатмарлы ритуаль йола; был Аллаһы Тәғәлә өммәтенә өлгәшеү, уға яҡынайыу, һәм, ахырҙа, уның менән "ҡушылыу" маҡсатында экстаз-транс хәленә килеү);

**2)** мәүлитте асыҡ һауала билдәле бер изге урындарҙа күп халыҡ йыйылып, бергәләп байрам итеү (йәғни Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең вафат көнө менгелек өсөн тыуған көнө булараҡ билдәләнеүсе Рабиғел әүүәл айының 12-һенә тура килә).

**3)** тиҫбе йөрөтөү һәм ҡулланыу (Аллаһы Тәғәлә хөрмәтенә әйтелгән маҡтау һүҙҙәре, уҡылған доғалар, ҡылынған дини ғәмәлдәр иҫәбе буйынса ағастан йәки ҡиммәтле таштарҙан епкә теҙелгән 99 бөртөк мунсаҡ, йәғни тәсбих, тиҫбе);

**4)** мәсеттәр һәм урындағы мосолмандар йорттарына эстән яуыз көстәрҙе ҡыуыу өсөн матур "грамоталар", йәғни шамаилдар элеп ҡуйыу (улар каллиграфик почерк менән Ҡөрьәндән алынған өҙөктәр, билдәле бер доғалар, Аллаһ һәм Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең, шулай уҡ З. Рәсүлев менән бәйле осраҡта (ҡайһы бер "изге"ләр - "Бохара изгеһе" хажи (шәйех) Баһауетдин Нәҡшбәндиә, төрөктәрҙең иң өлкән муллаһы шәйех А. З. Көмөшхәнәүийә һәм башҡаларҙың исемдәре);

**5)** намаҙ ваҡытында йәки күмәкләп зекер әйткәндә транс хәленә килеү өсөн шифалы һәм хуш еҫле майҙар ҡулланыу.

Бында властарға хәбәр еткереп тороусы Ә. Исхаҡовтың Диниә йыйылышына шикәйәтендә Зәйнулла шәйех индергән "зарарлы яңылыҡтар"ҙың ғөрөф-ғәҙәт, йола рәүешендәге фәҡәт тышҡы күренештәре генә иҫәпләп сығыла.

Нәҡшбәндиә тәриҡәте Хәлидиә армытының суфыйсылыҡ гилеме асылы иһә Ырымбур мөфтөйө "тикшереүсеһе" өсөн аңлайышһыҙ хәлдә ҡала. Зәйнулла шәйехкә эйәреүселәрҙең ғәжәп итерлек күп ("ете меңләп кеше"), унан ҡала уға эйәреүсе мөриттәрҙең туҡтауһыҙ арта барыуы һәм тәсбих һатыуҙан килгән төшөм күләме (бераүһенә "биш һум һәм унан да артығыраҡ"), "хуш еҫле майҙар", шулай уҡ мөриттәрҙән яуып торған саҙаҡа керемдәре шымсыға иҫ китмәле тәьҫир итә. Тап шул нигеҙҙә Мулдаҡай муллаһы, Зәйнулла шәйехтең "законға ҡаршы" ғәмәлдәре халыҡ араһында - ығы-зығы, мосолмандар араһында фекер айырымлығы тыуҙырыуы, "ысын тәғлиматтән" айырылыуҙың халыҡ араһында "әхләҡи боҙоҡлоҡтарға" килтереүе хаҡында һығымта яһай. Диниә йыйылышын ул, әгәр ҙә З. Рәсүлевтың "яңылыш юлдағы сектаһы" үҫешен туҡтатмаған хәлдә, уның "хәүефле һөҙөмтәләргә һәм баш күтәреүгә" килтереүе ихтимал, тип иҫкәртә.

1872 йылдың 15 майында мөфтөй талабы буйынса З. Рәсүлев Өфөгә "әңгәмә"гә саҡырыла. Уның барышында Рәсүлевтың мосолмандар араһында, ысынлап та, суфыйсылыҡ таратыу менән шөғөлләнеүе асыҡлана. Диниә йыйылышының 1872 йылдың 30 майындағы ултырышынан журналға яҙылыуынса, Аҡкүжа имамы мәсеттә тәриҡәт ғилеме (Хәҡиҡәтте танып-белеүҙең мистик юлы һәм үҙ-үҙеңдә дини-әхләҡи камиллаштырыу - **М. Ф.**) буйынса шәриғәттең (мосолман өсөн мотлаҡ һәм хәҡиҡәт булған хоҡуҡи һәм әхләҡ нормалары) элекке ҡанундарына тап килеп бөтмәгән өҫтәмәләр менән намаҙ уҡыуы тураһында бәйән ителә. Мөфтөй һәм уның ярҙамсылары (ҡазыйҙар) тарафынан Рәсүлев шәйехкә, "уның яңылышлыҡтарын һәм хаталарын күрһәтеп, тейешле өгөт-нәсихәт яһала". Шунан һуң шәйех "аңлы рәүештә үҙ яҙылыҡтарына инаныр, шәриғәт мәғәнәһен боҙоп, мәҙрәсәләрҙә һәм мәсеттә уҡылған намаҙҙар мәлендә тәриҡәт ғилемен таратмаҫҡа тигән ҡәтғи яуаплылыҡ алып ҡул ҡуя. Башҡорт шәйехенә ҡарата бер ниндәй ҙә золомлоҡ ҡылынмай.

Йыйылыштың новатор-шәйех эшмәкәрлегенә сабыр мөнәсәбәте, бер яҡтан, башҡорттар һәм татарҙар араһында суфыйсылыҡтың күптән инде ныҡлы тамырланыуы менән аңлатыла. Уның ҡайһы бер элементтары урындағы зыялылар һәм ябай халыҡ, айырыуса ярлы ҡатлам кешеләренең дини инаныуҙарының айырылғыһыҙ өлөшөнә әүерелгән була. Нигеҙҙә бөтә шәкерттәр (мәҙрәсәлә белем алыусылар) һәм муллалар ҙа суфыйсылыҡ тәғлиматенең билдәле бер йүнәлештәренә эйәрә, ҡайһылары хатта уны таратыуҙа ҡатнашып, шәйех исемен йөрөтә һәм шул уҡ ваҡытта улар империяға яраҡлы кешеләр булып ҡала алғандар.

**Марсель ФАРХШАТОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Командирҙар, был хәл булырын, бәлки, алдан белгәндер, беҙгә бер ни әйтмәнеләр, ә үҙҙәре яланға, арыш араһына инеп ятҡан. Урман эсендәгеләрҙең күбеһе һәләк булды.*

# Әсир һалдат

## йәшәү өсөн

**Районыбыҙҙа билдәле шәхес булған Сафиулла Хафиз улы Иҫәнов тураһында һөйләргә булдым әле "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына. Кем ул Сафиулла Иҫәнов? 1903 йылда Йомаш ауылында тыуып-үҫеп, шунда баҡыйлыҡҡа күскән. Ул хеҙмәте, тик үҙенә генә хас сифаттары менән халҡының ихтирамына лайыҡ шәхес. Уны крәҫтиән, шул уҡ ваҡытта философ та, шағир ҙа, сәсән дә, рәссам да, скульптор ҙа, уҡытыусы ла, крайҙы өйрәнеүсе лә, ғалим да тип әйтеп була. Мин бында уның һуғыш яҙмаларын тәҡдим итәм. Ул һуғышта бик аҙ ҡатнашҡан, тәү ҡарашҡа ҡаһарманлыҡ күрһәткән яугир түгел. Фронтҡа барған ябай һалдат. Ул яҙмаларын хөкөм һөргән сәйәсәткә яраҡлаштырып, ҡупшылап, маҡтап, яраҡлаштырып та яҙмаған. Булған хәл-ваҡиғаларҙы ғәмәлдә нисек булған - шулай бәйән иткән. 3 көн оборонала ятып, 17 көн уңышһыҙ һөжүм һөҙөмтәһендә хәлһеҙләнгән хәрби берәмек юғары командованиенан сигенеү тураһында бойороҡ алғас та, түбәндәге комсостав тарафынан ваҡытында үтәлмәүе арҡаһында часть ҡамауҙа ҡала, командирҙары быны һиҙептер, юҡ була. Әсир ителгән совет һалдаттарының күргән ғазаптары иҫ китерлек. Был ҡулъяҙма йәшәү өсөн көрәш өлгөһө булырлыҡ. Йәне ҡыл өҫтөндә генә ҡалғанда ла, ул сараһын табып йәшәргә тырышҡан. Шулай уҡ был ҡулъяҙма кешеләрҙе бер-береһенә изгелекле булырға, хеҙмәт һөйөргә, сабырлыҡҡа, матурлыҡҡа ынтылырға саҡыра. Сафиулла ағай был донъянан күптән киткән инде. Уның яҙмалары беҙҙе уйландырһын ине. Бөгөнгө тыныс, матур тормоштоң ҡәҙерен белеп, боҙоҡлоҡтарҙан, яуызлыҡтарҙан, эскелектән, тәртип боҙоуҙарҙан арынып, гүзәл еребеҙҙе гөл-баҡсаға әйләндереп, бай, етеш, юғары мәҙәниәтле һәм иманлы тормош менән йәшәргә саҡырған бит ул ябай крәҫтиән дә, философ та, скульптор һәм рәссам дә булған изге зат, оло ағайыбыҙ Сафиулла Хафиз ибн Иҫән. Был материалды гәзит уҡыусыларға тәҡдим итеүҙең төп маҡсаты ла ошо. Уларҙы уҡыйыҡ та, уйланайыҡ, мөхтәрәм ҡәрҙәштәр!**

### Балалыҡтан сығыуым…

Балалыҡ йылдарым вайымһыҙ булды, үҙ тиңдәштәрем менән ҡыш көндәре санала шыуып, яҙ уҡ атып, бура һуғып, йәй ат көтөп, балыҡ тотоп, һыу инеп үтте. Шулай итеп, был дәүер уҙып та китте. 1914 йылдың көҙөндә тәү башлап мәҙрәсәгә уҡырға барҙым. Иҫкесә дини уҡыуҙы өйрәндем, Әфтиәк һәм Ҡөрьәнде уҡып сыҡтым. 1919 йылда яңыса әлифбаны өйрәндем. 1920 йылда атайым вафат булыу сәбәпле, ҡабат уҡырға йөрөмәнем. Әсәй менән ике ҡыҙ туғаным минең ҡарамаҡта ҡалды. Хужалыҡта бер ат, бер ҡолонло бейә, ике һыйыр, бер быҙаулы тана, ике башмаҡ, биш баш кәзә малы бар ине. 1920 йылдың яҙында бер гектар иген сәскәйнек, ҡаты ҡоролоҡ булып, иген үҫмәне, ҡара ер ятып ҡалды. Шул көҙҙә тананы һәм бейәне урлап алып киттеләр, ике башмаҡты бүре ашаны, быҙауҙы эт таланы.

1920 йылдың ҡышында ҡаты аслыҡ башланды. Малдарҙы һуйҙыҡ. 1922 йылға бөтөнләй мал ҡалманы. Яҙ көнө ауылдаштарым менән ағас ағыҙыу эшенә киттем. Әсәйем ике ҡыҙы менән өйҙә ҡалғайны, ашарҙарына булмағас, бик осһоҙға өйҙөң баш ябыуын һатҡандар. Мин байҙарға ер һөрҙөм, ураҡ урҙым, бесән саптым, утын-бесән ташыным. 1927 йылдың яҙында 11-12 кеше бергәләшеп ер эшкәртеү арteле төҙөнөк. Иген сәстек. Минең атым булмағас, уңыш бүлгәндә миңә ярты өлөш, атлыларға бөтөн өлөш эләгә. Эш ҡорамалдарын, иген, картуф орлоғон хөкүмәт кредитҡа бирҙе. 1928 йылда байҙарға бесән эшләп, аҡса туплап, бер тай һатып алдым. Шул уҡ йылда хөкүмәттән кредит алып, тағы бер ат һатып алдым. Әбделкәрим ауылынан Булатов Хәммәт ҡыҙы Нәсимә менән никахлаштыҡ. Тайымды һәм ҡатынымдың артынан килгән тананы һатып, бер һыйыр алдым. Хәҙер бисә лә, ат та, һыйыр ҙа булды. 1929 йылда колхозлашыу башланғас, мин уның ағзаһы булдым, атымды колхозға бирҙем. Шул йылдың яҙынан алып бригадир вазифаһын башҡарҙым, ә ҡышҡыһын Темәстә асылған бер айлыҡ курсҡа барып ҡайттым. Артабан Тәңребирҙе ауылына ололарҙы уҡытырға ебәрҙеләр. 1930-1931 йылдарҙың йәй айҙарында колхоз эшендә булһам, ҡышын Әптекәй ауылында ололарҙы уҡыттым. 1931 йылда сәсеү тамамланғас, райондан Чанышев Әҙеһәм тигән ағай килеп, мине Ырымбурға, Каруанһарайҙа асылған өс айлыҡ уҡытыусылар курсына ебәрҙе. Унан ҡайтыу менән мине Ысмаҡай (Смаҡай) ауылына эшкә, балалар уҡытырға ҡуштылар. Унда 1931-1933 йылдарҙа эшләнем, ә 1934 йылда Йомаш мәктәбенә килеп, 1938 йылға тиклем башланғыс класта уҡыттым. 1939 йылда йәйгеһен трактор бригадиры иҫәпсеһе булдым, ҡышҡыһын район ҡушыуы буйынса, Йомашта хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыларҙы уҡыттым.

### Һуғышҡа алыныуым

Шулай миҙгелгә ҡарап, алмаш-тилмәш ике эштә йөрөнөм. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, мине военкомат бер нисә тапҡыр саҡыртты, хужалыҡта ир-егет ҡулы етешмәү сәбәпле, кисектереп торҙолар.

Ә шулай ҙа һуңыраҡ, 1942 йылдың 5 апрелендә, Ислам ауылынан Тойғонов Талха Морат улы менән, райондан барлығы 35 кешене, хеҙмәт армиәһына Белоретҡа ағас ҡырҡырға ебәрҙеләр. Йәшәү, туҡланыу шарттары бик насар ине. Бер нисә көндән медицина комиссияһы ваҡытында үҙемдең һау-сәләмәт булыуым тураһында әйтеп, хәрби хеҙмәткә ебәреүҙәрен үтендем. Комиссия үткән 300-ләп кеше араһынан 35 кешене айырып алып фронтҡа яҙҙылар, Тойғонов Талха үҙе теләк белдермәгәс, уны ике йөҙҙән ашыу кеше менән бергә кире урманға ебәрҙеләр. Был айырылышыу бик ауыр булды. Мин уға һуғышҡа бар, тип кәңәш бирә алманым. Сөнки яуға инеү - ҡунаҡҡа барыу түгел бит.

Йә үлем, йә тере ҡалыу тигән һүҙ бит ул. Белореттан беҙҙе Боғорослан ҡалаһына, унан тағы ла арыраҡ ятҡан Мордовский Боғорослан, Кудерино, Турхановка ауылдарына тараттылар. Шунда һуғыш ғилеменә өйрәндек. Мылтыҡтан, пулеметтан атыу, граната ташлау, окоптар ҡаҙыу, йүгереү, һикереү - бөтәһе лә булды.

10 май кире Боғорослан ҡалаһы тимер юл станцияһына йыйып, кейендерҙеләр һәм көнбайышҡа ебәрҙеләр. Унда үҙебеҙҙең районда Фәтхетдинов Ханнан (Беренсе Этҡол), Халиҡов Ғәйнислам (Ғәҙелбай), Әфләтунов Нурислам (Ишмырҙа), Юлбарисов Ғәниулла (Әмин), Дәүләтшин Ғәйнулла (Темәс) тигән яҡын иптәштәр менән осрашып, бергә киттек. Беҙҙе Харьков ҡалаһына 60-70 саҡрым етмәй сығарып, шул марштағы рота исеме менән аталып, ай ярым йөрөнөк. Туҡланыу өсөн өсәр көнгә ҡоро аҙыҡ бирелә, уны бер көндә ашап бөтәбеҙ ҙә, ике көн ас йөрөйбөҙ. Аш-һыу өсөн тәғәйенләнгән махсус урын юҡ. Усаҡ яғырға рөхсәт ителмәй. Фронт һыҙығынан 7-8 саҡрым ерҙә урынлашҡанбыҙ, ә ҡулда бер ниндәй ҙә ҡорал юҡ. Мылтыҡ бирәбеҙ, тип бер нисә ауылға алып барҙылар, әммә ҡорал булманы. Һуғыш башланыуға бер йыл тулған көндә беҙҙе бер урманға алып барҙылар, унда ялан кухняһын килтереп, йылы аш ашата башланылар.

Украина ерендә ҙур урман юҡ, айырым өйкөм ағас һәм ҡыуаҡлыҡтар, ҡайҙа ни барын алыҫтан күреп була. Бер ваҡыт 15-20-ләп немец самолеты килеп, беҙ торған ағаслыҡты бомбаға тотто

Командирҙар, был хәл булырын, бәлки, алдан белгәндер, беҙгә бер ни әйтмәнеләр, ә үҙҙәре яланға, арыш араһына инеп ятҡан. Урман эсендәгеләрҙең күбеһе һәләк булды. Немец разведкаһы белгән, күрәһең, көнө буйына урап килә лә ошо урынды бомбаға тота. Төш ваҡытында бер аҙ туҡтанылар. Урман эсен йөрөп ҡарайым: Юлбарисов Ғәниулланың аяғы ике урындан яраланған, Дәүләтшин Ғәйнулланың биленә бомба ярсығы тейеп, күлдәге аша сорлап ҡан аға. Ул мине күреү менән санчаҫҡа алып барыуымды һораны. Ҡайҙа күтәреп, ҡайҙа етәкләп, йөҙ метр үттемме, юҡмы, яңынан бомбалар яуҙыралар, һауа тулҡыны икебеҙҙе лә осора һуҡты. Бөтә ерҙе ҡук төтөн баҫты, бер нәмә лә күренмәй. Ҡайһы берәүҙәрҙе ағас баҫҡан, ҡайҙа ыңғырашыу, ҡысҡырып ярҙам саҡырыу, йәнһеҙ кәүҙәләр ята. 200-ҙән ашыу һалдат инек, барлығы 60 кеше тороп ҡалғанбыҙ. Иптәшем Ғәйнисламды ҡабат күрә алманым, уның менән ни булғанын белмәйем. Үҙемдең башым шаңҡыған, йүнләп йөрөй ҙә, һөйләшә лә алмайым. Башым әйләнеп тик торҙо. Был беҙ торған ерҙән алыҫ түгел Кубинск исемле ҡаласыҡ һәм Староверово тимер юл станцияһы булған. Немецтар бомбаға тота башлағас та, төрлө яҡҡа ҡасып китеүселәр ҙә булды. 5-6 көн үткәс кенә берберебеҙҙе табышып, йыйылып бөттөк. Ҡалған һалдаттарҙы 142-се дивизияның 900-сө полкының 2-се батальонына өҫтәмә көс итеп ҡуштылар. Мылтыҡ таратып бирҙеләр. Тик уларҙы ҡып-ҡыҙыл тут баҫҡан, затворҙары йөрөмәй. Көн буйы ҡом менән ышҡып, көскә таҙартып алдыҡ, атырға яраҡлы булды, һөйләүҙәренсә, уны һыу төбөнән сығарғандар.

### Әсиргә эләгеүем

Өйҙән сығып китеүемә өс ай тигәндә, һуғышҡа индем. Тәүҙә оборонала торҙоҡ. Төнө буйы атабыҙ, көндөҙ алыштар тынып ҡала.

Өс көндән дошман көслө һөжүм башланы. Ун ете көн ҡаршы һуғышып, дошманды алға ебәрмәнек. Ләкин юғалтыуҙар күп булыу сәбәпле, 1 июлдә сигенергә әмер бирелде. Ләкин ни сәбәптәндер тик 6 июлдә генә сигенә башланыҡ, һуңлағанбыҙ икән. Немецтарға ҡамауға эләккәнбеҙ. Командирҙарыбыҙ Даев һәм Анисов ине, улар бер көндө юҡ булды. Беҙ, бер өйөр һарыҡ кеүек, ҡайҙа барырға белмәй аптырап ҡалдыҡ. Атырға патрон, ашарға ризыҡ юҡ. Оло юлдан өҙләкһеҙ дошман машиналары үтеп тора. Арыныҡ, асыҡтыҡ, унан бигерәк күңелебеҙ төштө.

Икәүләп, өсәүләп бүленәйек тә, һәр кем үҙ яйын тапһын, төн ҡараңғылығында тәүәккәлләрбеҙ, тип һөйләшеп ултыра инек, ҡапыл автоматтарын тоҫҡаған фашистар беҙҙе уратып алды. Улар барыбыҙҙы ла әсиргә алды, бер һарайға бикләп ҡуйҙылар. Унда бер көн, бер төн тоттолар. Исмаһам, һыу ҙа бирмәнеләр. Икенсе көн тирә-яҡтан 700-800-гә яҡын әсирҙе бер урынға йыйҙылар. Тәүҙә барыһын да тентенеләр, шунан яҡын бер станцияға алып киттеләр. Ҡаршыбыҙға ҡоҙоҡтан һыу алып торған мәрйә осраны, уның биҙрәһенән биш көрөшкә һыу эсергә рөхсәт иттеләр. Сафҡа теҙелгән һалдаттар сират буйынса һыу эсә башланы, артараҡ торған йәш егет, түҙемһеҙләнеп, алғараҡ үрелгәйне, немец офицеры нагандан уның аяғына атып ебәрҙе. Меҫкендең итек үксәһе менән ҡуша аяғының үксәһе айырылып сыҡты, ҡаны сөбөрләп аға башланы, һыу эсеү ҡайғыһы китте. Бахыр яралы һалдат атлай алманы, уны атып киттеләр. Станцияға барып еткәйнек, тимер юл боҙоҡ булып сыҡты, шуға күрә кире боролдоҡ. Төн еткәс, беҙгә асыҡ һауа аҫтында ятырға ҡуштылар, һыу табып, туйғансы эстек. Әммә бының менән ас ҡарынды алдап булмай, бик ныҡ асыҡтыҡ. Эргәлә бәләкәй генә ауыл бар ине, ҡараңғы төшкәс, шул яҡҡа барҙым. Ерҙә бер өйөм түгелгән ваҡ картуф таптым, иптәштәремә әйтеп, шуны ашаныҡ. Иртәгеһенә Кубинск ҡалаһына алып барҙылар. Унда беҙҙе тыштан ҡойма менән уратып алынған иген келәттәренә индереп ҡуйҙылар. Стена буйҙарын, мөйөштәрен ҡарап сыҡтым, ике килограмм тирәһе бойҙай таптым. Шуны бөртөкләп сүпләнек, һыуҙа оҙаҡ ҡайнатып өйрә итеп эстек. Башҡа халыҡ ундай ашты белмәй икән. Шулай итеп, беҙ ике көндә лә үҙ тамағыбыҙҙы хәстәрләнек. Ә ҡалғандар бөтөнләй ас ине.

Юлда осраған ауылдарға беҙҙе индермәнеләр, ҡайһы саҡ йылға аша үтәбеҙ, һыу эсергә ирек бирмәйҙәр, кем туҡтай - шунда уҡ аталар. Беҙҙе һарыҡ көтөүен ҡыуған шикелле баҫтырып-ҡысҡырып ҡыуҙылар, яй атлағандарға мылтыҡ төйҙәһе менән һуҡтылар, ҡолап киткәндәрҙе аттылар. Көндәр бик эҫе торҙо, бөтөнләй хәл бөттө, үлән баштарын өҙөп сәйнәгән булабыҙ. Силғауҙар һыуланып, бармаҡтар иҙелде. Арып, аҡһай башлаһаң - бер пуля.

### Лагерҙағы тормош

Яңынан Кубинский станцияһына килдек. Бында һигеҙ кешегә бер килограмдан икмәк тараттылар, һәр вагонға алтмышар кешене индереп бикләнеләр ҙә, шул уҡ төндә Харьковҡа

✓ Мин вагондан көс-хәл менән төштөм, атлай алмайым, имгәкләп барҙым. Ярай әле, иптәштәрем ташламаны, торғоҙоп, етәкләп тигәндәй алып барҙылар, рәхмәт инде. Улар булмаһа, минең хәжәтем бер себен кеүек.



барып еттек. Артабан беҙҙе теҙеп ҡуйып, лагерға алып киттеләр. Лагерь тигәне батша заманында төрмә булған икән. Урындағы халыҡ телендә Холодная гора тип атала. Ултырған урыны Йомаш ауылының яртыһындай булыр, 3 метр бейеклектәге таш ҡойма менән уратып алынған, өҫтөнән тағы 1 метр бейеклектә сәнскеле сым һуҙылған. Дүрт мөйөшөндә - дүрт вышка, унда автомат тотоп немец һаҡсыһы тора. Тимер ҡапҡала ла һаҡсы. Лагерь эсе сым менән бер нисә өлөшкә бүленгән. Ҡоймаға 3 метрҙан яҡыныраҡ барыу тыйыла. Әгәр ул яҡҡа аяҡ баҫһаң - бөттөң, вышкала торған һаҡсы ата ла ҡуя. Лагерға килгән көндө өҫ-баш, аяҡ кейемдәрен һалдырып алдылар, эске кейемдә генә ҡалдыҡ. Исем-фамилияны һорап та торманылар, хас та мал көтөүе кеүек ҡыуып индерҙеләр. Төрмәлә икешәр ҡатлы лееғәлене осратыуы тураһында әйтте. Уны күрәйем, тип, ашығып кешеләр араһынан үткәндә аңғармаҫтан полицейскийға һуғылдым. Ул ҡулындағы шланғыһы менән битемә һуғып ебәрҙе. Тағы ынтылғайны тиҙерәк халыҡ араһына инеп юғалдым. Битем ҡара көйөп сыҡты, шешеп, күҙҙәрем йомолдо. Яҡташымды табыу өмөтө өҙөлдө. Лагерға көн һайын тигәндәй бик күпләп әсирҙәр килеп торҙо. Бында Төркмән ауылынан Сафин Хәйбулла, Туҡтағолдан Әхмәтов Әхмәҙулланы осраттым.

Көндәрҙең береһендә Ә. Әхмәтов: "Икәүләп ҡасайыҡ, бында барыбер астан үләбеҙ", - тине. Мин риза булманым. Бер нисә көндән беҙҙе юл йүнәтергә алып киттеләр. Ҡырсынташты юлға тигеҙләп түшәп йөрөгән мәлдә янибыҙға күплә машина килеп туҡтаны. Унан сыҡҡан кеше беҙҙе эшләтеп йөрөгән нехәлендә осрашып торабыҙ. "Бынан ары гел бергә йөрөрбөҙ", тип һөйләштек, әммә Миңлеғәленең яҡын иптәштәре - мине, минекеләр уны ҡабул итмәне. Миңлеғәле Ниязғол ауылы егете Кәримов Рәхмәтулла менән таныштырҙы.

## Аслыҡтың күҙенә тура ҡарап…

Аслыҡ ныҡ йонсотто. Көнөнә 700-800 грамм кәбеҫтә ашы, шырпы ҡабы ҙурлығында көнбағыш жмыхы бирәләр, был ризыҡ тәндә йәнде генә тотоп торҙо инде. Бер көн Миңлеғәле миңә үҙҙәре менән эшкә йөрөргә тәҡдим итте, унда төш мәлендә ашаталар, ҡандан эшләнгән колбаса бирәләр икән. "Иртән ҡапҡа янына кил дә, төркөм араһына инеп кит", - тине. Әммә беренсе көн яҡын килә алманым. Икенсе көн тағы ҡапҡа янына килдем, әмәлгә ярағанюғалттым. Брезент ярпыһынан котелок тегеп алдым. Бирелгән ашты шунда һалдырҙым.

Бындай тормошта үҙен-үҙе хәстәрләй белмәгән кешеләр күп үлде.

Сослоҡ, нәфсеңде тыя белеү ғүмерҙе һаҡлауға ярҙам итә. Ас йөрөп, осраҡлы рәүештә мул ризыҡҡа тап булып, самаһыҙ күп ашауҙан, йә булмаһа, иҫкергән, күгәргән ашамлыҡтан күптәр һәләк булды.

## Көн дә үлем көтөп…

1942 йылдың 17 сентябрендә Харьков төрмәһенән мең кешене оҙаттылар. Ике ай ярым эсендә күргән төрмә михнәттәре, ҡәһәрле яҙмыш мәңге онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдырҙы. Станцияға еткәс, вагондарға тынҡыслап тултырҙылар ҙа, ишеген бикләнеләр. Эстә ҡараңғы, бер ни күренмәй. Өҫтә бәләкәй генә бер тәҙрә күҙендәй тишек бар,

Был ерҙә арыу ғына ашата башлағайнылар, өс көндән бынан киттек.

Белая Церковҡа ебәрҙеләр. Унда һуғыштан алда беҙҙең һалдаттар хеҙмәт иткән, шулар йәшәгән казармаға индек. 2000 кешегә тәғәйенләнгән, бер иш, бер төҫтәге икешәр ҡатлы йорттар теҙелгән. Бында электән торған әсирҙәр янына беҙҙе ҡушманылар. Карантинда булдыҡ, аҙна һайын йыуындырҙылар, көнөнә 150 грамм икмәк һәм шыйыҡ аш бирҙеләр. Казарманан иртәнге сәғәт 6-ла ҡыуып сығаралар ҙа, киске 8-ҙә генә инергә рөхсәт итәләр. Көндәр һыуына башлағас, асяланғас, ябыҡҡан халыҡ өшөй. Һуғыш алдынан бында оҙон канау һуҙылған булған, көндөҙ шунда төшөп ултырабыҙ, унда ышыҡ.

Төньяҡтан әсе ел иҫә, түҙеп торғоһоҙ. Ярай әле үҙемә аламанан ялғап-ҡоршап тигәндәй, өҫтәмә кейем рәтләп алдым. Күптәр күлдәк-ыштандан ғына. Ашарға көнөнә бер мәртәбә, сәғәт 4-тә бирәләр. Әсирҙәр араһында эс ауырыуы таралып китте. Дарыу юҡ. Имән ҡайырын ҡайнатып эсеп тә ҡарайҙар, әммә бер әмәл дә юҡ. Өс көн ауырыйҙар ҙа - үләләр. Мәйеттәрҙе ташып өлгөртә алмайҙар. Был ауырыу Рәхмәтулла Кәримовты ла алып китте. Миңлеғәле менән бик ныҡ ҡайғырҙыҡ, үҙебеҙ көн дә үлем көтәбеҙ. Бер соҡорға биш йөҙләгән мәйетте күмеп, башына бағана ултыртып, "Бында 500 кеше күмелде" тип яҙып ҡуйылған бәләкәй генә тау хасил булды.

# ЯҘМАЛАРЫНДА...

## көрәш өлгөһө

бер нисә ҙур йорт бар. Унда ун меңләп кеше һыя, ә ҡалғандар асыҡ һауа аҫтында ята.

Төндә килгән әсирҙәрҙең кейемен һалдырмай индерәләр. Электән бында йәшәгәндәр, улар йоҡлаған арала, шинелдәренең салғыйын ҡырҡып ала. Унан табанына брезент ҡуйып, тапочка тегеп һаталар. Харьков лагерында совет аҡсаһының 10 һумы немец аҡсаһының 1 маркаһына торошло булды. 1 ҡап тәмәке 80 һум, тоҙҙоң бер ҡалағы 5 һум, бер бит ҡағыҙ 10 һум, шырпы ҡабындай жмых киҫәге 20 һум. Был әйберҙәрҙе лагерҙан ситкә сығып эшкә йөрөгән тотҡондар алып килеп һата ине. Көн дә лагерҙан ике меңләп кешене эшкә ебәрәләр. Эшсе көс һорап килгән заводчик, фабрикант, фермерҙар иртәнге сәғәт 8-9 араһында һәр береһе 100, 200, 300 кеше ала. Әсирҙәрҙе полиция оҙатыуында алып йөрөйҙәр.

Харьков лагерында бер ғәйепһеҙгә туҡмалып та алдым. Станцияла вагон менән килгән оҙон телеграф бағаналарын бушатабыҙ. Уларҙың бер метрҙай ергә күмелә торған төп яғы яндырылып ҡоромланған. Ҡойоп ямғыр яуа. Бағаналарҙы тимер юлдан 100 метр самаһы ситкәрәк ташып, штабелгә йыуан һәм нәҙек баштарын аралаштырып һалабыҙ. Шунда яңылыш ике йыуан баш бергә тап килеп, кире бороп һалған ваҡытта немецҡа тейеп үткәнмен. Ул арттан килеп аяҡтың бөгәренә ике тапҡыр типте. Итегенең башындағы тимер бик ныҡ ауырттырҙы. Көскә лагерға барып еттем, аяғым шешеп китте, бер аҙна тирәһе атлай алмай, имгәкләп йөрөнөм.

Бер көн Юлыҡ ауылынан Ғайсин Усман ағай эргәмә килеп, тотҡондар араһында Барлыбаев Рәсүлдең улы Миңмец менән һөйләште лә, 10 кешене ҡалдырып (улар араһына мин дә эләктем), ҡалғандарҙы лагерға ҡайтарҙылар. Беҙ 100 метр самаһы машина артынан эйәреп барғас, бер соҡор янында туҡтаныҡ. "Был беҙҙең ҡәберлек инде", тигән ҡурҡыныс уй мейемде телеп үтте. Ләкин мин уйлағанса булмаған икән. Көплө машина эсенән бер йәһүд ғаиләһен сығарҙылар - ир, ҡатын, бер нисә бала. Иң бәләкәй сабыйға алты ай тирәһе булғандыр, ул ултыра ла белмәй ине.

Уларҙы берәм-берәм ата башланылар. Сабыйҙы ер өйөмө эргәһенә кәҫ ҡыҫтырып ултыртып аттылар. Бындай яуызлыҡтан, ҡанһыҙлыҡтан күҙҙәремдән йәш атылып сыҡты. Эргәмдә торған немец илап торғанымды күреп, тешен ыржайтып көлөп ебәрҙе. Ошоноң менән бөткәндер, хәҙер мәйеттәрҙе күмергә ҡушырҙар, тип көтөп торғанда, машинанан Әхмәтов Әхмәҙулланы алып сыҡтылар. Уны танып, ҡотом ҡалманы, ситкә боролоп торҙом, хәлем ҡыл өҫтөндә - миңә өндәшһә, бергә атасаҡтар бит. Әхмәҙуллаға атҡас, ул ниндәйҙер өн сығарҙы ла, соҡор эсенә ауҙы... Был хәл 1942 йылдың сентябрендә булды.

Көндәрҙең береһендә беҙҙе икенсе лагерға ебәреү өсөн йөҙәр-йөҙәр кеше итеп сафҡа теҙҙеләр. Шул саҡ артымда торған ауылдашым Барлыбаев Миңлеғәлене күреп ҡалдым. Бер-беребеҙҙе ҡосаҡлап, илап ебәрҙек. Ауыр көндәрҙә ауылдашымды осратыу йәшәүгә дәрт бирҙе. Ул да минең кеүек күлдәк-ыштандан, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан. Мин ауылдан сығып киткәндә ул ауыл Советы рәйесе булып эшләй ине. Бына хәҙер әсирҙәр рәүешендә, йолҡошдай, был төркөмдән ете кешене икенсе лагерға ебәргәндәр икән, мине Миңлеғәле янына алдылар. Уның менән 15 көн эшкә йөрөнөм, тамаҡ ризыҡҡа әҙерәк туйып ҡалды.

Өйҙән алып киткән 300 һум аҡсаны һаҡлап йөрөнөм. Көндәрҙең береһендә, эшкә барғанда, шул аҡсаға дүрт ҡап тәмәке һатып алдым. Ике иптәшем менән ваҡ ҡына сигареттар яһаныҡ та, тәмәке тартыусыларға һаттыҡ. Аҡса күбәйҙе. Көн һайын жмых алып ашайбыҙ. Нисек булһа ла йәшәү өсөн көрәшәбеҙ. Төндә килгән бер әсирҙән арзанға ғына ботинка һатып алдым. Уны өйҙәренә ҡайтырға йыйынған украиндарға ҡиммәтерәк хаҡҡа һаттым. Ул аҡсаға тағы ла һәйбәтерәк ботинка алдым, тик уны алыусы булманы. Күреп ҡалдым: ҡойма аша берәй әйбер ташлаһаң, теге яҡтан ашамлыҡ осоралар. Уйлап торҙом да, ботинкаларҙы елгәрҙем. Көтәм-көтәм, теге яҡтан миңә бер нәмә лә ташламанылар. Хәҙер аҡса ла юҡ, ботинка ла юҡ. Сафин Хәйбулла ағай, күрәһең, бик асыҡҡандыр, өҫтөндәге күлдәген сисеп бирҙе лә, һатып, ризыҡ алып биреүҙе үтенде, һаттым. Аҡсаға тәмәке алдым да, унан сигареттар төрҙөк. Ике-өс көндән аҡсаны тағы күбәйттек. Хәйбулла ағайға күлдәк алып бирҙем, ҡалғанына ризыҡ алдыҡ.

Харьковтағы әсирҙәр лагеры - тамуҡтың үҙелер, тип уйлай торғайным. Бик ныҡ ябыҡҡас, янбаштарым тишелде, һис ятып булмай. Бет бик ныҡ үрсене, тырнана торғас, тән ҡутырлап китте. Шул хәлдә конвой менән эшкә йөрөтәләр. Юлда йөрөгәндә сүп-сар араһынан сепрәк киҫәге, мамыҡ осраһа, йыя башланым. Энә, еп табып, үҙемә бейәләйҙән аҙ ғына ҙурыраҡ яҫтыҡтар тегеп алдым. Уны янбаш, ҡолаҡ аҫтына түшәп яттым. Бер көндө котелогымды шунан тоноҡ ҡына яҡтылыҡ төшә. Кешеләр әллә ҡайҙан ишеткән, беҙҙе Белая Церковҡа алып баралар, тигән хәбәр таралды (Киев өлкәһенең ҡалаһы). Бер станцияға туҡтағанда вагон ишеген асып, ике немец одеялға төрөлгән икмәкте эскә ташланы. Ишеккә яҡын ултырғандар талашып, һәр ҡайһыһы күберәк электерергә тырышып, онтап бөттөләр. Иҙәндән ҡомға буялып бөткән бәләкәс кенә бер киҫәк икмәк табып алдым, бөтөнләй ала алмағандар ҙа күп ине. Икмәкте тағы өс көн көтөргә тура килде. Хәҙер әҙерәк аҡыл инде беҙгә. Вагонда 50 кеше булған, ике кеше уртаға тороп, икмәкте ғәҙел бүлде. Берәр килограмлыҡ 16 икмәк ине, һәр беребеҙгә берәр телемдән тура килде. Бик оҙаҡ барҙыҡ, ҡайһы саҡ вагонды буш юлға ҡуйырҙар ине лә, көндәр буйы тик тора инек. Арол тигән станцияла төшөргә ҡуштылар. Килеп еткәнсе 8 кешебеҙ йән биргәйне. Мин вагондан көс-хәл менән төштөм, атлай алмайым, имгәкләп барҙым. Ярай әле, иптәштәрем ташламаны, торғоҙоп, етәкләп тигәндәй алып барҙылар, рәхмәт инде. Улар булмаһа, минең хәжәтем бер себен кеүек - немецтар атыр ҙа китер ине. Бәхеткә, лагерь яҡында булған.

Барып еткәс, бер киҫәк икмәк менән аш бирҙеләр. Шунан кейемдәребеҙҙе газ камераһына ҡуйҙылар, үҙебеҙ душта йыуындыҡ, һаҡал-мыйыҡ, сәсте машинка менән алдылар. Хәҙер бет бөттө. Йыуынып-ҡырынып алғас, бер-беребеҙҙең сиккә етеп ябығыуыбыҙҙы, тире лә һөйәктән генә торғаныбыҙҙы күреп хайран ҡалдыҡ, ҡурҡыныс һөлдә ине. Йыуынып алғас, шундай рәхәт, яңынан тыуғандай булдыҡ. Йоҡларға бер ҙур һарайға индерҙеләр. Ҡайһыһы һарай түбәһенә менеп ятты, минең кеүек хәлһеҙҙәр аҫта ятты. Тән ҡысынмай, рәхәтләнеп йоҡланыҡ.

Үҙем менән йыш ҡына сетерекле хәлдәр булып торҙо. Аш алырға тип ике рәт булып сиратҡа теҙелгән инек. Беҙҙең сират бик яй бара, ә тегеһе йылдам. Шул рәткә күскәйнем, полицейский күреп ҡалды ла, ҡулындағы шлангаһы менән йыға һуҡты. Тора алмай ята инем, иптәштәрем ярҙам итте, ярай әле немец тағы һуҡманы. Күп михнәттәрҙән һәм аслыҡтан үҙемдә йөрәк өйәнәге һәм ашҡаҙан сире башланды.

Бер көндө беҙҙе лагерь тышына теҙеп ҡуйып, тентеп сыҡтылар. Артабан Полыпа еренә, Силсе-Килсе лагерына алып киттеләр. Килеп еткәндә көн кисләгәйне, беҙҙе, 500 кешене, йөҙәр-йөҙәр итеп теҙеп ҡуйҙылар. Минән алда торған 300 кешене икенсе лагерға тәғәйенләп, алып китергә торғанда бер кеше тулмай сығып, минең эргәлә торған Барлыбаев Миңлеғәлене немец офицеры алып китте лә барҙы. Бер ни өндәшеп булмай, һөйләшергә ярамай бит. Иртәгеһенә һорашып белдем, уларҙы Радом лагерына ебәргәндәр. Шулай итеп, уның менән мәңгегә айырылыштыҡ. Ҡапыл килеп сыҡты, хушлаша ла алманыҡ. Поляк ерендәге лагерҙа ла әсирҙәр күп икән. Бер нисә мең, тинеләр. Башҡаларҙан айырмалы рәүештә, бында меңәр кешенән торған төркөмгә бүлеп, айырым тоталар, һәр меңдең үҙ кухняһы, 50 кешегә бер хужа, бер ҡаҙан ҡуйылған.

(Дауамы 10-сы биттә).

***✓ Үҙ яйың менән ҡайтырға тейешһең. Мин Одер йылғаһынан Һаҡмар буйына тиклем 15 тәүлек ҡайттым. Күпселек вагон башында барҙым. Был ваҡытта 1945 йылдың 15 октябре ине.***



(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

Бер көндө янымдан үтеп барған таныш кешене күреп: "Иптәш, һеҙ Мәминев түгелме?"-тинем. Ул ҡарап торҙо ла: "Мине ҡайҙан беләһең?"- тип һораны. Мин уны һуғыштан алда Йомаш ауылына килгән саҡта күргәнемде әйттем. Ул мал врачы булып эшләй ине, милләте буйынса татар. Танышым мине үҙе йәшәгән еренә алып барҙы, шинель бирҙе, тағы бер осрашҡанымда һаулығым хаҡында һорашты, шунан мине полицейскийҙарға күрһәтеп, миңә һүҙ тейҙермәҫкә ҡушты. Шунан һуң бер кем дә теймәне, ә башҡаларҙы туҡмап-туҡмап ҡыуалар ине.

Мәминев ауырыуҙарҙы санчаҫка алып барғанда миңә лә барырға ҡушты. Врач урыҫ кешеһе ине, ул мине ҡараны ла ауырыуым юҡлығы, ашау насар булғанға хәлһеҙ булыуымды әйтте. Танышым, врачҡа был кешене үлтермәҫкә тырышайыҡ, тине. Мине санчаҫка һалдылар. Уныһы бер һарай ине, эсенә һалам түшәлгән, бында арыуыраҡ ашаталар.

Ошонда Сафин Хәйбулла һәм Әбделмәнов ағайҙар эс ауырыуынан вафат булды. Харьков лагерында бергә михнәт күргән иптәштәремде юғалтып бөткәс, бөтә донъя емерелгән кеүек булды. Тиҙҙән беҙҙе Обходеки тигән лагерға алып киттеләр. Ул яңы төҙөлгән, гел таҡтанан эшләнгән бараҡтар, эсендә тимер мейесе бар, яғып йылытабыҙ. Аяҡта ағастан эшләнгән колодка, өҫтә иҫке шинель. Туҡланыу бик насар, кеше күп үлә. Бында беҙҙе ҡарауыллаған полицейскийҙар фин милләтенән ине. Улар 1939 йылғы фин һуғышы өсөн урыҫтарҙан, йәғни беҙҙән һәләк булған атаһы, ағаһы өсөн үс ала ине. Беҙҙе туҡмайҙар, йырларға ҡушалар. Йырлаһаҡ - көләләр, өндәшмәһәк - бысраҡҡа ятырға ҡушалар, тыңламаһаң - эттәренән талаталар.Ниндәй генә йәберләү ысулын тапмай ине улар! Иҫ киткес! Лагерь ҡапҡаһы эргәһендә ике ҡатлы йортта немец офицерҙары торҙо. Улар йыш ҡына балкон аша әсирҙәргә икмәк киҫәктәре ырғыта. Ас меҫкендәр уны эләктерергә тырышып, үҙ-ара һуғышып китә. Шул мәхшәрҙән немецтар тамаша ҡыла. Уларға - көлкө, беҙгә - үлем, йыш ҡына тапалып имгәнәләр, үләләр ине. Ошо лагерҙа саҡта Йәрмөхәмәт ауылынан Үҙәнбаев Нурфәйез тигән йәш егетте осраттым. Уның менән осрашҡанда атлай алмай йонсой инем. Аяҡ ҡата ла ҡуя, бөгөп тә, яҙып та булмай. Ул мине ҡултыҡлап алып йөрөнө, ахыр сиктә санчаҫҡа алып барҙы. Доктор грузин милләтенән, русса яҡшы һөйләшә. Мине дауаларға һалдылар, бында йылы һәм ашау ҙа бар.

1943 йылдың 15 апрелендә санчастағы ауырыуҙарҙы поезд менән Варшава дауаханаһына оҙаттылар, улар араһында мин дә бар инем. Тәғәйенләнгән урынға барып еткәнсе 7-8 кеше вафат булды. Дауаханала беҙҙе йыуындырҙылар, сәсте алдылар, аяҡҡа иҫкерәк калуш, яңы күлдәк бирҙеләр. Ауырлығымды үлсәгәндә 45 килограмм тарттым, илдә саҡта 54 килограмм инем. 15 көндә бер аҙ нығындым.

1943 йылдың май аҙағында мине икенсе лагерға ебәрҙеләр. Маламински ҡаласығындағы лагерҙа ауыр ҡул эштәрен башҡарҙыҡ. Артабан Краковҡа күстек. Унда Юлдыбай ауылынан Сараев Хәйбулла менән осраштым. Ул үҙҙәренең лагерында Барлыбаев Миңлеғәле лә булыуын әйтте. Был хәбәр мине бик ныҡ ҡыуандырҙы. Ғүмәр ауылынан Хәсәнов Ибраһимды осраттым. Бындағы эшебеҙ телеграф бағаналарын ташыуҙан ғибәрәт. Тимер юл станцияһынан 2 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан 20 мең бағананы ташып, штабелгә һалырға ҡуштылар. Уны эшләү өсөн шул араға бәләкәй тимер юл һалдыҡ һәм вагонеткалар менән һөйрәтеп ташып өйҙөк.

Кемдер берәү бәҙрәф стенаһына "Гитлер шайзе" (шайзе - немецсә бысраҡ, тиҙәк) тип яҙып киткән. Шуны күреп, бер офицер яҙыусыны таптыра башланы. Әйтмәһәк, бөтәбеҙҙе лә атыу менән янаны, шунан һуң һәр беребеҙҙән шул һүҙҙе яҙҙырып тикшереп сыҡты. Ул ерҙән беҙҙе Тернополгә алып киттеләр. Ҡаланан 5-6 саҡрым урында Березовка тигән ауыл эргәһендә бер лагерға урынлаштыҡ. Унда һарыҡ ҡырҡыу, силос һалыу, йәшелсә, картуф йыйыу кеүек ауыл хужалығы эштәрен башҡарҙыҡ. Арыш һуҡҡан мәлдә ҡаршы һөйләшкән өс иптәшебеҙҙе штраф лагерена алып киттеләр. Унда эләкһәң - сыҡмайһың.

1944 йылдың яҙынан Тернополдән Львовҡа тиклем 127 саҡрым араға канау ҡаҙыттылар. Шул канау трассаһы буйында иҫәпһеҙ-һанһыҙ автомашиналар, танкылар ҡыйрап ята ине. Бында тәүге көндәрҙә аяуһыҙ һуғыштар булған, беҙҙең ғәскәр бомбаға тотолған. Тернополдә йәһүдтәр күп йәшәй ине. Беҙҙе эшләтеп йөрөгән немецты атып киткәндәр. Шуны уларҙан күреп, бер ғәйепһеҙ 100 йәһүдте быуа ситенә теҙеп ҡуйып аттылар, һыу ҡандан ҡыпҡыҙыл булды, һабаҡ булһын, тип беҙҙе лә теҙеп ҡуйҙылар. Беҙҙән йыш ҡына: "Арағыҙҙа йәһүдтәр бармы?" - тип һорап, "кукуруз" һүҙен әйттерерҙәр ине. Сөнки улар "р" өнөн асыҡ әйтә алмай. Йәһүдтәрҙе айырым лагерҙа тотҡандар икән. Эшләп йөрөгәндәрен күрергә тура килде. Уларҙың кейемдәренә алдан да, арттан да тәре ҡуйылған, сәстәрен дә тәре итеп алғандар. Шуға улар алыҫтан таныулы ине.

1944 йылдың яҙында Сан йылғаһы буйындағы Кубки тигән ауылға күсерҙеләр. Унда канау ҡаҙыныҡ. Бер нисә көндән ҡаҙған соҡор эсенән яҙыу таптыҡ - партизандар тотҡондан ҡасып, үҙҙәренә ҡушылырға саҡырған. Байтаҡ кеше төн ҡараңғылығынан файҙаланып, урманға ҡасты. Иртәгеһенә немец жандармдары тентеү үткәрҙе. Беҙҙе чех еренә күсерҙеләр. Был 1944 йылдың көҙөндә булды.

## Ниһәйәт, көткән көндәр етте

Иешин ҡалаһындағы лагерҙа 1945 йылдың ҡышын үткәрҙек. Яҙға табан беҙҙе йәйәүләп Германия еренә ҡыуҙылар. Көнө буйы сафта атлайбыҙ, ике яҡта һыбайлы полиция командалары беҙҙе ҡыуып бара. Кис булһа, юлда ниндәй кәртә осрай - шунда бикләйҙәр. Атлай алмағандарҙы атып киттеләр. Бер көн бара торғас, бер немец йырлап ебәрҙе. Баҡтиһәң, Германия сигенә барып еткәнбеҙ икән. Туҡтатып, тәртип тураһында әйттеләр, немец ҡатындары менән һөйләшмәҫкә ҡуштылар. Быны үтәмәгәндәр шунда уҡ атыласаҡтары хаҡында иҫкәртелде. Беҙҙе Валденберг тигән ергә алып барҙылар. Юлда ҙур һәм бәләкәй ауылдар аша үттек, бер кеше лә юҡ ине - әллә ҡасып бөткәндәр, әллә йәшенгәндәр.

1945 йылдың марты килеп етте. Беҙҙән ағас ҡырҡтырҙылар, ер ҡаҙҙырҙылар. Артиллерия тубы шартлауы ишетелә башланы. Беҙҙе тағы ла икенсе ергә күсерҙеләр. Шулай йөрөгәндә Әхмәр ауылынан Маннапов Әғзәмде, Ғүмәрҙән Хәсәнов Ибраһимды, Темәстән Шәрипов Ялалды осраттым.

Бер мәрйә ҡатыны осрап, илай-илай ҡайғыһын һөйләне. Ул һуғыш алдынан Ленинградтан 15 километр алыҫлыҡта урынлашҡан ауылда йәшәгән, ә ҡыҙы Ленинградта уҡыған. Ҡала ҡамауға ҡалғас, ҡыҙ өйөнә ҡайта алмаған. Немецтар сигенгәндә был ҡатынды ла бүтәндәр менән бергә ҡыуып алып киткән. Икенсе ҡатын Старовехово станцияһынан. Бомбалар яуа башлағас, ул яслеләге сабыйын алырға йүгергән. Буталыш, сыр-сыу килеп әсәләр балаларын эҙләгән ваҡытта ҡатын үҙенеке кеүек кейенгән икенсе бер баланы яңылыш алып киткән. Ул шул сабыйҙы үҙе менән алып йөрөй, ә үҙенекенең яҙмышын белә алмай, үкһеп илай ине.

Икенсе фронт асылып, ике яҡтан да герман еренә һөжүм башланғас, беҙҙе, әсирҙәрҙе, ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырай башланылар. Хатта йөҙәрләгән кешене атып та китәләр, төндәрен ағас казармаға индереп, яндырыу осраҡтары ла ишетелде. Беҙҙе тағы чех еренә алып киттеләр. Немецтар көнбайышҡа ҡасалар. Юл тулы халыҡ, тәртип юҡ, кем ҡайҙа барғанын аңларлыҡ түгел. Бер ваҡыт комендант: "Гитлер капут", - тип иғлан итте. "Урыҫтар етеп килә, юлдарында осраған ауылдарҙы яндыралар", тигән хәбәр таралды. Шуға күрә немец халҡы көнбайышҡа, Америка ғәскәре ҡанаты аҫтына ынтылған.

Был хәлдәр 5-8 майҙа булды. Бер хәрби кеше: "Хәҙер үк юлды асығыҙ, совет танкыларын үткәрегеҙ", - тигән әмер бирҙе. Ул беҙҙе йыйып алып, фронт хәлен аңлатты. Совет һалдаттары әсирҙәрҙе һәм немецтарҙы айырып теҙеп ҡуйҙы ла, беҙҙе Траутинау ҡалаһына алып киттеләр. Совет һалдаттары Америка ғәскәрҙәре менән осрашырға китте.

Шулай итеп, беҙҙе немец ҡоллоғонан Совет Армияһы азат итте. Мең-мең рәхмәттәр әйтеп, тороп ҡалдыҡ. Бөгөндән беҙ ирекле кешеләр! Траутинау ҡалаһында кеше күренмәй, магазиндары асыҡ. Күп кешеләр яңы кейем кейеп алды. Мин юлда немец биргән сусҡа майын ашағайным, эскә тейҙе, йөрөп тә булмай, кәйеф юҡ. Теләр миңә лә кейем алып килде. Хәҙер бер-беребеҙҙе танымайбыҙ, танып алғас - көлөшәбеҙ. Күпмелер ваҡыт үткәс, радио аша ҡала коменданты, чех йәштәре патрулгә сыға, бер нәмәгә лә теймәгеҙ, тыңламағандар ҡулға алынасаҡ, тине. Ысынлап та, урамдарҙа беләктәренә аҡ таҫма таҡҡан, ҡорал тотҡан йәштәр күренде. Был ҡаланың коменданты беҙҙе кире Валденбергҡа оҙатты. Үҙебеҙ йәйәүләп юлға сыҡтыҡ. Ҡасҡан немецтар ташлап киткән ылауҙарҙа аҙыҡ-түлек, әйбер бар. Инеп йоҡларға буш йорттар күп. Бер кем дә беҙҙе туҡмамай, ҡыумай - рәхәт! Көнөнә 10-15 саҡрым барабыҙ. Валденберг ҡалаһында яҡын-тирәләге әсирҙәр йыйылған икән.

Беҙҙе ҡалаға килеп етеү менән оркестр менән ҡаршы алдылар. Арып килгән кешеләр хисләнеп, дәртләнеп китте. Аяҡтар еңеләйҙе, шатлыҡтан күңелдәр тулды, илашып та алдыҡ. Эй, донъя, эй, яҙмыш, ниҙәр генә күрһәтмәй әҙәм балаһына. Бер ҡараһаң, һиңә мылтыҡ көбәге төбәлгән, тештәрен ыржайтып немец овчаркаһы ташлана, икенсе ҡараһаң - тәрән хис, моң һине сорнай.

Эй, илаһи Хоҙай Тәғәлә! Кем ғәйепле беҙҙең ошо хәлгә ҡалыуыбыҙға?

Ғәйеплеһе миллионлаған халыҡ алдында яуап тотормо икән? Был ҡалала әсирҙәр 12 мең булған.

Улар араһынан 40 йәштән түбәнен айырып, һуғыш ғилеменә өйрәтә башланылар. Ә ололарҙы ҡырға алып сығып, лекция уҡынылар. "Особый отдел" хеҙмәткәрҙәре саҡырып, һорау ала башланы, һин кем, ҡайҙан, ҡасан һуғышҡа алындың, нисек әсиргә эләктең, кеүек һорауҙар яуа ғына. Тикшереп бөткәс, Одер йылғаһы буйындағы икенсе бер монастырҙа айырым-айырым һорау алдылар. Шул ваҡытта бер старшина килеп, бер нисә кешене алды, шулар араһында мин дә бар инем. Беҙгә немец ауылдарына йөрөп, ҡайҙа күпме ашлыҡ барлығын белешергә кәрәк ине. Өй һайын йөрөп, яҙып алабыҙ. Ә аҙаҡтан уны йыйып алабыҙ, хаҡын, әлбиттә, түләйбеҙ. Аҙыҡты күп тапһаҡ, әсирҙәрҙе һәйбәт ашаталар, аҙ булһа, кирәһенсә. Торған урында тирмән бар, шунда он тартабыҙ. Икмәккә хәҙер норма юҡ, күпме теләйбеҙ, шулай ашайбыҙ. Лагерҙа ашау яҡшы, кискә ҡарай 100 грамм спирт бирәләр. Яҡшы туҡланғас, шәбәйеп киттек. Документтар әҙер булғас, ҡайтарҙылар. Үҙ яйың менән ҡайтырға тейешһең. Мин Одер йылғаһынан Һаҡмар буйына тиклем 15 тәүлек ҡайттым. Күпселек вагон башында барҙым. Был ваҡытта 1945 йылдың 15 октябре ине.

Мин киткәндә ҡатыным 5 бала менән тороп ҡалғайны. Барыһы ла иҫән-һау торған, тик кейемдәре, түшәнеп ятырға бер нәмәләре лә юҡ, йорт ҡаралтылары бик туҙған. Ғөмүмән, ауыл халҡы бик ныҡ бөлгән. Өйҙәр иҫкергән, серегән, урамдарҙы ҡый үләндәре баҫҡан, бер йәм юҡ. Мине күрергә бөтә ауыл килде. Кешеләр илай, күптәр ҡайта алманы бит.

Ауылға ҡайтҡас та бер йыл буйы тыныслыҡ булманы. Районға, военкоматҡа ураған һайын саҡырттылар, тикшерҙеләр. Бер килке ваҡыт уҙғас, "Германияны еңгән өсөн" миҙалын бирҙеләр, һуңғы сиктә, минең илемә хыянат итмәүемә, үҙем теләп немецтарға бирелмәүемә ышанғандарҙыр.

Һуғыштан ҡайтып 10 көн үткәс, колхозға эшкә сыҡтым. Келәт мөдире булдым, йәйен трактор бригадаһында хисапсы, ҡышын фермала мал ҡараным. Унан һуң колхоздың тауар-материалдары келәтенә мөдир итеп тәғәйенләндем.

Юғалтыуҙар, ҡайғы-хәсрәт үҙ илемә ҡайтҡас та ташламаны. 1953 йылда ҡатыным Нәғимә, унан өс ай үтеүгә ҡыҙым Гөлдәр мәңгелеккә ташлап китте. Балдыҙым Мәхтимә менән никахлашып йәшәй башланым. 1968 йылда 65 йәшкә етеп, хаҡлы ялға сыҡтым. Шулай ҙа тик ятманым, йәмәғәт эштәренең уртаһында ҡайнаным. Мәҙәниәт йорто эргәһенә Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары һәйкәле тирәһендә ағастар ултырттым, уларҙы даими тәрбиәләп торҙом. Ауылдаштарым өсөн, тип ҡоҙоҡ ҡаҙҙым, уны матур итеп биҙәнем һәм йыһазланым..."

## Үҙем өҫтәгәндәр

Сафиулла ағайҙың бында яҙмағандарын телгә алмаһаҡ, яҙыҡ булыр. Ул үҙенең ихатаһында асыҡ һауа аҫтында тәбиғәт музейы булдырҙы. Унда ауыл тирәһендә үҫкән ағастарҙың төрлөһөн ултыртты, ошо төбәкте үҙ иткән ҡырағай хайуан, ҡоштар, хатта йылан, кеҫәрткеләрҙе ағастан юнып эшләп, иҫ киткес мөғжизәле мөйөш булдырҙы. Унда айыу, бүре, төлкө, ҡуян, ҡоралай, һеләүһен, тейен, ҡоштарҙан ҡарағош, бөркөт, ыласын, торна, аҡҡош, һуйыр, ҡор, сел, ҡарлуғас, һандуғас һ.б. урынлаштырылған ине. Ваҡытында был музей бер тәрбиәүи урын булды. Төрлө ҡала һәм ауыл мәктәптәре уҡыусыларын Йомашҡа Сафиулла олатай музейына алып килерҙәр ине. Бындағы мөхит, зауыҡ менән эшләнгән экспонаттарҙың тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләүҙә әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Сафиулла олатай кешеләр менән уртаҡ тел таба белеүе, мөләйем ҡиәфәте, асыҡлығы, ихласлығы менән һәр кемде йәлеп итер ине. Бында ваҡытында яҙыусылар, шағирҙар, партия һәм дәүләт эшмәкәрҙәре булып китте. Улар үҙешмәкәр скульптор, рәссам, шиғри күңелле Сафиулла Иҫәнов менән фекер алышыр, осрашыуҙар үткәрер ине. Үҙе иҫән саҡта, 1960-1970-се йылдарҙа уның хаҡында республика баҫмаларында бик күп мәҡәләләр донъя күрҙе. Шуны ла әйтергә кәрәк, уның мин белгән балалары - ҡыҙы Клара, улы Кәрим иҫ киткес оҫта рәссамдар. Йомашта йәшәүсе Кәрим Иҫәновтың йорт ихатаһы ла үҙенең төҙөлөшө, йыһазландырылыуы, биҙәлеше һәм гөлсәскәгә күмелеп тороуы менән һәр ҡайһыбыҙға өлгө булырлыҡ.

**Әмир СӘЙҒӘФӘРОВ,**
**Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе.**

*КӨЛКӨФӨ*



# БЫЛ ХӘЛДӘР КҮҢЕЛДӘ -
## йылмайта бөгөн дә

### Химчисткамы, мәҙрәсәме?

Лилиә ҡыҙы Ғәлиәне поликлиникаға алып бара. Кеше әллә ни күп булмаһа ла, сират үтә әкрен ҡуҙғала. Биш минутҡа, тип ҡайҙалыр киткән табиб ярты сәғәт буйы әллә ҡайҙа юғалып тора. Ахырҙа, сират Лилиәгә етә. Табиб карточканың тәүге битенә күҙ һалып, Ғә-ли-ә, тип ҡыҙҙың исемен һуҙып уҡып, йылмайып ҡуя. Унан ҡатынға ҡарап:

-Нишләп ҡыҙығыҙға химчистка исемен ҡуштығыҙ ул? - тип һорай.

-Юҡ, химчистка түгел, мәҙрәсә исеме, - тип яуап бирә әсә кеше.

### Билдә

Мансур ҡустымды каникулда Өфөгә алып килдем. Тәүге тапҡыр ҙур ҡаланы күргән малай бындағы халыҡтың мыжғып тороуына иҫе китте. Малай һорау артынан һорау яуҙыра ғына:

-Ағай, ниңә анау апайҙар тәмәке тарта ул?

-Ағай, анау ағайҙар сүплектә нимә эҙләй ул?

Күргәндәренә бәйле кисерештәре бай булғанғамы, Мансур беҙ йәшәгән йортто, туҡталышты иҫендә ҡалдыра алмай йөҙәне.

-Бында бөтә йорттар ҙа бер төрлө. Был тиклем ҡалала кешеләр нисек аҙашмай йөрөй, өйҙәрен таба икән? - тип аптыраны ул бер көн килеп.

Ике-өс көндән һуң ҡустымды театрға алып барҙым. Театрҙан сыҡҡанда ҡараңғы төшкәйне.

-Ағай, театрға килгән кешеләр ҡараңғыла ҡурҡмай, нисек итеп өйҙәренә ҡайта ала икән? - тине ул сираттағы аптырауы менән уртаҡлашып.

Ҡайтҡанда автобус беҙҙең туҡталышҡа яҡынлаша башлау менән Мансур беренсе булып ишеккә йүнәлде.

-Ана бит, хәҙер туҡталышты ла белә башланың, Өфөгә өйрәнәһең, - тип ҡустымды маҡтаған булдым.

-Һы, шуны ла белмәҫкә, - малай эре сирттерҙе. - Анау иҫке бәлтә кейгән хәйерсе мин Өфөгә килгәндән бирле ошо урында соҡсона бит...

### Шәп уҡытыусы

Ҡыҙҙарыбыҙ балалар баҡсаһына йөрөй башланы. Әллә икенсе, әллә өсөнсө көндө үк тәрбиәсе ҡатыныма йомошон еткергән.

-Әсә телен өйрәтеү буйынса фәлән-фәлән авторҙың бик шәп китабы бар. Шуны бер нисек тә осрата алмайбыҙ. Һеҙҙең ирегеҙ шул тирәләрәк эшләй шикелле, табып бирешһә, мең рәхмәтле булыр инек.

Шатланып риза булдым. Тәрбиәсебеҙҙең күңелен күрер өсөн дә уңайлы форсат бит был. Тәжрибәле кешеләрҙән: "Йомарт бул, бүләгеңде, күстәнәсеңде йәлләмә, ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта. Баланды өф итеп кенә йөрөтөрҙәр",- тигәндәрен ишеткән бар ине.

Был ханымды яҡшы беләм. Билдәле кеше бит ул. Йәш быуынға туған телде өйрәткән, уның нәфислеген аңлатҡан фәһемле китаптары шыплап сығып тора. Матбуғат йортона ла йыш килә ул. Уның менән хатта һөйләшеп торғаным да булды. Үәт, исмаһам, шәп кеше. Шундай һоҡланғыс шәхестәр күберәк булһа ине.

Телефонды улы алды.

-Һаумыһығыҙ!

-Здрасти!

Икенсе көндө ҡыҙына эләктем.

-Һаумыһығыҙ!

-Здрасти!

Бына ниндәй шәп уҡытыусы ул.

**Венер ИСХАҠОВ.**

### Имтихан

Медицина институтына уҡырға инергә тип, биологиянан имтиханға килдем. Билетта ике һорау, бер мәсьәлә (генетиканан). Ҡаршымда ике экзаменатор. Бергә ултыралар. Береһе йәш, сибәр генә башҡорт апайы, ә икенсеһе, унан олорағы - һары сәсле рус ҡатыны. Үҙ башҡортоң, моғайын, бер аҙ яҡлашыр, тип уйлағанмындыр инде, яуапты башҡортсалап бирергә рөхсәт һораным. Тәүге һорау - "Ылыҫлы үҫемлектәр". Башҡортсалап, рәхәтләнеп һөйләп бирҙем. Икенсе һорау - "Развитие оплодотворенного яйца". Быныһын нисегерәк башҡортсаға әйләндерергә, тип уйлайым. ("Дөйөм биология"ны мәктәптә урыҫ телендә үткәйнек). Быныһына русса яуап бирергә булдым. Шулай башҡортса, русса яуап биреп бөткәс, миңә "4"-ле ҡуймаҡ булдылар. Мин теге башҡорт апайына шым ғына башҡортсалап: "Апай, бишлегә тартып булмаҫмы?" - тигән булам. Уның янында ултырған "мәрйә": "Син, энем, беренче сорауға бигүк яхшы явап бирмәден ич", - тип ысҡындырҙы. Мин ауыҙымды асып, шаҡ ҡаттым да ҡуйҙым.

### Самолет поездан етеҙерәк

Мин беренсе курста уҡыған саҡта Сибай - Өфө поезы йөрөмәй ине әле. Сибайҙан Магнитогорскиға, унан Силәбегә, ә Силәбенән Өфөгә өс поезд менән ҡайтып етә инек. Бер мәл байрамға ике-өс көнгә ауылға ҡайтып килергә булдым. Өйҙә булғандан һуң, иртәгеһен таңғы етенсе яртыла Сибайҙан китә торған поезға, шунан Силәбегә, унан Өфөгә тиклем алдан билет алып, Сибайҙағы туғандарға төнәргә киттем. Таңғы поезыма йоҡлап ҡалғанмын... Вокзалға килдем. Ни эшләргә? Ул саҡта һирәк-һаяҡ йөрөгән такси, автобус менән поезды ҡыуып етеү - икеле, дөрөҫөрәге, мөмкин түгел. Иң тәүге автобус Ҡыҙыл тигән ауылға тиклем бара. Ҡыҙылдан Магнитҡа АН-2 самолеты оса ине ул саҡта. Аэропортҡа барһам, самолет осорға тора. Тиҙ генә билет алып ултырып киттем һәм Магнитогорск станцияһына поезымдан алда килеп еттем...

### Егете - йәмһеҙ, ҡыҙы - сибәр...

Өфө уҡыу йорттарының береһендә уҡыған һылыу ғына башҡорт ҡыҙы менән танышып алдым. Урам буйлап ҡултыҡлашып китеп барабыҙ. Тротуарҙа беҙгә текләп, бер әбей тора. Янынан үтеп барғанда ишетәм: "Бынау жигет үзе йәмсез булса да чибәр генә ҡызны эләктереп алган әле ул..."

### Мин - почти чемпион...

Икенсе курста уҡып йөрөлә. Физкультура дәресенән ҡышҡы зачетты һаман бирә алмайым, сөнки саңғы буйынса биш километрға нормам үтәлмәй ҙә ҡуя. Ул саҡта минең менән бергә Рәмил Бәҙретдинов (хәҙер Янғантау шифаханаһы директоры) уҡыны. Рәмил саңғы буйынса Башҡортостандың абсолют чемпионы ине. Мин бер көн: "Рәмил, иртәгә мин саңғы буйынса 5 километрға зачет бирәм. Минең арттан төшөп, ҡабалан-дырып ҡыу әле, юғиһә, зачетымды тағы ла бирә алмауым мөмкин", - тинем. Иртәгеһен, һөйләшелгәнсе, Рәмил минең арттан төшөп "давай, давай" тип финишҡаса ҡыуып килде. Зачетты үтәнем, рәхмәт төшкөрө! Тик эш уның менән генә бөтһә икән... Йүгереү нормаһын саманан тыш арттырып үтәгәнмен, ауыҙыңа май булғыры. Вуздар араһында беренселек өсөн буласаҡ ярышҡа яҙғандар үҙемде... Хәйләләй барып, көскә ярыштан ҡотолоп ҡалдым. Был хәлде Рәмил хәтерләй микән?..

### Хәйләһен таптым

У. исемле бер студенттың һәр саҡ минән һәм башҡаларҙан "стипендияға тиклем өс һум" бурысҡа алып та кире ҡайтарып бирмәй торған ғәҙәте бар ине. Бына бер ваҡыт ул минән аҡса һорамаһын өсөн ысулын уйлап таптым. Теге ҡаршы осрау менән унан тәүҙәрәк өндәшәм дә: "У., стипендияға тиклем өс һум биреп тор әле", - тим. Теге етди ҡиәфәт менән: "Эх, юҡ шул, үҙем һинән һорайым тигәйнем", - тип яуап бирә. Уның ҡарауы - үҙе минән һорамай. Еңел һулап ҡалдым.

### Мин - дағстанлы

БДУ-ға концерт менән Дағстандан артистар килгәйне. Тик, ни өсөндөр, сит вуздарҙың студенттарын концерт буласаҡ ергә индермәйҙәр. Үҙҙәренекен дә студент билеты буйынса ғына үткәрәләр. Ә минең концерт ҡарағым килә. Өмөтһөҙ - шайтан, тигәндәй, көтөп торам. Бер заман, күрәм: үҙҙәренсә һөйләшә-һөйләшә теге артистар инеп килә. Биш-алтылап егет. Мин, тәүәккәлләп, тегеләр араһына инеп алдым да, күптән таныш кеше һымаҡ, улар менән һөйләшә-һөйләшә, БДУ корпусына инеп киттем. Вахтала дежурҙа ултырғандар: "Пожалуйста, пожалуйста, проходите!" - тип йылмайышып тороп ҡалдылар. Әллә минең бер аҙ ҡарсыға танауымды дағстандыҡыларға оҡшаттылар инде...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*




### Һобеле, шиғәни!

Беҙҙе, Рысҡужаларҙы, "японлар" тип йөрөтәләр бит инде. Ауылыбыҙҙың Субан тигән исеме лә бар. Әмир тигән еҙнәм бик мәрәкәсел кеше булды. Хәҙер мәрхүм инде, йәне йәннәттә булһын. Бер мәл урамдан үтеп барһам, ул ҡапҡаһы төбөндә баҡсаға һөйәлеп тора.

- Һобеле, шиғәни, балдыҙ! - тине ул мине һүҙе менән ҡыуып етеп, туҡталып ҡалырға мәжбүр итеп.

- Нимә тинең, еҙнә? - тинем мин уның һүҙҙәренең айышына төшөнә алмайынса.

- Японса өндәштем даһа. Атаң өйҙәме, ыштан бауы сөйҙәме, тием бит.

- Өйҙә...

- Ә ыштан бауы?

Был еҙнәмдең үҙе уйлап сығарған һүҙе булды. "Беҙ японлар булғас, японса һөйләшергә тейешбеҙ", тип бик күп шундайын аңлайышһыҙ хәреф теҙмәләре уйлап сығарып, шуларҙы әйтеп, кешеләрҙе көлдөрөп-мәрәкәләп тик йөрөр ине ул. Уның ҡайһы бер һүҙҙәре, шул иҫәптән юғарылағы һүҙбәйләнеше, беҙҙең ауыл лөғәтенә инеп ҡалды барыбер. Ҡайҙалыр ситтә беҙҙең ауылдың ике кешеһе осрашһа, уларҙың береһе икенсеһенә: "Һобеле?" - тип өндәшһә, икенсеһе: "Шиғәни!" - тип яуаплай. Еҙнәм әйтмешләй, уларҙың был аңлашыуы: "Атаң өйҙәме, ыштан бауы сөйҙәме?" - була инде.

### Сәмиҡкүлский флот

Еҙнәмдең тағы бер мәрәкәһе. Мәктәптә уҡытыусы балаларға атайҙарынан әрмелә ҡайҙа хеҙмәт итеп ҡайтыуын һорашырға ҡушып ҡайтара. Еҙнәм балаһына:

-Мин Сәмиҡкүлский флотта хеҙмәт иттем, уҡытыусыңа шулай тип әйтерһең, - тип әйтеп ебәрә.

Балаһы уҡытыусыһына был хаҡта нисек әйткәндер, тегеһе нисек ҡабул иткәндер, әммә лаҡабы тороп ҡалды. Сәмиҡ күле беҙҙең ауылға яҡын ғына урында, Ҡыҙыл йылғаһының аръяғында. Еҙнәмдәр унда көноҙоно балыҡ һөҙөп, маз була торғайнылар.

### Дүрәкә малай

Ат тоторға рөхсәт булғас, атайым ат алып ебәрҙе. Шул атын ул йәнендәй яҡын күреп тәрбиәләй торғайны. Ә уныһы алйот булды, бесән ваҡытында алып ҡасып ыҙалатыр ине. Атайым атты екмәҫ элек үк, беҙ бар нәмәне арбаға тейәп, үҙебеҙ ҙә ултырабыҙ. Атын егеп бөткәс, атайыбыҙ иң һуңынан дилбегәне эләктерә лә, шыуышып тигәндәй арбаға менеп ултыра. Дилбегәне һелкеүе була, ат баҫҡан урынынан саптырып сығып китер ине. Был саҡта беҙҙең йәнебеҙ, билдәле, ус эсендә инде ул.

Бер мәл шулай бесәндән ҡайтырға тип, беҙ арбала атайыбыҙҙың атты еккәнен көтөп ултырабыҙ. Ул дилбегәне эләктерҙе-эләктереүгә, әммә үҙе ултырып өлгөрмәне. Етмәһә, арбаға ҡутара бесән тейәлгән. Атыбыҙ һаҙға сабып инеп китте. Иң алда арбанан мин ырғыным, минән күреп һеңлем дә һикерҙе. Арба алдында ултырған ҡустыбыҙ ҙа оҙаҡ уйлап торманы, ул да ырғып төшөп ҡалды.

Ҡустыбыҙ иң алда ултырғас, дилбегәне ҡулына алһа ла була инде. Бына нисек була ҡыҙҙар араһында үҫкән малай. Ә атайыбыҙ был хәлгә шаҡ ҡатҡан да, тик тора. Уйлаһаң, хәҙер генә көлкө тойола был ваҡиға. Атыбыҙ ҡайынға барып һуғылды ла, йығылып китте. Арбабыҙ түңкәрелде. Атайыбыҙ бер ни өндәшмәй атыбыҙҙы аяғына баҫтырҙы ла: "Вәт, дүрәкә малай!" - тип атты кире екте. Һаман да уйлайым ошо хаҡта: атайыбыҙ "дүрәкә малай!" тип кемде әрләне икән? Атынмы, әллә ҡустыбыҙҙымы?

**Зөһрә МӘҺӘҘИЕВА.**
**Әбйәлил районы Рысҡужа ауылы.**

**✓ Аҙнаһына 4 тапҡыр йоҡоһоҙлоҡ менән йонсоған ҡатындар күкрәк биҙе яман шеше менән 2 тапҡыр йышыраҡ ауырырға мөмкин. Матурлыҡ өсөн 6 сәғәттән дә кәм һәм 9 сәғәттән артыҡ йоҡламаҫҡа кәрәк.**



ӨЙРӘТӘЙЕМ ӘЛЕ...

# ДАРЫУ БИРЕР АЛДЫНАН...

## үлән биреп ҡара

**Ауырыу-һыҙланыу, хәлһеҙләнеп түшәктә ятыу... Ошонан ғазаплырағы бармы икән донъяла? Әгәр инде күҙ нурың-бәләкәсең ауырыһа, тормош бөтөнләй туҡтап ҡалғандай була. Шунда уҡ баланды ҡосаҡлап, дауаханаға ашығаһың йәки йортоңа табип саҡыртаһың. Әммә педиатрҙар, ниңәлер, һәр мөрәжәғәт иткән һайын береһенән-береһе көслөрәк антибиотиктар тәғәйенләй. Әлбиттә, беҙ медицина хеҙмәткәре түгел, шулай ҙа көслө дарыу баланың бауырына һ.б. зыян килтерә, тип шикләнеүебеҙ урынлы бит. Шуға күрә кескәйҙәрҙә һалҡын тейеүҙең беренсе билдәләре беленеү менән ҡул аҫтындағы сараларҙы ҡулланырға кәрәктер ул. Һеҙҙең иғтибарығыҙға һынап ҡаралған, яҡшы ярҙам иткән дауалау ысулдарын тәҡдим итәм.**

■ Тәү сиратта, бала булған йорттан һуған, һарымһаҡ, бал, горчичник, киптерелгән дарыу үләндәре өҙөлмәҫкә тейеш икәнлеген онотмағыҙ.

■ Бала тымаулай башлау менән, уның бүлмәһенә төнгөлөккә һуған, һарымһаҡты ҡырҡҡыслап һалып сығырға кәрәк. Шулай уҡ кескәйҙең бүлмәһен был көндәрҙә ғәҙәттәге температуранан нығыраҡ йылытығыҙ (юрған ябынмай ятһаң да, өшөмәҫкә тейешһең). Ауырыу үткән һайын температураны әкренләп ғәҙәттәге режимға күсерәһең.

■ Кескәйҙең тыштан өшөп инеүен күргәс тә, уға ҡурай еләге ботаҡтарынан төнәтмәһен эсерегеҙ. Уларҙы ҡышҡыһын урмандан йәки баҡсағыҙҙан йыйып алһағыҙ, бигерәк яҡшы буласаҡ. Бының өсөн ҡурай еләге ботаҡтарын термоска һалып, төнәтмә эшләгеҙ. Һалҡын тейеүҙән, грипп, ОРЗ, ОРВИ ауырыуҙарынан алһыу төҫтәге, тәмле дауа килеп сығасаҡ. Иммунитетты нығытыу өсөн ҡурай еләге ботаҡтарын сәй эскән һайын сәйнүгегеҙгә өҫтәһәгеҙ, тағы ла яҡшыраҡ буласаҡ. Шулай уҡ баланың тән температураһы күтәрелгән саҡта бындай сәйҙе йыш бирергә кәрәк. Шулай уҡ ҡарағат япрағы, гөлйемеш һалынған сәй ҙә һалҡын тейгәндә, температура күтәрелгәндә һәйбәт ярҙам итә.

■ Ауырый башлаған баланы төнгөлөккә мотлаҡ ниндәйҙер май менән ыуып һалырға кәрәк. Яңы тымаулап, йүткерә башлаған кескәйҙең арҡаһын, аяҡтарын бурһыҡ (уны һунарсыларҙан һатып алып була) йәки ҡаҙ майы менән ыуығыҙ. Шулай уҡ "Доктор Мом", "Барсучок" һ.б. тәнде йылытҡан кремдарҙы ҡулланырға була. Тик улар менән бик һаҡ эш итергә кәрәк. Кескәйҙәрҙең тиреһе йоҡа, нескә булыуын оноторға ярамай. Шулай уҡ төнгөлөккә ыуып һалынған баланың арҡаһы көндөҙ йылы һәм ҡоро йөрөргә тейеш икәнлеген онотмағыҙ.

■ Йүткергән баланың ойоҡбаштары эсенә горчица порошогы һалып ебәреү файҙалы икәнлеген онотмағыҙ.

■ Йүткерә башлаған балаға һуғандың һутын әҙерләгеҙ. Бының өсөн бер баш һуғанды тураҡлап, уға бер балғалаҡ шәкәр һалып, болғатып, бер-ике сәғәткә өҫтөн ябып ултыртығыҙ. Унан бүленеп сыҡҡан һуғандың һутын берәр балғалаҡ итеп ике сәғәт һайын эсерегеҙ.

■ Эремсек менән балды бутап, йылытып, сепрәккә төрөп, йүткергән баланың арҡаһына ҡуйып, тышынан целлофан ҡапсыҡ менән ябып, урап ҡуйырға кәрәк. Ғәҙәттә, көслө йүткерек тә, өс көн рәттән буҫтаманы япҡандан һуң, йомшара, үтә. Әлбиттә, бала шулай ураулы ятһын өсөн әсәнән ныҡышмалылыҡ талап ителәсәк, әммә ынғай һөҙөмтә өсөн тырышырға була. Буҫтама өсөн етен сепрәк алып, бер стакан эремсеккә бер ҡалаҡ бал һалып әҙерләйбеҙ.

■ Йүткереү һәм ҡурылдай биҙгәгенән ҡотолоу өсөн тағы бер сара. Термосҡа бер ус ҡабыҡлы һоло һалып, өҫтөнә бер стакан ҡайнаған һөт ҡойоғоҙ. Биш-алты сәғәттән һуң һөттө һөҙөп, балаға эсерергә.

**Бала ауырымаһын өсөн уны саф һауаға алып сығырға, педиатр тәғәйенләгән витаминдарҙы йәки балыҡ майы эсерергә онотмағыҙ. Балыҡ майын "р" хәрефе булған айҙарҙа ғына бирергә! (сентябрь, октябрь...) Кескәйҙәрегеҙ сәләмәт һәм көләс булып үҫһен!**

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҠАРТЛЫҠТЫ ТУҠТАТЫП...

## ғүмерҙе оҙайтырға мөмкин

**Һәр осорҙа ла кешенең иң ҙур теләге ниндәй булған тип уйлайһығыҙ? Һәр ваҡыт йәш һәм сәләмәт булып ҡалыу. Ә был ысынында мөмкинме һуң? Баҡтиһәң, мөмкин икән. Был хаҡта Рәсәй Фәндәр академияһы Геронтология йәмғиәтенең президенты, профессор Владимир Анисимов һөйләй.**

### Аҡыллылар уңа

Әлбиттә, ҡартлыҡты туҡтатып булмай, шулай ҙа уны аҡрынайтырға һәм шулай итеп ғүмерҙе 120 йылға тиклем оҙайтырға мөмкин. Был йәш кешелектең генына һалынған, был рекорд туҡтап ҡалмаған һәм әлеге ваҡытта ла был йәшкә етеүселәр һирәк булһа ла осрай (бөтәһенән дә оҙаҡ француз ҡатыны Жаннет Кальман йәшәгән - 122 йәш һәм 164 көн).

Ғәжәп тойолор, әммә Европала һәм АҠШ-та 10 йыл һайын 100 йәшкә етеүселәрҙең һаны артҡандан-арта бара. Һуңғы 160 йылда кешелек ғүмеренең уртаса оҙайлығы 3 айға артҡан.

Ғүмер оҙайлығы алдағы йылда теркәлгән үлем осраҡтарына ҡарап иҫәпләнгәнгә күрә, Рәсәйҙә ғүмер оҙайлығы кәм кеүек күренә. Беҙҙә йыл һайын меңәрләгән бала юл фажиғәләрендә үлеп ҡала, енәйәтселек менән эскелек көслө. Быға билдәле һәм билдәһеҙ һуғыштарҙы өҫтәгеҙ. Бөтә осраҡтарҙа ла тиерлек йәштәр үлә. Шуға күрә лә үлем ныҡ күп. Беҙҙә ололар əҙ йәшәмәй, ә йәштәр иртә үлә. Германия үткәргән тәжрибә бик ҡыҙыҡлы. Илде көнбайышҡа һәм көнсығышҡа бүлгәс, көнсығышта үлем күҙгә күренеп арта: социализм кешеләрҙе һаҡламаны. Ә 1990 йылда Германия берләшкәс, артабанғы 10 йыл арауығында ике яҡта ла үлем осрағы тигеҙләнә, ә элекке Көнсығышта оҙаҡ йәшәүселәр һаны кинәт арта.

Белем дә мөһим. Профессорҙар оҙағыраҡ йәшәй. АҠШ-та шуны билдәләнеләр: колледж тамамлауҙы ир-егеттәр белем алмаған тиңдәштәренә ҡарағанда 6 йылға оҙағыраҡ йәшәй икән. Ә бына юғары интеллектлы ирҙәрҙең ғүмере оҙайлыраҡ булһа, ҡатындарҙыҡы - киреһенсә!

### Яман шеш һәм үлемһеҙлек

Ғүмерҙе оҙайтырға мөмкин, ләкин ниндәй хаҡҡа? Әгәр кешенең гендарына ҡыҫылып, уның ғүмерен оҙайтһаҡ, беҙ яман шеш ауырыуҙары барлыҡҡа килеүен көрәбеҙ. Ни өсөн? Ҡартайыу процесында ҡатнашҡан гендар шулай уҡ яман шеш ауырыуҙарын барлыҡҡа килтереүҙә лә ҡатнаша. Был процестар бер-береһенә айырылмаҫлыҡ булып бәйләнгән. Организмдың бөтә ағзалары һәм туҡымалары төҙөлгән көпшә күҙәнәгендә ни бары ике үсеш юлы бар. Ул барлыҡҡа килергә, үҫергә, һуңынан ҡорорға мөмкин - бына был ҡартайыу була ла инде. Йәки үлемһеҙ яман шеш күҙәнәгенә әйләнеүе мөмкин. Яман шеш ысынында үлемһеҙ. Әгәр шеш күҙәнәген алып, уны башҡа йән эйәһенә ҡушһаң, ул ят организмда үсеүен дауам итә. Улар организмда яман шеш үсеүен ҡуҙғыта. Көпшә күҙәнәктәрендә ағзаларҙы регенерациялаған гендар бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә генә эшләй. Һуңынан уларҙың яман шеш күҙәнәктәренә әйләнеү механизмы эшләй башлай. Шуға күрә лә улар менән манипуляция ысынлап та хәүефле.

### Дөрөҫ туҡлан

Ғүмерҙе оҙайтыу өсөн иң еңел ысул күптән иҫбатланған - туҡланған аҙыҡтарҙың калориялылыҡ күләме. Кешеләр үҙҙәре был йәһәттән эксперимент үткәргән дә инде: тәүлегенә 1500-1800 ккал ҡулланған Япония оҙаҡ йәшәүселәр һаны буйынса иң алда бара. Ябай кеше ундай диетала йәшәй алмаясаҡ. Уға күберәк ашарға кәрәк. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, нисек əҙ калория алырға? Хәҙер фән миметиктар - туҡланыу калорияһын сикләү арҡаһында барлыҡҡа килгән торошто имитациялаусы препараттарҙы эшләү менән мәшғүл. Йәғни улар гендарға тәьҫир итә һәм сикләүһеҙ ашарға мөмкинлек бирә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, был осраҡта ауырлыҡ өҫтәлмәйәсәк. Бындай препараттар бар. 1971 йылда уҡ Ленинград ғалимы Владимир Дильман бының өсөн диабетҡа ҡаршы бигуанидтар - диабет менән ауырыусылар глюкозаны һеңдереү өсөн ҡабул иткән матдәләрҙе ҡулланырға тәҡдим иткән. Тикшеренеүҙәр шуны раҫлаған: бигуанидтар миметиктарҙың үҙенсәлектәренә эйә, шуға өҫтәп ғүмерҙе оҙайта һәм яман шеш барлыҡҡа килеү хәүефен кәметә. Швейцария ғалимдары үткән йыл былай тип хәбәр итте: уларҙы ваҡытһыҙ ҡартайыуҙан һаҡланыу өсөн дә ҡулланырға мөмкин.

### Мелатонин да мөһим

Яҡтылыҡ режимы бик мөһим. Себерҙә йәшәүселәр иртәрәк ҡартая. Климаттың ҡатылығы ла мөһим түгел. Себер яҡтарында төндәр аҡ була. Ә төн ваҡытында яҡтылыҡ организмда мелатонинды баҫа - был ғүмер өсөн кәрәкле организм тик төндә генә эшкәртелә. 15 секундҡа ғына сағыу яҡтылыҡ яндырыуың була - мелатонин юғала. Шуға күрә йоҡлаған ваҡытта ут, компьютер, телевизор яндырырға ярамай. Тәҙрә ҡорғандарын да ныҡлап ябығыҙ. Төндә эшләүселәргә мелатонин ҡабул итергә кәрәк. Уның əҙ булыуы ҡан анализы менән билдәләнә. Әгәр ҙә мелатонин етмәүе билдәле булһа, уны аптекала һатып алырға һәм яҡтылыҡ режимы үҙгәргән ваҡытта, көҙгөһөн һәм яҙғыһын ҡабул итергә кәрәк. Ғөмүмән, йоҡо һаулыҡ өсөн бик мөһим. Тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: аҙнаһына 4 тапҡыр йоҡоһоҙлоҡ менән йонсоған ҡатындар күкрәк биҙе яман шеше менән 2 тапҡыр йышыраҡ ауырырға мөмкин. Матурлыҡ өсөн 6 сәғәттән дә кәм һәм 9 сәғәттән артыҡ йоҡламаҫҡа кәрәк.

Ә яһалма юл менән йәшлекте оҙайтыуға килгәндә, былай тип уйлайым. Бинаны күпме генә штукатурлап та, уның сереп бөткән нигеҙен ҡалдырһаң, ул ҡасан да булһа барыбер емерелеп төшәсәк. Тәбиғәтте алдарға ярамай. Быға өҫтәп, беҙ бит тигеҙ ҡартаймайбыҙ һәм тышҡы йөҙ генә быны асып һалмай. Кемдәрҙер тиреһе тиҙ ҡартайһа, икенселәрҙең эске ағзалары иртә ҡартая. Әйткәндәй, ҡартлыҡтың генетик тигеҙлеге 35 процент билдәләнә. Башҡаһы - беҙҙең ҡулыбыҙҙа.

ҺҮҘ АРАҺЫНДА

# КЕШЕ ЯРТЫ ҒҮМЕРЕН...

## компьютер һәм телевизор алдында үткәрә

**Белгестәр иҫәпләүенсә, бөгөн һәр ҡайһыбыҙ техника менән аралашыуға 8 сәғәт ваҡытын сарыф итә.**

Хәҙерге ер кешеһе телевизор ҡарауға, телефондан аралашыуға, компьютер артында эшләүгә ваҡытының яртыһын әрәм итә. Британияның телекоммуникация баҙарының аналитиктары шундай төшөнкө һығымтаға килгән.

Һөҙөмтәлә күптәр бер юлы бер нисә эште башҡарырға өйрәнә.

Бигерәк тә был 16 йәштән 24 йәшкәсә йәштәргә хас. Әммә өлкәндәр ҙә уларҙан ҡалышмай. 55 йәшлектәр ҙә компьютерҙы әүҙем үҙләштерә башланы. Пенсионерҙар ҙа хәҙер социаль селтәргә инә. Оло йәштәге виртуаль аралашыусылар 12 процент тәшкил итә.

Шулай итеп, әгәр барыһын бергә ҡушһаҡ, һәр ҡайһыбыҙ тәүлегенә:

212 минут, телевизорҙы, Интернет-роликтарҙы, DVD-ны ла индереп, видео ҡарай;

91 минут радио тыңлай;

80 минут төрлө социаль селтәрҙәрҙә электрон почта аша аралаша. Мәҫәлән, британдар, 2004 йылда 27 миллиард хат-хәбәр ебәрһә, былтыр был һан 104 миллиард самаһы булған.

70 процент тирәһе ҡулланыусының өйөндә компьютеры бар, өҫтән бер өлөштән күберәгенең - эшендә. Ә ҡунаҡҡа йөрөү һәм демографияны арттырыуға ваҡыт əҙ ҡала...

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК



# МӨЖӘҮИР ХӘҘРӘТ -

## башҡорттоң бөйөк әүлиәһе

### Ул атайымдың дуҫы ине

**Мин Баймаҡ районы Ярат ауылынанмын. Хәҙерге көндә Сибайҙа йәшәйем. Педагогик хеҙмәт ветеранымын. Мин Мөжәүир хәҙрәт олатайҙы 11-12 йәштән беләм, ул атайым менән бик һәйбәт мөнәсәбәттә булды. Лира Яҡшыбаеваның хәҙрәт тураһындағы яҙмаларын дауам итеп, мин дә һеҙгә үҙемдең хәтирәләремде яҙып ебәрергә булдым.**

Атайымдың йыш ҡына башы ауырта торғайны. Хәтеремдә, бер нығ ҡына яфаланған сағында әсәйем уны арбаға һалып, Ғәбсәләм ауылына алып барғайны. Улар менән мин дә барҙым. Хәҙрәт өсөбөҙҙө лә өшкөрҙө. Шуныһы иҫ китмәле: тейәп алып барған атайым һин дә мин шәбәйеп, ҡайтканда дилбегәне үҙе тотоп ҡайтты. Мөжәүир хәҙрәт беҙгә йыш килә торғайны. Урындыҡ түрендә аяҡтарын бөкләп ултырып сәй эскәне әле лә күҙ алдымда.

Әсәйем ауылыбыҙҙағы Ғәйшә инәй менән тәү тапҡыр хәҙрәт олатайға барғанын гел иҫкә ала торғайны. Тәүҙә хәҙрәт олатай Ғәйшә инәйҙе өшкөргән. "Үҙең бик матур ғынаһың, нишләп ауырыйһың?" тип әйткән. Бетеүенә, нишләптер, мисәт ҡуймаған (уның мисәте лә булған). Әсәйем быларҙың барыһын да ҡарап ултырған. "Минә мисәтен ҡуйһа ғына ярай ине", тип уйлаған үҙе эстән генә. Хәҙрәт олатайҙың алдына барып ултырғас: "Курҡып ҡына ултырған ҡыҙыма мисәтемде лә ҡуяйым әле", - тип, бетеү-үткәрмә яҙып биреп, әсәйемде шатландырыған. Ҡайтырға сыҡҡас, Ғәйшә инәй: "Уй, Мәрхәбә килен, ояткә ҡалдым бит, үҙе хәҙрәт булһа ла, ҡайһылай ямаҡ ҡына әле, тип уйлап ултырғайным, уйымды белеп тә минә, матурһың, тигәндер инде..." тип көйөнгән.

Хәҙрәт олатай биргән бетеү-үткәрмәне әсәйем ғүмере буйы һаҡланы һәм файҙаланды. Ул беҙҙе лә, ейәндәрен дә, ауырып китһәк, шул бетеү-үткәрмәнән үткәрер ине лә, ауырыуыбыҙ еңеләйер ине. Әсәйем хәҙрәт өшкөрөп биргән тоҙҙо ла оҙаҡ йылдар аҙләп кенә файҙаланды.

Ике туған Миңнегәле ағайым бер хәтирәһен йыш ҡына иҫкә алып һөйләй торғайны. 1938 йылдарҙа, ағайға 14 йәш булғанда, атайым нығ ауырып китә, башынан тыҙә алмай, түшәккә йығыла. Миңнегәле ағайҙы Манһыр ауылына Мөжәүир хәҙрәтте алып килергә ебәрәләр. Хәҙрәт олатай атайымды оҙаҡ итеп өшкөрә, атайым йүнәлә. Иртәгеһенә ағайым хәҙрәт олатайҙы ауылына ат менән алып китә. Әпкәләй тигән тауҙан төшөп барғанда арбаһының алғы тәгәрмәсе күсәренән ысҡынып, алға тәгәрәй ҙә китә. Арбанан төшөп, тәгәрмәсте урынына ҡуяйым тиһә, тәгәрмәс үҙ урынында булып сыға. Бер аҙ барғас, тәгәрмәс тағы тәгәрәп китә, ә хәҙрәт олатай ағайымдың ҡылыҡтарына тамаша ҡылып, кеткелдәп көлөп тик ултыра, ти. Хәҙрәт: "Улым, кире боролмаһаң, булмаҫ", - тигәс, кире ауылға китәләр. Атайым аңлаған инде: һауыҡҡас, хәҙрәт олатайҙы ауылына үҙе алып барырға тейеш булған, шуға атты кире борҙорған Мөжәүир хәҙрәт. Атайыма был ҙур фәһем була.

Мөжәүир хәҙрәттең йоғонтоһо көслө булғандыр. Атайым әхирәткә күскәнсе дин юлында булды. Оҙаҡ йылдар ауылыбыҙ мәсетенең имамы булып торҙо. Совет заманында коммунист булһа ла йәшереп кенә намаҙ уҡый ине. Партком секретары саҡырып алып: "Йә - дин, йә - партбилетың", - тигәс, атайым партбилетын һалып, дин юлынан китә. Ул йыш ҡына хәҙрәт олатайҙы иҫләп, рәхмәтләрен уҡый ине. Сөнки ул бары тик Мөжәүир хәҙрәттең өшкөрөүҙәренән һуң баш өйәнәгенән ҡотолғайны бит.

**Ғәлимә ӘХМӘТОВА,**
**педагогик хеҙмәт ветераны.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҒӘЙБӘТ ҺӨЙЛӘМӘ...

## гонаһынан ҡурҡ

**Бер көндө Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең сәхәбәләренән: "Ғәйбәттең нимә икәнен беләһегеҙме?" - тип һорай. Улар: "Аллаһ һәм Уның рәсүле беләләр", - ти. "Үҙенең мосолман ҡәрҙәшенең мәкруһ йәки яратмаған ягын үҙе булмағанда иҫкә төшөрөү", - ти Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм). "Әгәр ҙә мин мосолман ҡәрҙәшемдең булған сифаттарын һөйләһәм?" - тип һорай сәхәбәләр. Бәйғәмбәребеҙ яуап йөҙөнән әйтә: "Әгәр ҙә һинең мосолман ҡәрҙәшеңдең боҙоҡ бер ғәмәле бар икән һәм үҙе булмағанда уның хаҡында хәкиҡәттә булғанын һөйләйһең икән, был ғәйбәт булыр; әгәр булмағанды "булды" тип һөйләһәң, был хәкиҡәттә яға ягыу тип аталыр. Икеһе лә - ғәйбәт тә, яла яғыу ҙа - бер үк хөкөмдә булыр".**

"Әл-Хужурат" сүрәһенең 12-се аятында ғәйбәт былай һүрәтләнә: "...Әлләһеҙҙең берәрегеҙ үлгән ҡәрҙәшенең итен ашауҙы һөйөрмө? Һеҙ, әлбиттә, уны мәкрух күрҙегеҙ, ғәйбәт һөйләүҙе лә шулай мәкрух күрегеҙ!.."

Аллаһы Тәғәлә ни өсөн ғәйбәтте мәйет ите ашауға тиңләне икән? Бының хикмәте шундалыр. Йәне тәненән айырылыу сәбәпле, мәйет итенең ашалғанын һиҙмәгән кеүек, үҙе хаҡында һөйләнгән һүҙҙе лә кеше ишетмәй. Шуға күрә уның быға күңеле лә әрнемәй, йөрәге лә ауыртмай. Әммә һүҙ кешеһенә килеп ишетелмәһә лә, мәйеттең итен ашау харам булған кеүек, ғәйбәт һөйләү ҙә гонаһлы ғәмәлдәрҙән һанала. Шуға күрә ул Ислам динендә Ҡөрьән-Кәрим, Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәҙис-шәрифтәре менән харам ҡылына.

Ни өсөн Әҙәм балаһына был гонаһ хас һуң? Хикмәт бына шунда: һәр бер әҙәм балаһы үҙен кешенән яҡшыраҡ итеп күргеһе килә. Әлеге хис уның йөрәгендә йәшәй. Әҙәм балаһы икенсе бер кешенең боҙоҡ, хәйерһеҙ яғын ишеткәндә, күңелендә ошо ләззәтле хис уяныр, ғәйбәтен һатҡан кешенән ул үҙен хәйерлерәк, яҡшыраҡ, байыраҡ, аҡыллыраҡ күрә башлай.

Ниндәй төр һүҙ һөйләүҙе беҙ "был ғәйбәт" тип әйтә алабыҙ?

Беренсеһе - кешенең тән торошон һөйләү (Аллаһ тарафынан әҙәм балаһына бирелгән һыналмыш йөҙ-киәфәтенән аҡһаҡ, ҡылый күҙле, тип мәсхәрәләп һөйләйбеҙ...)

Икенсеһе - нәҫелен һөйләү (Нәҫелдә әҙәм балаһы үҙе һайламай. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе был донъяға ҡәүем-ҡәүем, ҡәбилә-ҡәбилә итеп яралтты. Һәм Уның тәҡдире менән беҙ теге йәки был нәҫелдә тыуҙыҡ...).

Өсөнсөһө - әхлағын һөйләү (Әҙәм балаһының тәкәббер, һаран, зәғиф йөрәкле һәм башҡа ошондай сифаттарын әйтеү).

Дүртенсеһе - дини ғәмәлдәрен телгә алыу ("Был кеше мәсеткә бәлеш ашар өсөн генә йөрөй", тип ғәйеп итеү, мәҫәлән).

Бишенсеһе - донъя ғәмәлдәрен һөйләү ("Әҙәпһеҙ, күп йоҡлай" тип әйтеү).

Алтынсыһы - тышҡы кейемен тикшереү.

Ғәйбәт тел менән түгел, ишара менән дә ғәмәлгә ашырылыуы мөмкин. Хатта кеше кеүек йөрөп, һөйләп күрһәтеп, исемен атамаһаҡ та кем хаҡында һүҙ барғаны аңлашылһа, был да ғәйбәт була.

Ғәйбәт һөйләү -харам, гонаһ, тинек. Уны тыңлауы ла һөйләгән кеүек үк бер дәрәжәлә булыр. Әгәр ҙә һеҙ берәй мәжлестә, ултырышта ғәйбәткә юлыҡһағыҙ, Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәҙисенә таянып, иң әүүәл ғәйбәтте туҡтатырға тейешһегеҙ. Ғәйбәтте туктатыу - имандың иң ҡеүәтлеһелер. Туктата алмаһағыҙ, йөрәгегеҙ менән риза булмайынса, икенсе нәмә хаҡында уйлап, йәйһә күңелегеҙҙән зиҡр йә тәсбих әйтеп ултырырға тырышығыҙ. Әгәр быға ла көсөгөҙ етмәһә, бындай мәжлестән сығып китеүегеҙ хәйерлерәк булыр. "Әнғәм" сүрәһенең 68-се аятында: "Әгәр аяттарыбыҙҙы яманлап һөйләүселәрҙе күрһәң, хатта башҡа һүҙгә күскәнселәренә хәтлем улар янында торма, кит!.." Ә "Ҡасас" сүрәһенең 55-се аятында, "Әгәр мөьминдәр ...яман һүҙ ишетһәләр, был һүҙҙән боролорҙар һәм әйтерҙәр: "Беҙҙең үҙ ғәмәлебеҙ, һеҙҙең үҙ ғәмәлегеҙ, беҙҙең тарафтан һеҙгә тынысльҡ булһын", - тип әйтелә.

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ дәүерендә дошманды ла, монафиҡты ла, тирә-йүнендә яуызлыҡ менән үҙен үлтерергә йөрөгән мөшриктәрҙе лә күп күргән. Әммә береһенә лә ләғнәт уҡымаған, Аллаһтан ғазап килеүен һорамаған...

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Эске донъянан объектив һәм субъектив файҙа

Кешеләрҙең яртыһы тиерлек көн һайын үҙенең эске донъяһына сәйәхәт ҡыла. Улар дини тәжрибәләре медитация талап иткән кешеләр: буддистар, даостар, христиандар. Был диндәрҙе тотоусылар барыһы ла медитацияға инмәй, әгәр һеҙ улар иҫәбенән түгел икән, ваҡыты ваҡыты менән үҙегеҙҙең эске донъяғыҙға инһәгеҙ, күп нәмә алырһығыҙ. Тормошоғоҙ яҡшырыр. Бының өсөн ике юл бар - субъектив һәм объектив. Ике осраҡта ла отолмаҫһығыҙ.

Был ике ҡарашты ҡарайыҡ. Беренсе, субъектив ҡараш - һеҙ үҙегеҙҙең эске донъяғыҙға унда булыр өсөн генә сәйәхәт ҡылаһығыҙ. Был медитацияның традицион ысулы.

Бер нисә минут рухи донъяғыҙҙа булыу тонусығыҙҙы күтәрә. Әйтерһең дә һеҙ ниндәйҙер энергия банкының бараһығыҙ ҙа, иҫәбегеҙҙән ниндәйҙер сумманы алаһығыҙ. Медитацияғыҙҙы тамамлағас, үҙегеҙҙе бик күп яктан байыған итеп тойорһоғоҙ.

Эске донъяғыҙға сәйәхәттең объектив ысулында һеҙ эске минегеҙ өсөн нимәлер эшләү өсөн инәһегеҙ: доға уҡырға йәки ниндәйҙер проблеманы хәл итеү өсөн үҙ хыялығыҙҙы эшкә егергә. Был динамик медитация тип атала.

Мине динамик медитация тураһында һөйләргә Һиндостандың Адьяре ҡалаһында Теософск йәмғиәтенең штаб-фатирына саҡырҙылар. Мин лекциялар уҡыным, практик дәрестәр үткәрҙем, унда тыңлаусылар үҙҙәренең тормоштарын нисек теләйҙәр, шулай күреү өсөн медитатив хәлгә инделәр. Бер ваҡыт минән:

-Сэр, беҙ ожмах ишектәрен баҫып алырға теләйбеҙме ни? -тип һоранылар.

-Эйе, - тип яуапланым мин. - Ә һеҙ әлегә ваҡыт килеп етмәгән, тип уйлайһығыҙмы?

Динамикалы медитацияға ярайым тип, пассив медитацияны ҡорбан итергә ярамай. Иң яҡшыһы - икеһен дә ҡулланыу. Бына динамикалы медитацияның ижади һәләткә йоғонтоһо миҫалы.

Официант, һәр көн ресторанға эшкә барғанда баҡса менән уратып алынған матур йорт эргәһенән үткәндә туктапып, күҙҙәрен йомоп, үҙен ошо йорт эсендә йөрөйөм тип хис иткән.

Кистәрҙең береһендә ресторанда өлкән йәштәге бер ханымды хеҙмәтләндереп йөрөгәндә ул:

- Мин көн һайын һеҙҙең минең өйөм эргәһендә туктап, һоҡланғанығыҙҙы күрәм. Үҙегеҙ унда йәшәргә теләмәйһегеҙме? - тип һораған.

Ҡулынан саҡ батмусын төшөрөп ебәрмәгән официант, тотлоға-тотлоға:

- Һеҙ нимәне күҙаллайһығыҙ? - тигән.

- Ул өйҙө ҡарарға мин бик ҡартмын инде, шуға Флоридаға китәм, - тигән ханым. - Мин өйөмдөң уны тейешенсә баһалаған кешегә әләгеүен теләйем. Минеңсә, һеҙ тап шундай кеше.

Тиҙҙән официант өндәге төшөндә - динамикалы медитация процесында күргән йорттоң хужаһы булып китә.

**Роберт СТОУН.**



## 29 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
11.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Побег". Остросюжетный сериал
22.30 "Спецрасследование"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Подпольная империя", 4-я серия. Криминальная драма
00.50 "Пережить рождество"
02.30, 03.05 "Первый выстрел"
03.00 Новости
04.25 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Безответная любовь. Римма Казакова"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 200-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 40-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Сваты-4", 19-я и 10-я серии
23.10 "Тайны следствия". "Семейное дело". Детективный сериал
23.50 "Вести+"
00.25 "Тайны следствия". Сериал
01.30 "Его батальон". Военная драма
04.15 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Кодекс чести"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". "Под прикрытием". "За секунду до взрыва"
21.30 "Псевдоним "Албанец"-3". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Футбольная ночь"
01.45 "Большая семья"
03.55 "Очная ставка"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Ватан. События недели"**
**10.00 "Детский час с "Тамыром"**
**11.05 "Дочь Луны-2"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Автограф". И. Киньябулатов**
**13.10 "Хрустальный соловей-2010"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Наруто"**
**16.10 "Сломанные цветы"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.20 "Спецрепортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Доброе сердце"**
**19.20 "Спортивный интерес"**
**19.45 "Деловой форум"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Мой папа - герой"**
**00.55 Прогноз погоды**

## 30 НОЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Гаражи", 12-я серия
22.30 "Геннадий Хазанов. Мистический автопортрет"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Врата", 7-я серия
00.40 "Темная вода"
02.40, 03.05 "Семейные грехи"
03.00 Новости
04.25 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 201-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 41-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Сваты-4", 11-я и 12-я серии
23.10 "Тайны следствия". Сериал
00.05 "Вести+"
00.25 "Тайны следствия". Сериал
01.20 "Убрать картера"
03.25 "Квартет Гварнери"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Псевдоним "Албанец"-3", 10-я и 11-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Капитал.ru"
00.30 "Главная дорога"
01.05 "Леший". Фильм ужасов
03.00 "Винтовая лестница". Сериал
03.55 "Очная ставка"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00, 15.00 "Гора новостей"**
**10.15 "Царь горы"**
**10.30 "Бинди - девочка из джунглей"**
**11.00 "Дочь Луны-2"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Бабушкин сундучок"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Судьбы радужные нити". Н. Ахметвалиева"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Книга сказок"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Наруто"**
**16.10 "Мой папа - герой"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.35 Новости (на русск. яз.)**
**18.45 "Урал Лото ньюс"**
**18.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Трактор" (Челябинск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.20 "Ангел А"**
**01.00 Прогноз погоды**

## 1 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Голоса"
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Тур де Франс"
01.40, 03.05 "Дорожные приключения"
03.00 Новости
03.30 "Тайны Тихого океана". "Океан вулканов"
04.25 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Диабет. Приговор отменяется"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 202-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 42-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Сваты-4", 13-я и 14-я серии
23.10 "Тайны следствия". Сериал
00.05 "Вести+"
00.25 "Тайны следствия". Сериал
01.20 "Беги, Ронни, беги!"
03.05 "Квартет Гварнери"
04.30 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.40 "Литейный". Сериал
22.45 Футбол. Лига Европы УЕФА. "Зенит" (Россия) - "Андерлехт" (Бельгия). Прямая трансляция
01.00 "Сегодня"
01.20 "Заплати вперед". Драма
03.55 "Винтовая лестница"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Гора новостей" (на башк. яз.)**
**10.15 "Книга сказок"**
**10.30 "Бинди - девочка из джунглей"**
**11.00 "Эдера"**
**11.50 "Город мастеров"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Лестница в небо". М. Чванов**
**13.10 "Байык" (на башк. яз.)**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Наруто". Мультсериал**
**16.10 "Мачеха"**
**17.35 "Автограф". Л. Прокофьева**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.20 "Спецрепортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Действующие лица"**
**19.30 "Малый бизнес сегодня"**
**19.45 "Деловой форум"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Поцелуй дракона"**
**00.55 Прогноз погоды**

## 2 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Банды", 12-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами"
00.50 "Забытое". Триллер
02.30, 03.05 "Операция "Медуза"
03.00 Новости
04.20 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 203-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 43-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Сваты-4", 15-я и 16-я, закл. серии
23.05 "Поединок"
00.05 "Вести+"
00.25 "Сигнал"
02.35 "Честный детектив"
03.05 "Горячая десятка"
04.10 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Особо опасен!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.40 "Литейный". Сериал
22.45 Футбол. Лига Европы УЕФА. ЦСКА (Россия) - "Лозанна-Спорт" (Швейцария). Прямая трансляция
01.00 "Сегодня"
01.20 "Абсолютная власть". Триллер
03.30 Лига Европы УЕФА. Обзор
04.00 "Винтовая лестница", 8-я серия

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 18.30 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Гора новостей" (на русск. яз.)**
**10.15 "Цирк в 13 метров"**
**10.30 "Бинди-девочка из джунглей"**
**11.00 "Эдера"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Историческая среда"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Муз-базар"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей" (на русск. яз.)**
**15.15 "Сулпылар"**
**15.35 "Учим башкирский язык"**
**15.50 "Наруто". Мультсериал**
**16.15 "Поцелуй дракона"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.20" Спецрепортаж"**
**18.45 "Урал Лото ньюс"**
**18.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Джейн Эйр"**
**01.10 Прогноз погоды**

## 3 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 КВН-2010. Открытый кубок СНГ
00.10 "Закрытый показ". "Короткое замыкание". Киноальманах
03.10 "Операция "Медуза", 2-я часть
04.55 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 204-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 44-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Юрмала-2010"
22.55 "Девчата"
23.45 "Интервью с вампиром". Мистический триллер
02.15 "Спокойной ночи". Мелодрама
04.05 "Мой серебряный шар"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Мама в большом городе"
09.00 "В зоне особого риска"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "НТВшники"
21.55 "Жизнь без боли"
23.10 "Женский взгляд"
00.00 "За бортом". Комедия
02.15 "Вышибалы"
04.00 "Суд присяжных: главное дело"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Гора новостей" (на башк. яз.)**
**10.15 "Сулпылар"**
**10.35 "Бинди - девочка из джунглей"**
**11.00 "Эдера"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Под знаком Сатурна"**
**13.30 "Замандаш". К. Зиганшин**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Цирк в 13 метров"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Джейн Эйр"**
**17.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Омские ястребы" (Омск)**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.20 "Достучаться до небес"**
**00.55 Прогноз погоды**

## 4 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.30, 06.10 "Возврата нет"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.20 "Смак"
11.00 "Геннадий Хазанов. Мистический автопортрет"
12.15 "Голоса", 1-я-3-я серии. Сериал
16.00 "Оттепель". Мелодрама
17.40 "Кто хочет стать миллионером?!"
18.40 "Большие гонки"
20.00 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Минута славы. Продолжение"
22.10 "Прожекторперисхилтон"
22.50 "Детектор лжи"
23.50 "Что? Где? Когда?"
01.00 "Животное"
02.35 "Санкция на Пике Эйгера"
05.00 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.05 "Жестокость". Криминальная драма
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.30 "Подари себе жизнь"
10.05 "Формула совершенства"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.20 "Принцесса и нищенка". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Принцесса и нищенка". Сериал
16.20 "Новая Волна-2010". Лучшее"
18.15 "Десять миллионов"
19.15 "Ключи от счастья". Мелодрама (в перерыве - 20.00 "Вести в субботу")
23.50 "Отдаленные последствия". Мелодрама
02.00 "Декабрьские мальчики"
04.05 "Комната смеха"

### НТВ
05.25 "Сказки Баженова"
05.55 "Убийство на "Ждановской". Детектив
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Авиаторы"
09.25 "Живут же люди!"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.00 "Спето в СССР"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Последнее слово"
17.30 "Очная ставка"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум". Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.55 "Музыкальный ринг НТВ". "Супербитва"
00.20 "Пуленепробиваемый". Боевик
02.00 "Незваные гости"
04.15 "Суд присяжных"

### БСТ
**08.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**08.15 "Пчелка Майя"**
**09.35 "Бинди - девочка из джунглей"**
**10.00 "Детский час с "Тамыром"**
**11.05 Впервые на ТВ. "Прерванная судьба". Спектакль Башкирского государственного академического театра им. М. Гафури**
**13.30 "Тэмле"**
**14.00 "Дарю песню"**
**15.00 "Галерея изящных искусств"**
**15.20 "Достучаться до небес"**
**16.66 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск). Прямая трансляция**
**19.25 "Хрустальный соловей-2010"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**21.05 "Байман"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Етеган"**
**22.50 "Водитель для Веры"**
**00.45 "Свидание с джазом"**
**01.55 Прогноз погоды**

## 5 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Валентин и Валентина"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.15 "Побег", 1-я и 2-я серии. Криминальная драма
14.20 "Шрек-1". ". Полнометражный анимационный фильм
16.00 Концерт группы "Иванушки International"
18.00 "Лед и пламень"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 Познер"
00.00 "Как потерять друзей и заставить всех тебя ненавидеть". Комедия
02.10 "Гангстер № 1"
04.00 "Тайны Тихого океана", "Странные острова"

### РОССИЯ 1
05.10 "Командир счастливой "Щуки"
07.00 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Утренняя почта"
09.00 "Сто к одному"
09.45 "Городок"
10.20 "Местное время. Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Ты и я"
12.05 "Принцесса и нищенка". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Принцесса и нищенка". Сериал
16.15 "Улыбки друзей"
18.05 "Стиляги-шоу"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Подруги". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Два веселых гуся"
00.30 "Престиж". Драма
03.10 "Просто Саша"

### НТВ
05.15 "Сказки Баженова"
05.45 "Дикий мир"
06.20 "Мы с вами где-то встречались"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Дело темное. Тайна смерти Есенина"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Суд присяжных: главное дело"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски. Молочная отрава"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Человек ниоткуда". Боевик
23.55 "Нереальная политика"
00.25 "Список Шиндлера". Драма
03.35 "Жизнь без боли"

### БСТ
**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.15 "Легенда о большой лапе"**
**09.35 "Бинди - девочка из джунглей"**
**10.00 "Детский час с "Тамыром"**
**11.05 "На взлете". Творчество А. Абдразакова**
**11.50 "Тэмле"**
**12.20 "Бабушкин сундучок"**
**12.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Кузнецкие медведи" (Новокузнецк). Прямая трансляция**
**15.30 "Дарю песню"**
**16.35 "На своей земле"**
**17.00 "Водитель для Веры"**
**18.50 "Дорога к храму"**
**19.15 "Байык". Телевизионный конкурс любителей башкирского танца**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.35 "Новое кино"**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.15 "Полезные новости"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.10 "Вечер.com"**
**23.00 "Муз-базар"**
**23.30 "Побег"**
**01.35 Концерт**
**01.55 Прогноз погоды**

*✓ Рәсәй араҡы, һыра, тәмәке етештереүселәр өсөн ожмахҡа әйләнде. Бер өйөр тәмәке, араҡы һәм һыра лоббистарының байыуы фонында айырылышыуҙар, ташланған балалар, ғаиләләрҙә көс ҡулланыу һаны арта.*



ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...

**Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алыу тамамланды. Яңы статистик мәғлүмәттәр хәҙерге Рәсәйҙең ниндәй икәнен яҡшыраҡ аңларға ярҙам итер, моғайын. Халыҡ, әлбиттә, иҫәп алыуға скептик ҡарашта булды. Быға нигеҙ ҙә бар: ул тиҫтә йылдар буйы капиталь ремонт үткәрелмәгән дөйөм фатирҙа ни өсөн температураны үлсәүҙәрен, ярыҡтарҙы буяуҙарын аңламай.**

# ДӘҮЛӘТ МЕНӘН ХАЛЫҠ...

## нисек итеп өйҙәш йәшәй?

### Яҙмыш һайлауы

Статистика фәнендәге уңыштар арҡаһында власть статистик градусник менән ҡулланырға өйрәнде. Әммә иң мөһименә - халыҡты дауаларға өйрәнмәне. Халыҡтың сифаты кәмей. Сәләмәтлеге, белем кимәле насарая, көнкүреш мәҙәниәте төшә. Ғәҙеллек өсөн шуны әйтергә кәрәк, халыҡ үҙен-үҙе һаҡлап ҡалыу тураһында уйланмай. Урамда XXI быуат, ә беҙ бер быуындан икенсе быуынға үлемесле ғәҙәттәр һәм йолалар тапшырыуҙы дауам итәбеҙ. Эскелектең, тәмәке тартыуҙың зыяны тураһында күпме һөйләйҙәр, ә хәл-торош хәүефлерәк була бара. Рәсәй араҡы, һыра, тәмәке етештереүселәр өсөн ожмахҡа әйләнде. Бер өйөр тәмәке, араҡы һәм һыра лоббистарының байыуы фонында айырылышыуҙар, ташланған балалар, ғаиләләрҙә көс ҡулланыу һаны арта.

Әлбиттә, кеше үҙенең яҙмышы менән үҙе идара итә, тип фәлсәфә ҡорорға мөмкин. Утыҙ йәштә импотент булғың киләме - рәхим ит. Ҡырҡ йәштә кәртә аҫтында шешә ҡосаҡлап ятҡың киләме - үҙең һайлайһың. Илле йәштә инфаркт алғың киләме - рәхим итеп тәмәке тарт. Былар барыһы ла шәхси эш, шәхси һайлау. Әммә шундай миллион шәхси яҙмыштан милләт яҙмышы барлыҡҡа килә. Эске һаҙлығына батҡан, ҡырағайлана барған халыҡ милли мәҙәниәтенән яҙа, хәрби яҡтан көслө армияһын, модернизацияға һәләтен юғалта һәм ахыр сиктә үҙен үҙ яҙмышына ҡәтғиерәк ҡараған милләттәр хөкөмөнә тапшыра.

### Һәпәләк

Ә шул уҡ ваҡытта властың да сифаты насарая, алға киткән илдәрҙе ҡыуып тотоу ауырлашҡандан-ауырлаша бара. Модернизация темптары (ул ысын мәғәнәһендә тормошҡа ашырылған илдәрҙә) көсәйгәндән-көсәйә. Уҙған йөҙ йыллыҡтарҙа дәүләттең ҡеүәт нисбәте 50 йәки 100 йыл аҙымы менән үҙгәрә ине. Хәҙерге тарих аҙымы, бигерәк тә иҡтисади, индустриаль аҙым, ҡапыл ҡыҫҡарҙы. Еңелгән һәм оккупацияланған Япония американдар килтергән сәйәси һәм социаль модернизация һөҙөмтәһендә ни бары өс тиҫтә йыл эсендә донъяның алдынғы державаһына әүерелде. Донъяны таң ҡалдырып, Ҡытай, Көньяҡ Корея, Һиндостан, Бразилия ла алға ынтыла.

Был илдәрҙә модернизацияның мөһим стимулы - ул милли берҙәмлек. Бигерәк тә халыҡ ихтыяры менән власть ихтыяры бер йүнәлештә эшләгәндә уңыш ҡаҙаныла. Был Япония миҫалында яҡшы күренә. Модернизация япондарҙың диненә әүерелеп бара. Беҙҙә ундай берҙәмлек юҡ. Социологтар хәүефләнеү менән милләттең фрагментацияһы хаҡында белдерә. Власть модернизация флагын болғай, халыҡ иһә, юғары бюрократия байып ҡалыу мөмкинлеге биргән хәл-торошто нығытыуҙы хәстәрләй, тип иҫәпләй. ВЦИОМ-дың генераль директоры Валерий Федоровтың һүҙҙәренсә, һарайҙарҙан - туҡлыҡ мыжыуы, хижиналарҙан - аслыҡ шыбырлауы ишетелә. Айырым "фрагменттар"ҙың тормош кимәлендәге ҙур айырмаһы сәйәси берҙәмлекте юғалтыуға ла килтерә. Рәсәйҙә коллектив модернизацияға һорау булмауына ла аптырайһы түгел.

### Иҫке йырҙар

Эксперттар беҙҙе "дәғүәселек өҫтөнлөгө" тураһындағы гәп менән тынысландыра, сеймал запасы күпмегә етеүен фаразлай. Берәүҙәр, йөҙ йылға, тиһә, икенселәр, ике йөҙ йылға, тип ебәрә. Әммә энергияны һаҡлау технологиялары өлкәһендәге донъяуи хәл-торош шул тиклем тиҙ үҙгәрә, "өҫтөнлөктәр" бер нисә тиҫтә йыл эсендә осоп бөтөүе мөмкин. Ул ваҡытта нимә? Матбуғат сараларында Украина һәм Аргентина бөртөклө культуралар үҫтереү өсөн ауыл хужалығы ерҙәрен һатыу тураһында һөйләшеүҙәр алып бара, тигән һүҙҙәр күренгеләне. Беҙгә бындай тәҡдим менән сыҡҡандары юҡ әле. Әммә артта ҡалыу дауам итһә, ә "дәғүәселек өҫтөнлөктәре" осоп юҡҡа сыҡһа, беҙгә лә ғәрәп сауҙагәрҙәре килмәҫме? "Килһә һуң, - тиер изге күңелле чиновниктар, - урман, ер аҫты байлыҡтарын һатабыҙ бит..." Иркутск өлкәһендә әле үк Байкал һыуын ситкә ҡыуҙырырға теләүселәр бар икән. Шулай булғас, ниңә ерҙәрҙе һатмаҫҡа. Рәсәй ҙур, ә халыҡ кәмегәндән-кәмей...

"Иҫәп алыусылар килде, тегеһен, быныһын һоранылар. Ә иң мөһимен - беҙ тауыш биргән властың нисек аталыуын һорамадылар, - тип яҙа Вера Дубинина тигән авторыбыҙ. - Беҙҙә халыҡ бигерәк изге күңелле шул. Минән һораһалар, әйтер инем!"

**Вячеслав КОСТИКОВ.**
**"Аргументы и факты" гәзитенән.**

ЙӘШЕЛ ДАУА

## ГӨЛЙЕМЕШ (ӘЛМОРОН)

**Әбүғәлисина: "Гөлйемеш бауыр һәм ашҡаҙан өсөн файҙалы, шештәрҙе бөтөрә, баш ауыртыуын һәм күҙ ауырыуҙарын баҫа", - тип яҙып ҡалдырған.**

Бөйөрҙә, үттә, һейҙек ҡыуышлығында, простата биҙендә һәм башҡа ағзаларҙа таш булыуы. Гөлйемеш емештәре бауырҙарҙан, һейҙек һәм үт ҡыуығынан таштарҙы ауыртыуһыҙ сығара. Шуға ла ҡышҡылыҡҡа гөлйемеште күберәк итеп киптереү мөһим. Ул былай эшләнә: емештәрҙе урталай бүлергә, орлоҡтарын алырға. Ҡояштан, ямғырҙан һәм бөжәктәрҙән һаҡлап, асыҡ һауала киптерергә. 3 ҡалаҡ емешкә бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнәтергә. Ике аҙна дауамында бәләкәй өлөштәргә бүлеп эсергә. Өсөнсө аҙнаға дозаны яртыһына тиклем кәметергә һәм көнөнә 4-5 тапҡыр йотомлап эсергә. Дауаланыу курсы өс аҙна. Был дауаны һәр миҙгел һайын ҡабатларға кәңәш ителә (йыл дауамында көнөнә өс тапҡыр берәр стаканлап эсергә лә мөмкин, был һеҙҙең ағзаларығыҙҙа күпме таш йыйылыуынан тора).

**Хәлһеҙлек.** 2 стакан емеште иҙергә, 3 стакан шәкәр менән бутарға һәм 3 стакан һыу ҡойорға. 5 көнгә ҡояшҡа ҡуйырға, һуңынан 2 стакан һыу өҫтәргә һәм тағы ла ҡараңғы һалҡынса урында 5 көн төнәтергә. Һырҡытырға, емештәрҙе яҡшы итеп һығырға. Көнөнә 2 тапҡыр ашағандан һуң 20-30 минуттан 1 ҡалаҡлап ҡабул итергә. Хәлһеҙлек башланып, организм ауырыу тураһында хәбәр итә башлаған саҡта яҡшы тәьҫир итә. Ошо ысул менән күп төрлө ауырыуҙарҙан ҡотолорға була.

**Быуындар шешеүе.** 5 ҡалаҡ гөлйемеш сәскәһенә 0,5 л аш һеркәһе ҡойорға кәрәк. Башта бер тәүлек төнәтергә, һуңынан ҡайнатырға һәм 5 минут бешерергә. Состав әҙер. Бер нисә көн быуындарға һөртөргә, шеш шунда уҡ ҡайтыр (бөткәнсе үк дауалай тип әйтеп булмай, артабан башҡа төрлө дауалау саралары кәрәк буласаҡ).

**Гипотония** (бигерәк тә ауырлы йәки имеҙгән ҡатындарҙа түбән ҡан баҫымы булған саҡта). 100 г емеште порошок кеүек иҙергә һәм 0,5 л араҡы ҡойорға. 1 аҙна төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 20-25 тамсы ҡабул итергә.

**Ҡолаҡтың эренләп шешеүе.** Гөлйемеш сәскәләренән ҡаты сәй бешерергә, кишер һуты менән бутарға һәм әҙ генә ҡаймаҡ өҫтәргә. Эренләп ауыртҡан саҡта ҡолаҡ эсенә һалырға.

**Простатит.** Емештәрҙе киҫергә, орлоҡтарынан таҙартырға, киптерергә. Гөлйемеш емештәре сәйе простатитты дауалай. 1 ҡалаҡ емеште бер стакан ҡайнар һыуҙа бешерергә, йылыла 30-40 минут төнәтергә һәм эсергә. Емештәрен ашарға мөмкин.

**Ябыҡлыҡ, дистрофия, астения, ныҡ хәлһеҙлек.** 2 балғалаҡ иҙелгән емеште берәр балғалаҡ һары мәтрүшкә, меңъяпраҡ сәскәһе, 300 г аҡ май, 600 бал менән болғатырға. Май менән балды алдан һыу быуында иретергә, өҫтөнә үлән онтағы һибергә, бутарға. Һәр сәғәт һайын 1-2 балғалаҡ ҡабул итергә.

**Иҫкәрмә! Гөлйемеш төнәтмәһе теш эмален боҙа, шуға күрә уны ҡулланғандан һуң ауыҙҙы һыу менән яҡшы итеп сайҡатырға кәрәк. Гөлйемеш емештәренең спиртлы төнәтмәһе ҡан баҫымын күтәрә (ә һыуҙағы төнәтмәһе, киреһенсә, төшөрә).**

**Рим ӘХМӘДОВ.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ноябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Мәсетле районы** Сөләймән ауылынан Рәзилә Хафизованы, Әбдрәхим ауылынан Зөлфиә Ғәйфуллинаны, **Салауат ҡалаһынан** Флүзә Хәбибуллинаны, **Әбйәлил районы** Ишҡол ауылынан Зилә Ҡаһармановны, Амангилде ауылынан Зилә Мостафинаны, **Хәйбулла районы** Баҡал ауылынан Риназ Иҫәнъюлов, **Ғафури районы** Бәләкәй Үтәш ауылынан Римма Рафиҡованы, **Баймаҡ районы** Үрге Йәйыҡбай ауылынан Әйүп Рәсүлевты, Таңһылыу Рәсүлеваны, Икенсе Этҡол ауылынан Ғәфүр Ғүмәровты, Урғаҙа ауылынан Мәхмүтйән Йәрмөхәмәтовты, Семеновск ауылынан Ләйлә Мырҙағәлина-Иҫәнбаеваны, **Дыуан районы** Иҫке Хәлил ауылынан Зиләрә Низамованы, Ҡадир ауылынан З. Хилажеваны, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Л. Кирәеваны, **Ауырғазы районынан** Зөһрә Рәхмәтуллинаны, Гөлназ Ғафарованы, Яңы Атйетәр ауылынан Әлмира Аҡбашеваны, **Әлшәй районы** Ҡыпсаҡ ауылынан Гөлсинә Кәримованы, **Дәүләкән районы** Ҡырҙас ауылынан Мәрйәм һәм Хәниф Әхмәтйәновтарҙы, **Салауат районы** Арҡауыл ауылынан Илнур Ҡазыхановты ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм рух ныҡлығы, тән сәләмәтлеге теләйбеҙ! **Көн һайын бәләкәй генә булһа ла уңыштарға өлгәшеп, еңеүҙәр яулап, Хоҙай Тәғәлә мәрхәмәттәренә өлгәшеп йәшәргә яҙһын һеҙгә.**

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 декабрҙә** халыҡ йырҙарынан ғына торған **"Халҡым моңо"** тигән ҙур концерт була. Абдулла Солтанов, Флүрә Килдейәрова, Миңлеәхмәт Ғәйнетдиновтар менән бер рәттән сәхнәлә йәш башҡарыусылар - Әлфиә Заһиҙуллина, Вәхит Хызыров, Азамат Тимеров, Хәлит Фәтихов, Римма Амангилдина, Әлфиә Юлсурина, Радик Вәлмөхәмәтов, Венера Рәхмәтуллина, Айгиз Ғизәтуллин, "Далан", "Ҡарауанһарай" төркөмдәре, атаҡлы ҡурайсылар сығыш яһаясаҡ.

**11 декабрҙә** Зәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыу уңайынан йәш "Ҡарауанһарай" төркөмө **"Данлы юлдан атлай ғорур Башҡортостан!"** тип аталған концерт программаһын тәҡдим итә. Программаны йәш режиссер Илшат Фәхертдинов сәхнәләштергән.

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**27-28 ноябрь "Гипнотизер"** (В. Сигарев), комедия.

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**27 ноябрь "Ромео һәм Джульетта"** (У. Шекспир), трагедия.
**28 ноябрь "Эх, егеттәр, егеттәр"** (Б. Аппаев), комедия.
**30 ноябрь "Мөхәббәт китабы"** (И. Вәлиева), әкиәт. Башлана 11.00.
**30 ноябрь "Йәләлетдин атай"** (М. Кәрим), уйланыуҙар.

ИҒЛАН

Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, йыл хужаһы - Ҡуян һәм башҡа әкиәт геройҙары башҡорт телендә Яңы йыл байрамдары, тыуған көндәр үткәрә. Әкиәт геройҙары реклама акцияларында ла ҡатнаша ала. Шарҙарҙан яһалған ҡуян, ҡар бабай, шыршы менән байрам залдарын да биҙәйбеҙ.

Телефондар: **251-14-76, 8-937-33-55-235, 8-917-40-06-894. www. afarin-ufa.ru**

АФАРИН!



Дмитрий АЙСЫУАҠОВ фотоһы.

# ЕГЕРМЕ ЙЫЛДАН ҺУҢ ...

## "Ташлама утты, Прометей!" тағы сәхнәлә

**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында М.Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!" трагедияһы буйынса сәхнәләштерелгән яңы спектакль тамашасы хөкөмөнә сығарылды. Ошо уңайҙан, спектаклде сәхнәгә ҡуйыусы режиссер, Рәсәй театр сәнғәте академияһының сығарылыш студенты Айнур СӘФИУЛЛИНға мөрәжәғәт иттек.**

- Мин быйыл Рәсәй театр сәнғәте академияһын тамамланым. М.Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!" трагедияһы буйынса ҡуйылған спектакль - диплом эшем. Шулай уҡ ошо әҫәр менән республика кимәлендә үткәреләсәк башҡорт театрҙары фестивалендә лә ҡатнашырға тигән уй-ниәтем бар. Рәсәй театр сәнғәте академияһына уҡырға ингәндә лә ошо трагедияға мөрәжәғәт иткәйнем. Биш йыл уҡыу дәүерендә уның тураһында бер аҙ онотоп торорға тура килде, сөнки уҡыу ярайһы ғына ауыр булғанға күрә, ныҡ тырышлыҡ талап итте. Әле бына театр милли драматургия әҫәре эҙләгән ваҡытта мин үҙемдең режиссер багажында әҙер ятҡан ошо трагедияны иҫемә төшөрҙөм һәм театр коллективына уны сәхнәләштерергә тәҡдим иттем. Улар минең тәҡдимемде хупланы һәм беҙ актерҙар менән спектакль өҫтөндә эшләй башланыҡ.

"Ташлама утты, Прометей!" трагедияһы миңә шул тиклем оҡшай, уны уҡыған һайын фекерҙәремдең тәрәнәйеүен тоям. Ниңәлер күптәр, тап ошо әҫәр өҫтөндә эшләргә ҡурҡманыңмы, тигән һорауҙы бирә. Бәлки, бер аҙ ҡурҡыҡандыр ҙа, шулай ҙа күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй, тиҙәр бит. Башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондына ингән әҫәр юғары фәлсәфәүи мәғәнә, изгелек һәм романтизм рухы менән һуғарылған, кешене уйланырға, тетрәнергә, ғәжәпләнергә мәжбүр итә. Трагедияла авторҙың фәлсәфәһе боронғо гректар фәлсәфәһе менән йәнәш үрелеп бара. Ә боронғо гректар мифы үҙендә ниндәй генә серҙәр йәшермәй: донъяның барлыҡҡа килеү төшөнсәләре, йыһандағы көстәрҙең кешелеккә тәьҫир итеүе, кешеләрҙең бер-береһенә булған мөнәсәбәттәренең һәм тәбиғәт күренештәренең төрлөлөгө. Ә режиссер буларак, минең төп бурысым - әҫәрҙең төп йөкмәткеһен юғалтмай, авторҙың фекерҙәрен, маҡсаттарын һәм уй-хыялдарын сайпылдырмай ғына тамашасыға еткереү. Режиссер һөнәренең асылы нәҡ ошонда ла инде. Ниндәй генә әҫәр булмаһын, уны әҙерләп сәхнәгә сығарыуы бер ваҡытта ла еңел түгел. Автор алдыбыҙға бик күп һорауҙар ҡуя, ауыр бурыстар билдәләй. Ана шул һорауҙарға яуап табып, бурыстарҙы башҡарып сыҡҡан ваҡытта ғына әҫәр сәхнәлә үҙ урынын табасаҡ.

"Ташлама утты, Прометей!" спектакле өсөнсө тапҡыр сәхнәгә сыға. Беренсе тапҡыр уны бынан ике тиҫтә йыл элек үҙ заманының арҙаҡлы режиссеры Рифҡәт Исрафилов Башҡорт дәүләт академия драма театрында сәхнәләштерә. Был әҫәр Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында ла ҡуйыла.  Шулай ҙа беҙ ҡуйған спектаклде Рифҡәт Исрафилов ҡуйған спектаклдең яңы версияһы, тип ҡабул итергә ярамай. Был юлы әҫәр бөтөнләй икенсе яҡтан асыла. Ремейк эшләр өсөн уны иң тәүҙә ҡарарға кәрәк, ә миңә ул спектаклде күрергә тура килмәне. Театр эстетикаһы бик тиҙ үҙгәрә, был ваҡыт арауығында быуындар ҙа алмашынып өлгөрҙө һәм бөгөнгө көндә Прометей образы бөтөнләй икенсе төрлө балҡый.

Мине ихлас ҡабул иткәндәре һәм спектаклде әҙерләп, сәхнәгә сығарыуҙа ҙур ярҙам күрһәткәндәре өсөн М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры коллективына ҙур рәхмәтемде белдереп уҙам һәм уларға артабан да ижади уңыштар теләйем. Беҙ был спектаклде лайыҡлы башҡарып сығара алғанбыҙҙыр, тип ышанам...

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

## ИНАБАТ, ЫЛАҢҠЫ, МӘСЕЛМӘ...

◆ Һыуыҡ, еүеш, ырашҡы яуған көндө **"мәселмә көн"** тип атағандар беҙҙең яҡтарҙа.

◆ **"Инабатһыҙ"** һүҙе "мәрхәмәтһеҙ" тигәнде аңлата. - "Инабаты юҡ уның!" - тип, мәрхәмәтһеҙ, шәфҡәтһеҙ кешегә әйтелә.

◆ **"Ауыҙҡалланыу"** тигән һүҙ, "иҫе инәрле-сығарлы булыу"ҙы аңлатҡан. - Ай, был Шәмсиниса апайым ауыҙҡалланып киткән бит, - тигәндәр ундайҙар хаҡында.

◆ **"Биҙа"** һүҙе "ыҙа" тигәнде аңлата ("беда" һүҙенән алынғандыр, күрәһең!). - Ҡыҙымды уҡытҡанда, бер биҙаһы ла теймәне, - тигәнде ишеткәнем булды.

◆ **"Ылаңҡы"** һүҙе "мәшәҡәт" тигәнде аңлата. - Уларҙың беҙгә ылаңҡыларынан башҡа, нимәләре тейә? - тип әйтәләр мәшәҡәт һалған туғандарына ҡарата.

**Земфира АҠБУТИНА,**
**Ейәнсура районы Ибрай ауылы.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕ ТОРМОШО...

## сәйәхәт итеүсе күләгә һымаҡ

Кеше тормошо бер ҡап шырпы һымаҡ. Уға етди ҡараһаң - көлкө, етди ҡарамаһаң - ҡурҡыныс.

**(А. Рюноскэ).**

Кеше тормошо тимер һымаҡ. Уны эшкә екһәң - ул туҙа,  ҡулланмаһаң -тутыҡ баҫа.

**(Катон).**

Кеше тормошо ағын йылға һымаҡ: туҡтауһыҙ бер үк ағыш, әммә һәр саҡ таҙа һыу.

**(Г. Торо).**

Үлем     менән йәшәү бер тиң хоҡуҡлы: улар бер береһенән башҡа йәшәй алмай.

**(А. Дальсем).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер йәш үҫмер аҡыл эйәһе булған ҡарт эргәһенә килә һәм:"Әфәндем, һинең кеүек аҡыл эйәһе дәрәжәһенә етеү өсөн мин нимә эшләргә тейешмен?" - тип һорай. Аҡһаҡал уға яуап бирмәй. Үҫмер кире боролоп китә, ләкин иртәгәһенә шул уҡ һорау менән тағы килә. Был юлы ла аҡһаҡал уға бер ни тип тә яуап бирмәй. Үҫмер өсөнсө көнөнә лә килә һәм: "Әфәндем, һинең кеүек аҡыл эйәһе дәрәжәһенә етеү өсөн мин нимә эшләргә тейешмен?" - тигән һорауын ҡабатлай. Аҡһаҡал урынынан тора һәм үҫмергә үҙ артынан эйәрергә ишаралап, йылғаға табан йүнәлә. Килеп еткән ыңғайы һыу эсенә инеп китә, үҫмер ҙә уның артынан эйәрә. Муйын тәңгәленәсә тәрәнлеккә еткәс, аҡһаҡал үҫмерҙе башынан тотоп һыуға сумыра һәм уны, бар көсөнә тыпырсыныуына ҡарамаҫтан, тыны бөткәнсе сығармай тота. Үҫмер инде тонсоғам тигәндә һыу өҫтөнә килеп сыҡҡас, аҡһаҡал унан: "Шунан, улым, һыу аҫтында булғанда һин барыһынан бигерәк нимә теләнең?"- тип һорай. Үҫмер бер ниндәй икеләнеүһеҙ яуап бирә: "Һауа! Һауа! Бары тик һауа теләнем!" Аҡһаҡал: "Ә һин байлыҡ, власть, мөхәббәт тураһында уйламаныңмы ни?" -тип ныҡыша. "Юҡ, әфәндем, мин бары тик һауа тураһында ғына уйланым",- тип яуаплай үҫмер. "Ул саҡта һинең алдағы һорауыңа яуап шулай булыр: һин минең кеүек аҡыл эйәһе дәрәжәһенә күтәрелер өсөн аҡылды ла әле генә һауа көҫәгән көс менән көҫәргә, уны бөтөн башҡа маҡсаттарыңдан өҫтөн ҡуйырға тейешһең. Аҡыл туплауға шундай ныҡышмалылыҡ менән ынтылһаң, һис шикһеҙ, аҡыл эйәһе буласаҡһың..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы,**
**Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 4739